ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

15-21 апрель (алағарай) 2023

№ 14 (1056)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


"Ағиҙел" журнал ғына түгел.

Ул халыҡ күңеленең сағылышы.



8-9,11

Уйҙарға уйылыр спектакль



11

Алма, йөҙөм үҫтерәм...



12

"Бер көн уҡыу...

70 йыл ғибәҙәт ҡылыуҙан яҡшыраҡ"



13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Ташламалы хаҡҡа яҙыл!* Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, *10 апрелдән* ПР905 индекслы *"Киске Өфө"* гәзитенә *2023 йылдың икенсе яртыһы* өсөн ташламалы хаҡ менән *738 һум 36 тингә* (бынан алда бирелгән хаҡ яңылыш киткән, ғәфү үтенәбеҙ) яҙыла алаcаҡһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

*Һуңғы сирек быуат эсендә мәктәптәр тәрбиә эшенән ситләште һәм белем биреү буйынса ғына "хеҙмәт күрһәтеү"гә күсте. Хатаны төҙәтеү маҡсатында тәрбиә эштәре хәҙер закон нигеҙендә атҡарыласаҡ. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа илһөйәрлек тәрбиәһе биреү тураһында закон ҡабул итергә йыйыналар. Ошо хаҡта фекерегеҙ ниндәй булыр?*

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе:*** Йәштәргә илһөйәрлек тәрбиәһе биреү мәсьәләһе беҙҙе күптән борсой. Былтыр уҡ әле, октябрь аҙаҡтарында, ошо хаҡта парламент тыңлауҙары үткәргәйнек. Унын эшендә депутаттар, БР мәғариф министры, йәштәр сәйәсәте буйынса, шулай уҡ урындарҙағы үҙидара органдары һәм йәмәғәт ойошмалары, мәғариф учреждениелары, хәрби комиссариаттар вәкилдәре ҡатнашты.

**Берәүгә лә сер түгел, Советтар Союзы тарҡалыуға дусар ителеп, илдәге партия сәйәсәте системаһы юҡҡа сыҡҡас, илһөйәрлек мәсьәләләре һәм, ғөмүмән, тәрбиә эштәре, бигерәк тә мәктәптәрҙә, туҡтап ҡалғандай булды, ул ижтимағи тормошобоҙ төпкөлөнә, икенсе планға күсте. Ул ғына ла түгел, йәштәр аңына "Америка хаҡында хыял", Көнбайышса йәшәү рәүеше идеялары һеңдерелә башланы. Быниң менән Көнбайыш сәйәсәте Рәсәйҙе көсһөҙләндереү, уны бойондороҡһоҙ дәүләт статусынан яҙҙырыу маҡсатын ҡуйҙы. Уларҙы беҙҙең ил фәҡәт сеймал сығанағы булараҡ ҡыҙыҡһындыра - уларҙың бөтөн донъя хеҙмәт бүленеше тип аталған сәйәсәте сиктәрендә Рәсәйгә тап ана шундай роль әҙерләп ҡуйылған да инде. Ләкин беҙ быныӊ менән һис тә килешә алмайбыҙ. Бөгөнгө көндә шуның өсөн дә Рәсәйҙең НАТО блогы илдәре менән хәрби ҡапма-ҡаршылыҡта тороуы яҡшы аңлашыла.**

Эйе, еңелдән түгел беҙгә. Үкенескә, бөгөнгө быуын йәштәрендә ниндәйҙер "етлекмәгәнлек" бар кеүек тойола. Ә бит илһөйәрлек тойғоһо кешене шәхес итеп күтәрә, тап ошо тойғо һәм үҙ иленә, халҡына бирелгәнлек кешенең әхлаҡи нигеҙен, асылын билдәләүсе төп сифаттарҙың иң мөһиме. Тап илһөйәрлек һәм милли идея йәмғиәтте берҙәм итеп туплап, ойоштороп тороусы көс ул. Дөрөҫ, был йүнәлештә, һис шикһеҙ, билдәле уңыштар бар ул, ләкин илһөйәрлек тәрбиәләү өлкәһендә дөйөм милли кимәлдәге туплаусы, көйләүсе эшмәкәрлек етешмәй, тип әйтер инем. Был юҫыҡта эшләүсе ҡайһы бер федераль программалар йыш ҡына һәр береһе үҙ "ҡаҙанында" ҡайнай, берҙәм түгелдәр. Шуның өсөн дә был йәһәттән федераль закон нигеҙендә эш итеү маҡсатҡа ярашлы һәм һөҙөмтәле буласаҡ, тип ышанам. Илһөйәрлек тәрбиәләү буйынса федераль закон төбәктәрҙәге эш тәжрибәләренә таянып, урындарҙа эште системалы һәм ойошҡан рәүештә алып барырға булышлыҡ итәсәк. Ҡабул ителәсәк законда патриотик тәрбиә биреү субъекттары даирәһе, уларҙың яуаплылыҡ һәм булдыҡлылыҡ кимәле билдәләнергә тейеш. Патриотик тәрбиә биреүҙең маҡсаттарын, бурыстарын, принциптарын, ҡиммәттәрен, ысулдарын һәм төп йүнәлештәрен мөмкин тиклем аныҡыраҡ кимәлдә асыҡлау кәрәк.

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЙӘШ КЕШЕМЕН...

## әммә гәзит уҡыйым

**Мин интернетһыҙ заманды белмәгән һәм күрмәгән йәш кеше, йәғни мин тыуғанда кәрәҙле телефон да, интернет та киң таралғайны инде. Хатта мин стационар телефонды ла мәктәп директоры бүлмәһендә тәүге тапҡыр күрҙем. Беҙҙең быуын мәғлүмәти ҡытлыҡ кисермәне, хатта уның артығы менән беҙгә яуыуына бәләкәйҙән өйрәнеп үҫтек, тимәксемен.**

Минең тиҫтерҙәрҙең мәғлүмәти сығанағы интернет булып, күптәре ҡағыҙ гәзит-журналдар тотоп ҡарамаһа ла, мин уларҙың тап киреһе. Өйөбөҙгә әле булһа тиҫтәгә яҡын ваҡытлы матбуғат килә һәм уларҙың һәр береһен ентекләп ҡарап сығам, уҡыйым. Шулай ҙа улар араһында иң күңелемә яҡыны - "Киске Өфө" гәзите.

Нимәһе менән оҡшай һуң был баҫма? Иң беренсе, уның бер юлы күп битле баҫма булыуы оҡшай. Ял көнөндә рәхәтләнеп ултырып, ҡағыҙҙы ҡыштырлатып уҡыуы - үҙе бер ғүмер. Тәүҙә гәзиттә мин "Зыялылар майҙаны" рубрикаһын уҡып сығам. Күпмелер ваҡытҡа юғалып торған был рубриканың киренән тергеҙелеүе һөйөндөрә. Шулай уҡ "Әйт, тиһәгеҙ" ҙә бик шәп рубрика, сөнки зыялылар ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙ үҙенең мөһимлеге, актуаллеге һәм дөрөҫлөгө менән айырылып тора.

Тағы ла ай башында донъя күргән "Был айҙа..." рубрикаһы бик мәғлүмәтле. Бер кем дә "Ҡана ҡарайым, был айҙа ниндәй юбилей даталары билдәләнә лә ниндәй мөһим ваҡиғалар була", тип, маҡсатлы рәүештә мәғлүмәт эҙләп ултырмай. Ә был рубриканы алып барыусы барыһы хаҡында ла тулы, аныҡ һәм матур итеп яҙып сыға.

(Дауамы 3-сө биттә).




12+

***✓ Ҡайҙа әсә теле, туған әҙәбиәт һәм Башҡортостан тарихы өйрәнелә, был дәрестәр теге йәки был кимәлдә республикабыҙҙың данлы үткәненә, бөгөнгөһөнә бәйләп алып барыла.***

БАШ ҠАЛАМ



# ӨФӨ ТАРТТЫ,

## күсеп ҡайттыҡ

**Өфөлә тыуып үҫһәм дә, яҙмыш елдәре алыҫ Үзбәкстан яҡтарына илтте һәм мин унда теүәл 40 йыл ғүмер иттем. Торған еремде яманламайым, ләкин тыуған яҡтарымды һағыныуға түҙә алмай, илаған саҡтарым күп булды. Йыл һайын Башҡортостанға ҡайтып йөрөһәм дә, һағыныу хистәрем шул тиклем көслө ине, хаҡлы ялға сыҡҡас та Өфөмә әйләнеп ҡайттым. Хәҙер баш ҡалала йәшәгәнемә 5 йыл да булып килә, ниһайәт, күңелем үҙ урынына ултырып, тормошом теүәлләнеп ҡалды. Айырыуса балалар ҙа бында ҡайтып урынлашҡас, донъям түңәрәкләнде.**

Өфөгә ҡайтып-китеп йөрөгәндә әле уның йыл һайын үҙгәреп тороуына иҫем китә ине, хәҙер үҙем даими йәшәй башлағас, был үҙгәрештең ни тиклем тиҙ темптар менән барыуын күреп торам. Әле бына күптән түгел генә Һупайлы биҫтәһенә юл төштө. Тауҙан төшөп барышлай күҙәтәм - биҫтә үҙе бер ҙур ҡала кеүек икән дә ул, осо-ҡырыйы ла күренмәгән кеүек. Улыма: "Бында кешеләр ҙә икенсе һымаҡ",- тиһәм, ҡысҡырып көлдө лә: "Әсәй, барыһы ла шул өфөләр инде", - тип яуап бирҙе. Бәлки шулайҙыр, ләкин бында әллә ниңә тормош һәлмәгерәк аҡҡандай тойолдо, кешеләре лә ашыҡмаған кеүек, хатта магазиндарында ла яйлап ҡына һатыу итеп торалар. Урамдары төҙөк, йорттарының күбеһе бер иш кенә. Һәм, иң мөһиме, йорттарҙың тышына ҙур итеп адрестар яҙып ҡуйылған. Өфөнөң үҙәгендә, Октябрь проспектында, ғөмүмән, баш ҡаланың күп урамдарында кәрәкле адресты тапмай йөрөгән саҡтар йыш була ул. Бигерәк тә минең кеүек күҙҙәре яҡшы күрмәгәндәргә ауыр - йә ул адрестар бәләкәй генә итеп яҙылған, йә бөтөнләй юҡ.

Өфөнөң тарихи үҙәгендә тиемме, Ленин һәм уға яҡын урамдарҙа баш ҡаланың теге йәки был объекты тураһында мәғлүмәт яҙылған алтаҡталар (таблички) урынлаштырып бөтөлгән. Ләкин шул уҡ Һупайлыла һәм башҡа ҡырҙараҡ ятҡан урындарҙа улар юҡ. Ә ни өсөн Өфөнөң һәр районында, кеше иң күп йөрөгән урынға, баш ҡалалағы, республикалағы иҫтәлекле урындар, тәбиғи мөғжизәләребеҙ, билдәле кешеләребеҙ тураһындағы мәғлүмәттәр ҡуймаҫҡа? Был туристар өсөн генә түгел, урындағы халыҡҡа ла файҙалы булыр ине.

Йәштәр күп бөгөн, Аллаға шөкөр. Балалар, йәштәр күп икән, киләсәгебеҙ бар, тимәк. Шулай ейәнем юғары уҡыу йортонда белем ала һәм дуҫтары менән "Йәшлек House" тип аталған урынға йөрөйҙәр, төрлө саралар уҙғаралар, ғөмүмән, йәштәрҙең ятаҡан урынына әйләнгән был йорт. Йәштәрҙе уйлап, уларға махсус йыйылыр урын булдырғандарға ҙур рәхмәт. Ғөмүмән, йәштәр тураһында онотмай ҡала хакимиәте - "Арт квадрат" гөрләп эшләп тора, ҡала парктарында спорт менән шөғөлләнеү өсөн махсус урындар булдырғандар, шул уҡ велосипедта йөрөргә яратыусылар өсөн шарттарҙы яҡшырталар, һәм башҡалар. Ләкин, яңылышмаһам, бынан 8 - 9 йыл элек юҡ ителгән урам кафелары яңынан баш ҡалҡыта башланы. Мәҫәлән, Ҡунаҡһарай алдындағы майҙансыҡта былтыр йәй иҫерткес эсемлектәр һатҡан йәйге кафелар күп булды. Ни өсөн уларҙы кире ҡайтарҙылар? Оҙаҡламай, элекке кеүек үк, шунда уҡ бәҙрәфтәр ултыртып бөтмәҫтәр, тимә. Ошо мәсьәләне күҙ уңынан ысҡындырмаһындар ине, кеше күп йөрөгән урындарҙы бындай эскелек ояларын менән тултырыуҙан һаҡланайыҡ, йәмәғәт.

Өфөбөҙ матур, ҙур, йәшел ҡала. Уның төҙөклөгөн, таҙалығын тик ҡала хакимиәтенә генә ҡайтарып ҡалдырмайыҡ, иң мөһиме, үҙебеҙ ҡул һелтәп ҡарамайыҡ, бер көн менән генә йәшәмәйек, киләһе быуынға ғорурланырлыҡ матур ҡала ҡалдырайыҡ.

**Сәкинә ҒӘҘЕЛШИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Һуңғы сирек быуат эсендә мәктәптәр тәрбиә эшенән ситләште һәм белем биреү буйынса ғына "хеҙмәт күрһәтеү"гә күсте. Хатаны төҙәтеү маҡсатында тәрбиә эштәре хәҙер закон нигеҙендә атҡарыласаҡ. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа илһөйәрлек тәрбиәһе биреү тураһында закон ҡабул итергә йыйыналар. Ошо хаҡта фекерегеҙ ниндәй булыр?***

***Тимерйән РӘЖӘПОВ, "Хәрби хәрәкәттәр ветерандарының Башҡортостан берлеге" йәмәғәт ойошмаһы рәйесе, БР Йәмәғәт палатаһы ағзаһы, "Халыҡтар дуҫлығы" ордены, "Хәрби ҡаһарманлыҡ өсөн" һәм башҡа миҙалдар кавалеры:*** Закон, әлбиттә, кәрәктер, ләкин заманында ике йыл буйына Афғанстанда, унан Чечняла хәрби сынығыу үткәндән һуң һәм бигерәк тә 2009 йылда "Хәрби хәрәкәттәр ветерандары" берлеге етәксеһе итеп һайланғандан һуң бөтөн булмышымды йәш быуынға илһөйәрлек, хәрби-патриотик тәрбиә биреүгә бағышланым, был минең тормош асылыма, йәмәғәтселек эшмәкәрлегемдең төп законына әйләнде, сөнки яу ҡырҙарында алған тәжрибәм һәм инаныуым шуны күрһәтте: Тыуған илебеҙ һағында ватанын эскерһеҙ һөйгән, әҙерлекле, белемле егеттәр торорға тейеш; улар үҙ илебеҙҙе генә түгел, беҙҙең ярҙамға мохтаж теләктәш һәм дуҫ илдәрҙә интернациональ бурыстарын үтәргә лә әҙер булырға тейештәр. Ошо йылдар эсендә республикабыҙ мәктәптәрендә һәм юғары уҡыу йорттарында иҫәпһеҙ күп осрашыуҙар үткәрелде, унда мин үҙемдең хәрби иптәштәрем - батыр интернационалист яуҙаштарым, уларҙың ҡаһарманлыҡтары хаҡында һөйләнем, улар менән, шулай уҡ иҫән ҡалған Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары менән дә осрашыуҙар үткәрҙем.

Шул уҡ ваҡытта балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәребеҙҙе 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар тарихы ла ныҡ ҡыҙыҡһындырғанын күрә инем. Генерал Шаймуратов хаҡында һөйләгәндә, уларҙың ҡараштары осҡонланып, дәртләнеп китәләр ине. Бөгөн был хаҡта айырыуса яратып тыңлайҙар, сөнки баш ҡалабыҙ Өфөлә Шаймуратов генералға монументаль һәйкәл асылыуы хаҡында бөтәһе лә белә һәм бында экскурсияға ҡалаларыбыҙҙан ғына түгел, алыҫ ауылдарҙан да килә уҡыусылар. Был майҙан бөгөн ысын мәғәнәһендә йәштәребеҙҙә илһөйәрлек тәрбиәләү үҙәгенә әүерелде, тип әйтер инем. Мәктәптәрҙә шаймуратовсылар кластары барлыҡҡа килеүе, ошо исемде йөрөтөүгә лайыҡ булыу өсөн балаларҙың нисек итеп сәмле ярыштарҙа ҡатнашыуы, яҡшы өлгәш һәм өлгөлө тәртип күрһәтергә тырышыуҙары теге йәки был белем биреү учреждениеларында патриотик тәрбиәнең нисек ҡуйылышы хаҡында һөйләп тороусы факт ул.

Ә шулай ҙа, дөрөҫ әйтәһегеҙ, дөйөм алғанда, һуңғы сирек быуат эсендә мәктәптәрҙә был йәһәттән эш һүлпәнәйҙе генә түгел, бөтөнләй юҡҡа сыҡты, тип әйтергә лә булалыр. Әлбиттә, мин үҙебеҙҙең башҡорт мәктәптәре хаҡында шуны уҡ әйтмәҫ инем. Ҡайҙа әсә теле, тыуған әҙәбиәт һәм Башҡортостан тарихы өйрәнелә, был дәрестәр теге йәки был кимәлдә республикабыҙҙың данлы үткәненә, бөгөнгөһөнә бәйләп алып барыла; балалар милли батырҙарыбыҙҙы, зыялы шәхестәребеҙҙе, иҫтәлекле тарихи ваҡиғаларҙы белеп-танып үҫә. Башҡорт йәштәре өсөн Рәсәй Геройы Миңлеғәле Шаймуратовтың данлы тормош юлы һәм хәрби батырлыҡтары ысын мәғәнәһендә яҡшы өлгө булып хеҙмәт итә, айырыуса бөгөн, Донбаста барған махсус операция барышында.

Әйткәндәй, 2015 - 2022 йылдар эсендә миңә Донбаста 30 тапҡыр гуманитар ярҙам менән булып ҡайтырға тура килде. "Киске Өфө" гәзите хәбәрсеһе 29 мартта ошо материалды әҙерләгәндә миңә шылтыратҡан сәғәттәрҙә лә мин Луганскиҙа инем. Нимә әйтергә теләйем: бындағы хәрби операцияла ҡатнашыусы Башҡортостан егеттәре һынатмай, улар бына тигән илһөйәрлек һәм интернационалист яугирлыҡ өлгөһө күрһәтәләр. Улар өсөн беҙ килтергән тыуған яҡ күстәнәстәре һәм бүләктәре араһында мәктәп балаларынан да сәләм хаттары, һүрәттәр һәм бүләктәр байтаҡ ине. Тыуған яҡтан килгән бындай йылы сәләмдәрҙе ҡабул итеп, яугир егеттәребеҙ бик тәьҫирләнде һәм ҡыуандылар. Был юлы Луганск республикаһына патриотик рейдта беҙҙең менән Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты менән 48-се Башҡорт лицейынан уҡыусылар ҙа килделәр һәм бындағы Петровское ҡалаһындағы генерал-майор М.Шаймуратов исемен йөрөткән мәктәптә булдылар, Башҡортостан уҡыусылары тарафынан әҙерләп ебәрелгән бүләктәрҙе тапшырҙылар.

Бындай оло сәфәргә сығыр алдынан ғына Ауырғазы районы үҙәге Талбазыға күп профилле колледжға "Ҡаһарманлыҡ дәресе"нә саҡырғайнылар, шатланып риза булдым. Минең менән унда хәрби дуҫым Айрат Ғәббәсов һәм махсус операцияла ҡатнашыусы, Шаймуратов батальонынан "Горец" ҡушаматлы командир ҙа булдылар. Колледждың ҙур залы студенттар һәм уҡытыусылар менән шығырым тулы булды. Залда ултырыусы йәштәрҙең йөҙҙәренән, күҙҙәренән дә асыҡ күренә ине уларҙың илдәге бөгөнгө хәлдәргә битараф түгеллектәре. Беҙҙең сығыштарҙан һуң биргән һорауҙары ла шуны раҫланы: хәрби һөнәр төрҙәре менән күптәр ҡыҙыҡһына ине. Ә бит кемдәрҙендер Тыуған илебеҙҙе һаҡларға әҙерлеге, армия сафында өлгөлө хеҙмәте тап бына ошо "Ҡаһарманлыҡ дәрестәре"нән башлана ла бит! Быйыл 1 сентябрҙән Рәсәй мәктәптәренә индереләсәк башланғыс хәрби әҙерлек курстары ла (НВП) тап бына ошо бурысты - илһөйәрҙәр тәрбиәләү эшен атҡарыуға булышлыҡ итәсәк, тип ышанам. Ә инде был йәһәттән ҡабул ителәсәк закон патриотик тәрбиә эшенең йөкмәткеһен, ысулдарын ғына түгел, ә төрлө ойошмаларҙың бурыстарын һәм башланғыстарын бер йүнәлешкә туплаусы, ойоштороусы көс буласаҡ, тип ышанабыҙ инде.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәйҙең "Яңы кешеләр" сәйәси партияһы рәйесе Алексей Нечаев һәм партияның Думалағы фракцияһы етәксеһе урынбаҫары Сардана Аксентьева менән осрашты. Көн тәртибендә - һайлау кампанияһына әҙерлек һәм республика менән үҙ-ара эш итеүҙе нығытыу. Алексей Нечаев һүҙҙәренсә, партия составында Башҡортостандың инвестициялар йәлеп итеү ҡеүәһен һәм республика етәкселегенең яңы башланғыстарға иғтибарын юғары баһалаған эшҡыуарҙар күп.

✓Башҡортостандың 44 районында яҙғы баҫыу эштәре башланды, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында. Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, быйыл ҡар ғәҙәттәгенән ике аҙнаға иртәрәк иреп бөттө, дым өсөн көрәш бара. Мөмкин булған урында тырматалар, ужымға һәм күп йыллыҡ үләндәргә ашлама индерәләр. Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Дәүләкән, Мәләүез һәм Бүздәк районларында иген сәсә башланылар ҙа инде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә "Йәшел Башҡортостан" экологик акцияһына әүҙем әҙерлек эше хаҡында хәбәр итте. Был акция 22 апрелдән 13 майға тиклем ойошторола, 22 апрелдән 22 майға хәтлем республика дүртенсе тапҡыр "Хәтер баҡсаһы" халыҡ-ара акцияһына ҡушыла. Уның барышында республикала геройҙар - Бөйөк Ватан һуғышында һәм махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар хөрмәтенә аллеялар асыла.

✓Башҡортостандың исемле мотоуҡсылар полкы барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ирекле формированиеларҙың командирҙары Башҡортостан Башлығына ошондай тәҡдим менән мөрәжәғәт иткән. "Беҙ был башланғысҡа, һис шикһеҙ, ярҙам итербеҙ һәм полкты ойоштороуға бәйле барлыҡ сығымдарҙы үҙ өҫтөбөҙгә алабыҙ. Үҙебеҙҙең яҡтан ярҙам булыр. Полктың етәкселек составы буйынса кандидатуралар тәҡдим итеүегеҙҙе һорайым, Оборона министрлығы менән был мәсьәләлә республиканың фекере иҫәпкә алына тип килештек", - тине Радий Хәбиров.

✓Башҡортостанда 17 апрелдән 15 майға тиклем янғынға ҡаршы махсус режим индерелә. Республиканың 24 районында өсөнсө, йәки уртаса класлы янғын хәүефе көтөлә. Улар араһында - Әлшәй, Аҫҡын, Баҡалы, Бәләбәй, Балаҡатай, Бөрө, Бүздәк, Дыуан, Дүртөйлө, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ҡариҙел, Кушнаренко, Мәләүез, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Туймазы, Учалы, Федоровка, Саҡмағош, Шишмә, Яңауыл районлары һәм Өфө ҡала округы.

***✓ Илһөйәрлекте закондар менән генә тормошҡа атҡарыу, әгәр ил властары яғынан да халыҡҡа, уның тормош хәленә ҡарата ихтирам, хәстәрлек саралары булмаһа, ҡоро закон хәрефтәрендә генә ҡаласаҡтыр, тип уйлайым.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Һуңғы сирек быуат эсендә мәктәптәр тәрбиә эшенән ситләште һәм белем биреү буйынса ғына "хеҙмәт күрһәтеү"гә күсте. Хатаны төҙәтеү маҡсатында тәрбиә эштәре хәҙер закон нигеҙендә атҡарыласаҡ. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа илһөйәрлек тәрбиәһе биреү тураһында закон ҡабул итергә йыйыналар. Ошо хаҡта фекерегеҙ нindәй булыр?***

***Гөлфиә МӨХӘМӘҘИЕВА, студент:*** Үткән быуаттың 90-сы йылдарында тыуған быуын, йәғни беҙҙең бала саҡ һәм йөшлек йылдарыбыҙ илдә барған ҙур үҙгәрештәр, сәйәси-социаль, иҡтисади тетрәнеүҙәр осоронда формалашты. Дөрөҫөн әйткәндә, СССР тарҡалғандан һуң илдең артабан нindәй юлдан китәсәге күптәргә аңлашылмай ине. Был осор хәҙер тарих дәреслектәрендә "тәрән иҡтисади һәм сәйәси көрсөк" йылдары булды, тип яҙыла. Урыҫса әйткәндә, "лихие 90-ые". Ошоға тиклем "бөйөк держава" тип йөрөтөлгән Советтар Союзы менән бергә бөтөн социалистик берҙәмлектең юҡҡа сығыуы капиталистик лагерь һәм НАТО лидеры булған АҠШ-тың донъя аренаһында "планеталағы берҙән-бер бөйөк держава" булараҡ тороп ҡалыуы, тәбиғи, күп илдәрҙән, шул иҫәптән яңы Рәсәйҙең дә, сәйәси һәм иҡтисади йүнәлешенә туранан-тура йоғонто яһаны. Йоғонто, ғынамы икән әле!.. Шул осор властыы үҙ ҡулдарына алған Ельцин, Гайдар, Чубайстар, ил бизнесына хужа булған Березовский, Абрамович, Гусинскийҙар Рәсәйҙе ҡулға төшөрөү һәм тулыһынса буйһондороу маҡсаты ҡуйған "Америка стратегияһы" өсөн эшләнеләр. Илдә фәҡирлек, эскелек, енәйәтселек хөкөм һөрҙө.

Рәсми статистика буйынса 1992-1998 йылдар эсендә Рәсәй 4,2 млн кешеһен юғалтҡан. Тап шул осорҙа интернет, гаджеттар, кеҫә телефондары, компьютерҙар киң таралды. Был да ошо йылдарҙа тыуған балалар һәм йәштәр анын "американса тәрбиә" яғына бороусы сараларҙың береһе булды. Был осорҙа мәктәптең дә, ата-әсәләрҙең дә алдында балаларға илһөйәрлек тәрбиәһе биреү төп мәсьәлә булып торманы, сөнки ул ваҡыт сәйәси йүнәлештәр һәм ҡиммәттәр төшөнсәһенең алмашыныған, билдәһеҙлек һәм "юл сатында" торған осоро ине, нисек тә заманға яраҡлашыу, йән аҫрау хәстәрлектәре беренсе планда торҙо. Йәштәр, балалар ул осор Америка сериалдары, япон анимелары ҡарап, Көнбайыш "ҡиммәттәре" тәьҫирендә үҙ алдарына тип әйтерлек буй еткерҙе, совет осоро тарихын да, йырҙарын да, кинофильмдарын да белмәне, ҡыҙыҡһынманы, сөнки уларҙың аңдарын виртуаль донъя ауы торған һайын нығыраҡ сорнаны, үҙенә тартты.

Ләкин хатаны төҙәтергә, юғалтҡан ҡиммәттәрҙе кире ҡайтарырға һуң түгелдер әле, тип уйлайым. Беҙҙең быуын юғалта яҙған ҡиммәттәр - тыуған еребеҙгә, мәктәпкә, туған телгә, илебеҙҙең күпте кисергән бай тарихына ихтирам һәм ҡыҙыҡһыныу тойғоһо ул. Ләкин, минеңсә, илһөйәрлекте закондар менән генә тормошҡа атҡарыу, әгәр ил властары яғынан да халыҡҡа, уның тормош хәленә ҡарата ихтирам, хәстәрлек саралары булмаһа, ҡоро закон хәрефтәрендә генә ҡаласаҡтыр, тип уйлайым. Халыҡ ватанын һөйгән кеүек, ватаныбыҙ ҙа халҡын яратырға, уның тормош кимәлен яҡшыртырға, киләсәген ҡайғыртырға тейеш. Ил менән идара итеүсе юғары чиновниктар, депутаттар айырым өҫтөнлөктәр менән файҙаланыусы бай ҡатлам булыуҙан туҡтап, уларҙың даими билдән урындары халыҡ тормошон яҡшы белгән эшлекле, кешелекле етәкселәр менән алмашынып, сафланып торорға, социаль ғәҙеллек принциптары тантана итергә тейеш тип уйлайым. Шул саҡта ғына юғарынан төшөрөлгән закондар маҡсатына, һис шикһеҙ, ирешәсәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә нindәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән тыңлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе нindәй булыр?**

# ТУҒАН ТЕЛГӘ ҺАН ЮҠ!

***Иҙрис НОҒМАНОВ, яҙыусы, Әбйәлил районы:*** Хәҙерге ауыл тормошона ҡағылышлы проблемаларға килгәндә, иғтибарҙы иң әүәл туған телебеҙгә янаған хәүеф мәсьәләһенә йүнәлтер инем. Йөрәкте һыҙлатып, бөгөргә зәрҙе иҙгәне шул: атай-олатайҙарыбыҙҙан мираҫ булып ҡалған, үҙебеҙгә генә хас һөйләшебеҙ әкрен-әкренләп, әммә ышаныслы рәүештә юҡҡа сыға, онотола бара ла баһа! ЮНЕСКО-ның белдереүе буйынса, Ер йөҙөндә көнөнә бер нисә, йылына йөҙәрләгән тел бөтә икән. Тора-бара шулар иҫәбенә үҙебеҙҙең ягымлы ла, наҙлы ла, йырлап ҡына торған башҡорт теле лә инеп ҡуймағайы, тигән уй һағайта. Бөгөн ҡайһы ғына ауылға барма, бала-сағаны йыйылып уйнаған ерҙә урыҫ телмәре яңғырап тора. Шәхсән үҙем урыҫ телен өйрәнеүгә, уның аша аралашыуға һис тә ҡаршы түгелмен, әммә үҙебеҙҙең телде лә инҡар итеп онотоорға ярамай. Хатта ки теле яңы асыла башлап, өйөнән сығышмаған сабыйҙарға ҡәҙәре үҙҙәренсә русса һупалап маташа. Уларына вата-емерә өләсәйе менән олатайы ҡушыла. Ҡушылмаҫ та ине, ейәндәре туған әсә телдәрен аңламай!

Ҡайҙан килә был афәт? Афәт балаларыбыҙҙың баш осонда. Телевизор, тип атала ул. Уның йоғонтоһо хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Һәр төрлө мульти-пульти шау-шоуы баланың үҫешә башлаған мейеһенә тиҙ һеңә һәм онотолмай. Миҫал артынан әллә ҡайҙарға йөрөп ятыу кәрәкмәй. Миҫал балаһы булған һәр ғаиләлә. Ҡыҫҡаһы, М. Ғафури, М. Кәрим, Р. Ғарипов, Н. Мусин, Р. Солтангәрәев, Р. Назаров һ.б. кеүек күренекле, бөйөк әҙиптәребеҙҙе биргән матур телебеҙ, ассимиляцияға дусар ителеп, күҙ алдында йотола бара.

Мәктәптәрҙә лә башҡорт теленә ҡарата иғтибар ҡыуанырлыҡ түгел. Балыҡ башынан серей, тигәндәй... Бер ауылдың белем усағына осрашыуға барғанда коридор буйлап сабышҡан малайҙарҙан һорай ҡуйҙым: "Ни эшләп дәрестә түгелһегеҙ?" Араларынан береһе шаҡ ҡатырлыҡ яуап бирҙе: "Эй, әле беҙҙә башҡорт теле". "Шунан?" "Беҙ уны укып та тормайбыҙ". "Расписаниела бармы һуң?" "Бар, тик апай үҙаллы эш бирә лә, сыға ла китә. Нимәгә ул башҡорт теле?" Әскерһеҙ баланың телебеҙ трагедияһына алып барыр ошо һүҙҙәре мине иҫәңгерәтте. Нимәгә кәрәк ул... Беҙ уны укып та тормайбыҙ... Ҡайҙа барабыҙ, туған телебеҙ менән ни ҡыланабыҙ? Бер баланың атаһы әйтте: "Башҡорт телен уҡытып ыҙалатмаҫ кәрәк балаларҙы, егерме йылдан бөтә бит ул". "Һинең кеүек атайҙар барында бик мөмкин", - тинем әсенеп. Атай кеше өндәшмәне. Теге малайҙың ябай һүҙҙәренә ҡарағанда ошо атайҙың асыу ҡатыш әйткәне нығыраҡ шаңҡытты мине. Нимәгә беҙгә әсәй теле? Атай-олатайҙарыбыҙ һөйләшкән тел нимәгә? Былай дауам итһә, бөгөнгө уҡыусы балалар үҫеп етеүгә тулыһынса манҡортҡа әйләнеүебеҙ көн кеүек асыҡ. Уйлаһаң, уйылып китерлек. Ҡурҡыныс булып китә хатта...

Ауыл кешеһен борсоған икенсе һорау: элек утыҙар-ҡырҡар центнер иген биргән меңәрләгән гектар баҫыуҙарыбыҙҙың аяныслы яҙмышы. Улар менән ни булыр? Һөрөнтә ерҙәребеҙ урманға әйләнеп бөттө бит! Башҡа яҡта нисектер, беҙҙә, тау-урман зонаһында, шулай. Халыҡҡа пай итеп өләшкән булдыҡ, бер нindәй мөмкинлеге булмаған ябай кеше улар менән ни эшләй алһын? Бер-ике арба ҡарағураһын сабып ала ла - һәм вәссәләм. Иркен кабинеттарҙа ирәйешеп ултырған эрелеваҡлы түрә-ғәрә ошо хаҡта ни уйлай икән? Белергә ине...

Шөкөр, юлдарыбыҙ матурайҙы, тигеҙләнде. Юлсыларға һүҙ тейҙерерлек түгел. Ошоноһо ҡыуаныслы. Хужалыҡ итеүҙең башҡа өлкәләре лә уларҙан өлгө алһа, тормош-йәшәйешебеҙ гөрләп алға китер ине.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЙӘШ КЕШЕМЕН...

## әммә гәзит уҡыйым

**(Башы 1-се биттә).**

Үҙем йәш кеше булараҡ "Балалар ҡоро", "Йәштәр ҡоро" рубрикалары ла күңелемә яҡын. Йәштәштәрем, тиҫтерҙәрем нindәй уй-хыялдар менән йәшәй, маҡсаттары нindәй, нимәгә ынтылалар, кемгә оҡшарға тырышалар һәм башҡа ошондай мәғлүмәтте белеү ҡыҙыҡлы минә.

Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Күҙәтеүҙәре"н ин төүҙә "Киске Өфө"лә уҡый башлағайным. Хәҙер уларҙы авторҙың интернеттағы диуарында ҡараштырғылайым. Уның төрлө йәмғиәт күренештәренә аңлатма биреүе, бәләкәй генә фекерҙе лә тос һәм йөкмәткеле итеп еткереүе һоҡландыра, уйға һала.



Тотош гәзит тураһында һүҙ йөрөткәндә, ул йөкмәткеле, мәғәнәле һәм уҡымлы. Артабан да ошо юғарылыҡтан төшмәйенсә, уҡыусылары-ғыҙҙың яратҡан һәм хөрмәт иткән гәзите булып, оҙаҡ йылдар донъя күрергә яҙһын.

**Ришат ҠОТЛОҒУЖИН.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Өфөлә Башҡортостан хәрби комиссариатының 105 йыллығына арналған тантаналы йыйылыш үтте. Республика хәрби комиссариаты бер нисә тапҡыр илебеҙҙә иң яҡшылар иҫәбенә инде, тип билдәләне Радий Хәбиров. Ул күп йылдар Үҙәк хәрби округы штабының хәрби хеҙмәткә саҡырыу, граждандарҙы контракт хеҙмәтенә алыу буйынса йөкләмәләрен уңышлы үтәй. Иң яҡшы мобилизация базаһы Бөтә Рәсәй смотр-конкурсында бер нисә тапҡыр еңеү яуланы.

✓Башҡортостандың күп функциялы үҙәктәре контракт буйынса хәрби хеҙмәткә яҙылырға теләгәндәр өсөн консультация үткәрә. Бының өсөн паспорт йәки шәхесте раҫлаған башҡа документ кәрәк. 7 (347) 218-19-19 телефонына йәки 122 номерына шылтыратып, республиканың Ситуация үҙәге операторҙарынан дистанцион белешмә ярҙамын да алырға мөмкин. Бынан тыш, 117 профилле белешмә хеҙмәте белгестәре кәрәкле мәғлүмәт алыуҙа ярҙам күрһәтә.

✓Башҡортостанда мәктәп уҡытыусыларының хеҙмәт хаҡының төп өлөшөн арттырыу планлаштырыла, тип хәбәр итте республиканың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин "Башинформ" агентлығында уҙған матбуғат конференцияһында. Ведомство етәксеһе һүҙҙәренсә, әле Рәсәйҙең Финанс һәм Мәғариф министрлыҡтары менән берлектә уны 35 проценттан алып 65 процентҡа тиклем арттырыу тураһында мәсьәлә өйрәнелә.

✓2023 йылдың 1 апреленән 31 октябренә тиклем социаль ярҙам сараларына хоҡуғы булғандарға билет хаҡынан 50 проценты ҡуләмендә республика ташламаһы бирелә. Был хаҡта Башҡортостан ҡала яны пассажирҙар компанияһы хәбәр итә. Льготаға пенсионерҙар, хеҙмәт ветерандары, тыл эшсәндәре, хәрби хеҙмәт ветерандары һәм башҡалар хоҡуҡлы.

✓Быйыл май байрамдары аҙна башына тура килә, шуға апрель-май айҙарында ете көн рәттән ял итергә мөмкин: өс көн рәттән: 29 апрелдә (шәмбе), 30 апрелдә (йәкшәмбе) һәм 1 майҙа (дүшәмбе) һәм дүрт көн рәттән: 6 майҙа (шәмбе), 7 майҙа (йәкшәмбе), 8 майҙа (дүшәмбе) һәм 9 майҙа (дүшәмбе). 2023 йылда май байрамдары араһында ете эш көнө. Май айында бына нисек эшләйбеҙ: майҙың тәүге аҙнаһында - 2 майҙан(шишәмбе) 5 майға (йома) тиклем дүрт эш көнө; майҙың икенсе аҙнаһында - 10 майҙан (шаршамбы) 12 майға (йома) ҡәҙәр өс эш көнө.

✓ **Башҡортостандың баш ҡалаһында 9 майҙы байрам итеүгә әҙерлек башланды. "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда Еңеү парадының тәүге репетицияһы уҙҙы ла инде. Тантаналы сарала 20 парад расчетының ҡатнашыуы көтөлә.**



ҠЫҪҠАСА

# ӘЙҘӘГЕҘ, СӘЙӘХӘТКӘ!

**Башҡортостанда хаҡлы ялдағылар һәм һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгәндәр туристик юллама хаҡының бер өлөшөн ҡаплау өсөн сертификаттар алыу мөмкинлегенә эйә.** Республика Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, сертификаттар 27 апрелдә тапшырыла башлай. Уларҙы Республика халыҡҡа социаль ярҙам үҙәге филиалдарында, шулай уҡ "Ғаилә" район-ара үҙәктәрендә алырға мөмкин. 2023 йылда Башҡортостанда 905-кә яҡын кешене дөйөм хаҡы 7,8 миллион һумлыҡ туристик юлламалар менән тәъмин итеү күҙаллана. Пенсионерҙар һәм инвалидтар өсөн республика маршруттары буйлап 165 социаль тур бар. Бынан алдараҡ эксперт советы Башҡортостан Республикаһы маршруттары буйлап 154 социаль тур һайлап алғайны.

✓ **Башҡортостан юлдаш телевидениеһының башҡорт телеканалы халыҡты йәлеп итеү буйынса барлыҡ төбәк телеканалдары араһында 2022 йылдың декабренән 2023 йылдың мартына тиклем уҙғарылған рейтингта беренсе урында килә.** Республиканың төп телеканалын халыҡтың 58,8 проценты ҡарай, йәғни даими аудитория төбәктең 2/3 өлөшөн алып тора. "Һуңғы өс йылда беҙ төбәктә аудиторияны 2,5 тапҡырға арттырҙыҡ. Әгәр өс йыл элек Башҡортостан халҡы ҡараған барлыҡ телеканалдар исемлегендә БЮТ 9-сы урында булһа, 2022 йыл йомғаҡтары буйынса Рәсәй, Беренсе, НТВ кеүек федераль кимәлдәге лидерҙарҙан ҡалышып, 4-се урынға күтәрелдек. Унда ла бик аҙға ғына ҡалыштыҡ", - ти "Башҡортостан" ТРК-һы акционерҙар йәмғиәте генераль директоры Рөстәм Шәрәфетдинов. Һуңғы ваҡытта БЮТ телеканалында тапшырыуҙар сетҡаһы һиҙелерлек үҙгәрҙе: мәғлүмәт һәм ижтимағи-сәйәси тапшырыуҙар өлөшө артты. Быйылғы миҙгелдә телеканалда төп студияны модернизациялау процесы әүҙем бара. Был эш контенттың мөмкин тиклем сифатлы булыуы өсөн башҡарыла.

✓ **"Ағиҙел" журналы бер быуатлыҡ юбилейы уңайынан 100 хикәйәнән торған ике томлыҡ китап баҫтырып сығарҙы.** Был әҫәрҙәр баҫма биттәрендә төрлө йылдарҙа донъя күргән. Авторҙар араһында - Дауыт Юлтый, Кирәй Мәргән, Рәйес Низамов, Сәғит Агиш, Әнүәр Бикчәнтәев, Динис Исламов, Зәйнәб Биишева, Талха Ғиниәтуллин һәм әҫәрҙәрендә дәүер сағылдырылған башҡа яҙыусылар. "Китап "Самрау" нәшриәтендә сыҡты. Әлеге ваҡытта Башҡортостан Башлығы грантына 500 дана баҫыла. Бәлки, һуңғараҡ өҫтәмә тираж донъя күрер", - тип хәбәр иттеләр журналдан. Ике томлыҡтың исем туйы Мәскәүҙә республиканың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә уҙҙы.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ИҪКЕ СИБАЙҘА ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Урал аръяғы буйлап эш сәфәре барышында Баймаҡ районының Иҫке Сибай ауылында "Мәғариф" милли проект сиктәрендә төҙөлгән мәктәпте барып ҡараны.**



375 уҡыусыға иҫәпләнгән өс ҡатлы яңы бина 30 йыл хеҙмәт иткән һәм 2019 йылда уҡ авария хәлендә тип танылған иҫке мәктәп урынында ҡалҡып сыҡты. Ә шуға тиклем балаларға Сибай ҡалаһына йөрөп уҡырға тура килде һәм 2020 йылдың йәйендә бер йылға иҫәпләнгән төҙөлөш эштәрен башлағайнылар. Ләкин башҡарыусы менән килеп тыуған хәл һәм сметаны яңынан иҫәпләүҙәр арҡаһында яңы бинаны файҙаланыуға тапшырыу ваҡыты кисектерелеп торҙо. Уҡыу йортоноң директоры мәктәптә 416 бала уҡыуы, шуларҙың 170-е башланғыс кластарҙа белем алыуы хаҡында һөйләне. Мәктәптә 39 уҡытыусы эшләй. Алыҫта йәшәүсе балаларҙы мәктәпкә өс автобус ташый. Казанка, Калинино һәм Йәнйегет ауылдарында был мәктәптең өс бүлексәһе бар. Яңы мәктәптең дөйөм майҙаны 8 мең кв.метрҙан күберәк. Класс кабинеттары, спорт залы, ашхана һәм иркен актовый залдан тыш, мәктәптең үҙ йылытыу ҡаҙаны һәм хужалыҡ-ярҙамсы бинаһы бар.

Республика етәксеһе райондың Күлтабан ауылында мәҙәни-белем биреү үҙәгендә лә булды, мәҙәни-белем биреү үҙәгендә урынлашҡан фельдшер-акушерлыҡ пунктын ҡараны. Бында "Патриот" хәрби-илһөйәрлек паркының филиалын асыу күҙаллана. Урындағы халыҡ менән аралашҡанда Радий Хәбиров уларҙың ауылында "Патриот" паркының филиалы асылаҫағы, ул ауыл өсөн үҫеш нөктәһенә әүереләсәге, өҫтәмә эш урындары хаҡында һөйләне. "Республикала "Патриот" паркының бер нисә төбәк үҙәген ойоштороорға телйбеҙ. Ул Урал аръяғы өсөн Күлтабанда асыла, унда матди база әҙер, бина һәйбәт торошта, әлбиттә, уны ремонтлау, үҙгәртеп ҡороу талап ителә. Әммә аҡса табырбыҙ һәм 2024 йылдың 1 ғинуарында бында "Патриот" паркының филиалын асырға тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

# ҮҘГӘРТЕП ҠОРОЛА




**Сибайҙағы ковид-госпиталь асылғандан алып бында 5 169 кеше дауаланды. Ҡаланың клиник диагностикалау инфекция үҙәге төҙөлөшө 2021 йылдың 30 декабрендә башланғайны.**

Төҙөлөш эштәре, медицина ҡорамалдары, мебель һәм башҡа кәрәк-яраҡ һатып алыу өсөн Башҡортостан ҡаҙнаһынан 1,8 млрд һум аҡса бүленгәйне. Республика Башлығы дауаханала булып, бер нисә палатаға инеп сыҡты һәм ундағы ауырыуҙарҙың тиҙерәк һауығып сығыуҙарын теләне. Инфекция үҙәгенең баш табип урынбаҫары Гүзәл Һөйөндөкова әлеге ваҡытта ковид-госпиталдең ҡәҙимге дөйөм сирҙәргә дауалауға үҙгәртеп ҡоролоуы хаҡында һөйләне. Мәсәлән, хәҙер пациенттар бында КТ аппараты һәм ангиографта тикшереләүҙәр үтә алаҫаҡ.

- Ковид-госпиталдәрҙе төҙөй башлағанда беҙ үҙебеҙгә ҡасан да булһа ковид китер, ул саҡ был үҙәктәр менән ни буласаҡ, тигән һорауҙы бирә инек. Бында, күрәүегеҙсә, балалар ҙа ята, ләкин йоғошло сирҙәр менән түгел. Был үҙәктәрҙе беҙгә әкренләп ҡәҙимге күп профилле дауаханаларға күсерергә кәрәк буласаҡ. Ошо йәһәттән мин һаулыҡ һаҡлау министрына 24 апрелдә был дауахана буйынса ниндәй саралар тәҡдим ителеүе хаҡында һөйләүен һораным, ҡарарбыҙ. Зубоволағы госпиталь әлегә, әлбиттә, ковид сирлеләр менән тулы. Бындай сирлеләрҙе шунда тупларбыҙ, ә ҡалғандар, әйҙә, башҡа госпиталдәрҙә дауаланһын. Һәр ауырыуға урын булырға тейеш", - тине Радий Хәбиров.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН...

**Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса автономиялы коммерцияға ҡарамаған ойошма Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығы, "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)" йәмәғәт берекмәләренең халыҡ-ара союзы менән берлектә 20 апрель "Башҡорт теленән халыҡ-ара диктант - 2023" акцияһын үткәрә.**

Акцияла офлайн режимында ҡатнашырға теләүселәр өсөн Өфө фән һәм технологиялар университетында, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында, Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институтында, Милли музейҙа һәм "Арт-Квадрат" киңлегендә диктант яҙыу ойоштороласаҡ. 20 апрелдә Башҡортостан юлдаш телевидениеһы телеканалында, "Бәйләнештә" социаль селтәрендә, телеграм-каналда дикторҙар диктант тексын тура эфирҙа уҡый башлай: сәғәт 11-ҙән 12-се 25 минутҡа тиклем - башҡорт телен башланғыс кимәлдә белгәндәр өсөн; 12-се яртынан 12-гә тиклем - башҡорт телендә иркен аралашҡандар өсөн; 1-се 5 минуттан 1-се яртыға тиклем - башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшкәндәр өсөн.

Һәр кем диктантты өйҙә үҙ аллы яҙырға ла мөмкин. Яҙып бөткәс, диктант яҙылған ҡағыҙҙы фотоға төшөрөп, 2023 йылдың 23 апреленә ҡәҙәр bashdiktant2023@mail.ru электрон почтаһына йәки телеграм-ботҡа ебәрергә кәрәк. Әгәр онлайн режимында яҙыу мөмкинлеге булмаһа, тура эфир видеоһын рәсми сайтта 23 апрелгә тиклем ҡарарға була. Диктантта ҡатнашыусыларға сертификаттар электрон почтаға йә телеграм-боттан ебәреләсәк. Был сарала енесенә, расаһына, милләтенә, теленә, сығышына, матди һәм вазифа хәленә, йәшәгән урынына, дингә мөнәсәбәтенә, инаныуҙарына, йәмәғәт берекмәләренә инеү-инмәүенә, шулай уҡ башҡа хәлдәргә ҡарамаҫтан, һәр кеше ҡатнаша ала. Акцияның рәсми һөҙөмтәләре 30 көн эсендә bashdictant.ru сайтында баҫылып сығасаҡ.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында Ҡурсаҡ театры янындағы скверҙы 2024 йылда төҙөкләндереү күҙаллана. Был турала мэрияла уҙған оператив кәңәшмәлә хакимиәт башлығы Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. Ул Орджоникидзе районы башлығы Альберт Маликовҡа ял итеү урыны концепцияһын бергәләп тикшереү, һуңынан уны төҙөкләндереү проекттарына индереү өсөн урындағы халыҡ менән эш алып барырға ҡушты.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында 9 майҙы байрам итеүгә әҙерлек башланды. "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда Еңеү парадының тәүге репетицияһы уҙҙы ла инде. Баш ҡала мэрияһының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, тантаналы сарала 20 парад расчетының ҡатнашыуы көтөлә. Шәхси составтан 1,5 меңдән ашыу кеше йәлеп ителә. "Өфө-Арена" алдындағы майҙанда күнекмәләр һәр кесаҙна ойоштороласаҡ. Октябрь проспектында генераль репетициялар 4 һәм 6 майға билдәләнгән.

✓"Мостай Кәрим" теплоходының Башҡортостанға круизы 28 апрелдән 8 майға тиклем дауам итә. Рейс Түбәнге Новгородта башлана һәм шунда тамамлана. Өфөлә "Мостай Кәрим" теплоходы ике көн (2-3 май) тора, был ваҡыт эсендә туристар Башҡортостандың тарихы һәм мәҙәниәте менән яҡындан танышырға мөмкин. Мостай Кәрим исемендәге фонд сайтында хәбәр ителеүенсә, был мөһим ваҡиға өсөн махсус рәүештә борт-та туристарҙы башҡорт мәҙәниәте менән таныштырыу буйынса тематик программа әҙерләнә.

✓Башҡортостанда 14 апрелдә "Рәсәй эше. Мөмкинлектәр ваҡыты" Бөтә Рәсәй эшкә урынлашыу йәрминкәһенең төбәк этабы ойошторолдо. Республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова әйтеүенсә, 2023 йылда йәрминкә тәүге тапҡыр тотош илдә бер үк ваҡытта башлана. "Рәсәй эше"нең икенсе этабы 23 июнгә билдәләнгән (Өфөлә "Арт-квадрат" майҙансығында).

✓2022 йыл һөҙөмтәләре буйынса, "Өфө" аэропортында сит илдәргә сығыусы пассажирҙар һаны 2021 йыл менән сағыштырғанда 34 процентҡа кәмегән, тип белдерҙе Башҡортостан таможняһы начальнигы Марат Сафиуллин. Былтыр сит илгә 200,5 мең кеше сыҡҡан, Төркиәгә рейстар - 43, Мысырға 46 процентҡа кәмегән. Ғәрәп Әмирлектәре Берләшмәһенә барыусы пассажирҙар - 60 процентҡа, Үзбәкстанға 4 тапҡырға артҡан.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЙЫЙЫШТЫРАБЫҘ

**"Өфө ҙур эштәргә әҙер", тине баш ҡала округы хакимиәте етәксеһе Ратмир Мәүлиев Башҡортостан Башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә сығыш яһап.**

Ратмир Рәфил улы артабан 3 апрелдән 14 майға тиклем баш ҡалала санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм территорияны йәшелләндереү айлығы үтеүе, уҙған өмәләрҙә халыҡтың дәррәү ҡатнашыуы, 1 апрелдән махсус шампунь ҡулланып, юлдар һәм урамдар йыуыла башлауы, бөгөнгәсә 2,5 миллион квадрат метр юл таҙартылыуы хаҡында һөйләне.

Билдәләнеүенсә, санитар айлыҡ барышында торлаҡ һәм коммуналь предприятиелар ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын полигонда бушлай ҡабул итәсәктәр, башҡа предприятиелар өсөн бындай көндәр 15, 28 апрель һәм 13 май. 28 апрелдән 13 майға тиклем "Йәшел Башҡортостан" акцияһы үтәсәк, 63 йәмәғәт киңлегендә һәм 121 ихата территорияһында ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртыласаҡ. Баш ҡаланың Ленин районында - 2, башҡаларында берәр тематик аллея асыласаҡ һәм уларҙы комплексы төҙөкләндереү планлаштырылған. Шулай уҡ ҡала урамдарында миллион ярым тирәһе, шул иҫәптән 88,5 мең күп йыллыҡ сәскә (1000 төп роза, 3000 төп гортензия) ултыртыу күҙаллана. Ғәҙәттәгесә, ләлә сәскәләре лә күҙ яуын аласаҡ. Әлеге ваҡытта Өфөнөң 26 фонтанын ебәреүгә әҙерлек эштәре алып барыла.

Йәмәғәт киңлектәрендә лә төҙөкләндереү эштәре дауам итә. Быйыл 13 ял урыны, шул иҫәптән ҡаланың алты районында 11 паркта эш алып барыласаҡ. Аныҡлап әйткәндә, был исемлеккә Аксаков исемендәге урам, Альбанов исемендәге сквер, Ҡурсаҡ театры алдындағы аллея, "Нефтехимиктар" паркы, Октябрь Революцияһы урамы, "Теплое" күле, "Ҡурай тотҡан малай" фонтаны алдындағы майҙан, Спорт һарайы эргәһендәге Михалев скверы, Затон биҫтәһендәге "Тулҡын" паркындағы бәләкәй күл, "Өфө муйынсағы", Свердлов һәм Гоголь урамдарын, Ленин һәм Пушкин урамындағы тротуарҙарҙы төҙөкләндереү инә.

"Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы" милли проекты сиктәрендә Өфө ҡаланың үҙәгендә туркод проектлауға федераль конкурста еңеү яуланы. Уны тормошҡа ашырыу туризм инфраструктураһын үҫтереү буйынса бик күп позицияларҙы нығытырға һәм Өфөнө тағы ла унайлыраҡ, ҡунаҡсылыраҡ һаҡарға ярҙам итәсәк. "Дөйөмләштереп әйткәндә, баш ҡала йәмәғәт киңлектәрен төҙөкләндереү буйынса барлыҡ сараларҙы тормошҡа ашырырға әҙер. Проекттар бик ҙур, эш күп, әммә беҙ барыһын да үтәйәсәкбеҙ",- тине мэр.

# БАРЫҺЫН ДА ИПКӘ КИЛТЕРӘБЕҘ

**Өфө ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә төп темаларҙың береһе булып юл проекттарын тормошҡа ашырыу мәсьәләһе торҙо. Йыйылыусылар алдында сығыш яһап, Төҙөлөш, юлдарҙы һәм һалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы Константин Паппе быйыл 32 объектта юл-төҙөлөш эштәре - ремонт, капиталь ремонт, реконструкция һәм төҙөлөш - планлаштырылыуын билдәләне.**

Урам-юл селтәрен ремонтлауға килгәндә, дөйөм оҙонлоғо 10 километр тәшкил иткән 13 объект исемлектә тора. Әлеге ваҡытта Лев Толстой һәм Шәфиев урамдарында эш башланған да инде. Сиратта - Демьян Бедный, Новороссийский, Галле ҡалаһы исемендәге, Менделеев, Рига урамдары.

Өфө ҡалъәһенә нигеҙ һалыныуҙың 450 йыллығына әҙерлек һәм байрам итеү сиктәрендә быltыр Ленин һәм Пушкин урамдарында тротуарҙар ремонтланһа, быйыл Пушкин урамынан Октябрь Революцияһына тиклем участкала эштәр башланған. Шулай уҡ Октябрь революцияһы урамында ла реконструкция дауам итә.

Константин Паппе сығышында сығымлы проекттарға иғтибар йүнәлтте. Уларҙың береһе - Зинин ауылы эргәһендәге транспорт сиселеше төҙөлөшө. Әле бында эштәр йылдам бара, муниципаль контрактҡа ярашлы, объект быйыл өсөнсө кварталда тапшырылырға тейеш. Баш ҡалала быltыр Ағиҙел йылғаһы аша 1956 йылда һалынған арҡалы күперҙә капиталь ремонтлау башланғайны һәм әле лә дауам итә. 5 апрелдән күперҙең конструкцияларын һүтеү барышында автомобилистарҙың һәм йәйәүлеләрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатында Ағиҙел яры буйы йәйәүлеләр һәм транспорт өсөн ябылған. Шулай уҡ быltыр "Көньяҡ ҡапҡалар" проектын тормошҡа ашырыу барышында Пугачев урамын реконструкциялау, генерал Рыленко урамын һәм уларҙың киҫелешендә һәр йүнәлештә өс һыҙатҡа иҫәпләнгән юл сиселешен төҙөү дауам итә. Был объект киләһе йылдың өсөнсө кварталында тапшырылырға тейеш. Константин Паппе белдереүенсә, киләсәктә Көньяҡ ураҫ юлын төҙөп бөтөрөү һәм Салауат Юлаев проспектын артабан һуҙыу күҙаллана.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.

ҠЫҪҠАСА

# ЕГЕТТӘР БУРЫС ҮТӘЙ

**Яҙғыһын Өфөнән мендән ашыу егет хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Был хаҡта баш ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан хәрби комиссариатының граждандарҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү һәм саҡырыу бүлеге етәксеһе Сергей Нетунаев хәбәр итте.** Быйыл яҙ Өфөнөң саҡырыу комиссияларына бөтәһе 6 мендән ашыу егет килергә тейеш. Улар араһында мәктәп уҡыусылары ла, колледж, юғары уҡыу йорто студенттары ла бар. Бындай ғәмәл йыл һайын башҡарыла. Әлеге ваҡытта 843 егет комиссияға килгән, был дөйөм һандан 13 процент тәшкил итә. Ә 150 кеше бер ниндәй етди сәбәпһеҙ повестканы иғтибарһыҙ ҡалдырған, уларҙың 25-е административ яуаплылыҡҡа тарттырылған. Егеттәрҙе армия сафына оҙатыу 6 майҙан һуң башлана, тип өҫтәне Сергей Нетунаев. Апрелдә иһә Өфөнән - 80, 15 майҙан 6 июнгә тиклем тағы ла йөҙгә яҡын һалдат хеҙмәт итеү урынына юллана.

✓**Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәктәп тәрбиәләрендә рәшәткәләрҙе ҡалдырырға рөхсәт итте. Хәҙер был янғын хәүефһеҙлеген боҙоу тип иҫәпләнмәй.** Ошо турала Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының күҙәтеү эшмәкәрлеге һәм иҫкәртеү эше департаменты директоры Ринат Еникеев хәбәр итте. "1 марттан янғынға ҡаршы режим ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр көсөнә инде, бөгөн рәшәткәләрҙең булыуы законға ҡаршы килмәй", - тип Еникеевтың һүҙҙәрен килтерә ТАСС. Янғын осрағында балалар һәм уҡытыусылар мәктәптән эвакуация юлынан сығырға тейеш, был тәҙрәләргә ҡағылмай, тине ул. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Рәсәйҙә 120 мең белем биреү объекты эшләй. 2022 йылда уларҙа - 325 янғын, мәктәптәрҙә 150 ут сығыу осрағы теркәлгән. Һәләк булған балалар юҡ. Янғын хәүефһеҙлеген боҙған өсөн суд ҡарары буйынса 20 мәктәптең эше туҡтатылған.

✓**Дәүләт Думаһы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға, шулай уҡ уларҙың ғаилә ағзаларына бушлай юридик ярҙам тураһында закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.** Документҡа ярашлы, бушлай юридик ярҙамға хоҡуҡлылар: махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан хәрбиҙәр; Рәсәй Федерацияһының сик буйындағы биләмәләрен һаҡлауҙа ҡатнашҡан хәрбиҙәр; мобилизацияланғандар; ирекмәндәр; әйтеп үтелгән категорияларҙың ғаилә ағзалары. "2022 йылдың 24 февраленән башлап барлыҡ мөрәжәғәттәр буйынса бушлай юридик ярҙам күрһәтеү мөмкинлеге асабыҙ. Атап әйткәндә, ышаныс ҡағыҙҙарын рәсмиләштереү буйынса нотариаль хеҙмәттәр күрһәткән өсөн түләүҙе, шулай уҡ ошондай ышаныс ҡағыҙҙарын рәсмиләштергән өсөн дәүләт пошлинаһын ғәмәлдән сығарған закон проектына өҫтәмә итеп, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаиләләре бушлай юридик ярҙам күрһәтеү үҙәктәренә мөрәжәғәт иткәндә аҡса түләмәскә тейеш", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Дәүләт Думаһында.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# АЙЫҠ АУЫЛДАР АСЫҠЛАНА

**"Айыҡ ауыл-2022" республика конкурсы финиш һыҙығына сыға. 4 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында конкурста ҡатнашыусыларҙың презентацияларын яҡлау башланды.**

Дүрт көн дауамында эксперт комиссияһы ҡатнашыусыларҙың проекттарын баһаланы. 7 апрелгә тиклем министрлыҡтар һәм ведомстволар, шулай уҡ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты вәкилдәре муниципаль район хакимиәттәренән ебәрелгән ғаризалар, видеороликтар менән танышты.

Республика Хеҙмәт министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, быйыл "Айыҡ ауыл" исеменә 54 ауыл дәғүә итә - һәр райондан берәр. Презентацияларҙы яҡлауҙа ауыл әүҙемселәре һәм район хакимиәттәре вәкилдәре ҡатнашты.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ҡарары менән 2020 йылдан конкурстың бүләк фонды утыҙ тапҡырға - 1,4 миллиондан 40 миллион һумға тиклем арттырылды. 6 миллион һум "Эре тораҡ пункттар" номинацияһында еңеүсегә тапшырыла. Башҡа номинацияларҙа еңеүселәргә иһә 5, 4 һәм 3 миллион һум биреләсәк.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйыргa, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Аҡ тал

❖ Гипотония (ҡан баҫымының түбәнәйеүе) осрағында 1 ҡалаҡ аҡ тал ҡайырыһына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 6 сәғәт термоста тәнәтергә. Өскә бүлеп, ашарҙан 20-30 минут алда тонуста тотоусы сара итеп эсеп бөтөргә.

❖ Бармаҡтар ойоғанда 1 балғалаҡ ваҡ ҡына туралған тал ҡайырыһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡас ябырға һәм һыуынғансы тәнәтергә. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

## Үгәй инә үләне

❖ Иммунитетты яҡшыртыу өсөн 1-2 ҡалаҡ үлән япрағы һутын көнөнә 4-6 тапҡыр 7-10 көн дауамында бер нисә миҙгел эсергә. Июнь айында иң һөҙөмтәле осор.

❖ Билдәге тимерәүҙән үгәй инә үләне япраҡтарын бутҡаға әйләндереп иҙеп, боҫлама яһау еңеллек килтерә. Уны йылытып, 20-30 минут тоторға, көнөнә 2-3 тапҡыр эшләргә.

## Шифалы шалфей

❖ Ғүмер оҙайлығы өсөн 100 грамм шалфей сәскәһенә 800 мл араҡы һәм 400 мл һыу ҡойоп, ябыҡ ауыҙлы быяла һауытта 40 көн ҡояшта тәнәтергә. Иртәнсәк ас ҡарынға 1 ҡалаҡ тәнәтмәгә 1 ҡалаҡ һыу ҡушып эсергә. Тәнәтмә 1 йыл боҙолмай. Ул нервы системаһын тонуста тоторға, көйләргә ярҙам итә. Бынан тыш, шалфей - тәбиғи антиоксидант.

❖ Хәтер насар булғанда шалфей япраҡтарын онтаҡларға. Көнөнә 1-әр семтем ашап, артынан һыу эсергә. Шалфей Ҡырым, Краснодар крайы, Кавказда үҫә.

## Ҡыр шалфейы

❖ Йәки беҙҙә йылан тамыры ла тиҙәр уны. Шалфейҙың был төрө Башҡортостан болондарында киң таралған. Был үлән йөрәк неврозы, неврастения осрағында ярҙам итә. 2 балғалаҡ киптерелгән йылан тамыры япраҡтарына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт тәнәтергә. Йылы көйөнсә көнөнә 2-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

***✓ Мине "һабантуй" һүҙенең хәҙер телдә йыш ҡулланылып, төп мәғәнәһен юғалта барыуы ла борсой. Һәр төрлө ярыштарға бай булған барлыҡ саралар ҙа ни эшләптер "һабантуйға" әйләнде.***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Мәрүәт

Биҙәүестәрҙең ҡайһы бер төрҙәрендә (айырыуса һаҡал һәм яғаларҙа) йыш ҡына ҡулланылған тағы бер материал - мәрүәт. Башҡорт кейемдәрен өйрәнеүсе С.Н. Шитова был элементтың айырыуса көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш райондарға хас булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Әйтергә кәрәк, был һүҙ башҡорт теленең салйоғот һәм һаҡмар һөйләштәрендә "һиҙәп - кейем-һалымға ҡаҙай торған ваҡ төймә" тигән мәғәнәлә ҡулланыла. Тап шундай традициялар хакас һәм алтай халыҡтарында ла теркәлгән. Мәҫәлән, хакас ҡатын-ҡыҙҙарының түшкә тағып йөрөгән "пого" исемле традицион биҙәнеү әйберендә үҙәк урындарҙың береһен тап мәрүәт алып тора ла инде.



Мәрүәт - диңгеҙ ҡабырсағының ялтырауыҡлы эске ҡатламы. Шунан йоҡаҡ ҡына итеп пластиналар ҡырҡыла. Элек-электән төрлө төбәктәрҙә унан биҙәүестәр эшләү йолаһы таралған. Һатыуҙа айырыуса "Ҡытай мәрүәт"е юғары баһаланған, сөнки ул ҙур яҫы пластиналар рәүешендә була. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәнеү әйберҙәрендә йышыраҡ диаметры 3-4 см тәшкил иткән түңәрәк формалағы мәрүәттәр осрай. Ғәҙәттә уртаһында тишек тишелгән була. Шулай уҡ унан эшләнгән төймәләрҙе лә ҡулланыу осраҡтары бар. Мәрүәттәр күпләп табылған урындарҙың береһе - Ҡыҙыл диңгеҙ. Тарихсылар тап шул яҡтарҙағы мәрүәттең сауҙа юлы менән Урта Азия аша беҙҙең тарафтарға үтеп инеүен һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Күренекле ғалим-этнограф С.В. Иванов билдәләүенсә, боронғо осорҙа кейемдә түңәрәк формалағы мәрүәт пластиналарҙы ҡулланыу туранан-тура Ҡояш культы менән бәйле. Ҡояш культы башҡорт халыҡ йолаларында, ышаныуҙарында һәм шулай уҡ тыйыуҙарында асыҡ сағылыш тапҡан. Белеүебеҙсә, "Урал батыр" эпосындағы Ҡояш - ҡоштар батшаһы Самрауҙың ҡатыны һәм Һомайҙың әсәһе. Боронҙан уҡ күп кенә халыҡтарҙа мәрүәттең төрлө ауырыуҙарҙы дауалау һәләтенә эйә булыуына бәйле ышаныуҙар йәшәй. Донъя халыҡтарынының тәжрибәһен дөйөмләштереп алғанда, уға бөтә ауырыуҙарҙан да тиерлек дауалаусы сара булараҡ ҡарағандары асыҡлана. Мәҫәлән, боронғо Ҡытай медицинаһында нығынған традиция буйынса ул ашҡаҙан, йөрәк ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланыла. Хакастар ҙа уны һаҡлаусы, дауалаусы сара итеп ҡабул итә. Башҡорттар шулай уҡ электән уның кеше һаулығына ыңғай йоғонто яһауына ышанған. Халыҡ араһында таралыу алған им-томдарҙан күренеүенсә, ул ғәҙәттә күҙ ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланылған. Мәҫәлән, сәсәк ауырыуынан һуң күҙ һүҡырайманһын өсөн, син һиҙәп (син - Ҡытай. Көмөш һумлыҡ ҙурлығындағы түңәрәк Ҡытай мәрүәте) ҡырындыһын һалалар. Күреүебеҙсә, мәрүәттең халыҡ кейемендә, айырыуса, биҙәнеү әйберҙәрендә урын алыуы осраҡлы ғына күренеш түгел. Ул - һаҡлаусы сараһы.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# БАР БАЙРАМДАР ҘА...

## һабантуй тип аталамы ни?

**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 4-се һанында Зәкирйән Әминевтың "Ҡатын-ҡыҙмы, әллә ҡыҙ-ҡатынмы?" тигән мәҡәләһен уҡығас, мин дә үҙемдең фекерҙәрем менән бүлешергә баҙнат иттем.**



Тәүҙә шуны әйтер инем: был авторҙың һирәкләп булһа ла телебеҙҙәге һүҙҙәргә аңлатма биргән тос яҙмаларын бик ҡыҙыҡһынып уҡып барам. Унан инде "ҡатын-ҡыҙҙың" "ҡыҙ-ҡатынға" әйләнеүе менән дә бер ҙә килешмәй инем. "Үҙгәртһән, телгә лә, ҡолаҡҡа ла бер ҙә генә ятышлы түгел дәһә. Улай булғас, "ир-егет" түгел, ә "егет-ир" булырға тейешме? Көйлө генә телемдең моңо юғала ла баһа. Зиһенле халҡым был һүҙгә ниндәйҙер мәғәнә һалып, телдә ҡалыплашҡанса ҡулланманымы икән?" - тигән һорауҙар йөрөй ине күңелдә. Аңлатыусыға ҙур рәхмәт.

Мине "һабантуй" һүҙенең хәҙер телдә йыш ҡулланылып, төп мәғәнәһен юғалта барыуы ла борсой. Һәр төрлө ярыштарға бай булған барлыҡ саралар ҙа ни эшләптер "һабантуйға" әйләнде. Мәҫәлән, ҡышҡы һабантуй, балалар һабантуйы, мәктәп һабантуйы һәм башҡалар. "Айыҡ ауыл" конкурстары башланһа, "һабантуйҙар" ҙа башлана. Беҙҙән отоп алғандар, күрәһең, һуңғы ваҡытта Рәсәй телеканалында әйләндерелгән бер рекламала ла урыҫ телендә "Семейный сабантуй" үткәрергә тәҡдим ителә.

Халҡыбыҙ кәрәкле урында белеп кенә ошо һүҙҙең "туй" өлөшөн генә ҡушҡан башҡа һүҙҙәргә. Халыҡ ижадындағы Айыутуй, Ҡарғатуй, Исем туйы тигәндәре ошоға бер миҫал. Бына Кәкүк сәйе тигәнен бер ҙә Кәкүктуй тип әйтмәгәндәр. Артабан да шулай барһа, башҡалар беҙгә бармаҡ менән төртөп: "Һабантуй"ҙан башҡа нәмәгеҙ бар һуң һеҙҙең, уныһын да беҙҙән отоп алғанһығыҙ", - тимәҫтәреме?..

**Тел байлығын һаҡлауға битараф булмайыҡ, бәҫен күтәрәйек, күрәләтә телебеҙҙе ярлыландырмайыҡ, тимәксемен. Шул тиклем телгә бай мираҫлы халыҡ булараҡ, һәр төрлө байрамға матур, мәғәнәле атамалар биреп була бит. Мәҫәлән, 2021 йылда Илсе ауылында һәр төрлө ярыштарҙан торған байрамды, ағинәйҙәр тәҡдиме менән, "Шаҡай уйындары" тип атаныҡ. Байрамға килеүселәр февраль айының ҡасандыр "шаҡай" тип йөрөтөлгәнен дә хәтергә һалып ҡуйҙы. Терминология комиссияһы ошо юҫыҡта ла эшләргә, тәҡдимдәрен индерергә тейештер. Бушҡа ғына тәҙәлмәгән дә һуң ул.**

Бер ыңғай үҙемдә ҡыҙыҡһындырған тағы бер һорауыма яуап тапҡым килә. Беҙ инде бер нисә йыл тыуған яҡтың ер-һыу атамаларын йыйып, туплау өҫтөндә эшләйбеҙ. Мәғәнәләрен асыҡлай алмаған атамалар ҙа байтаҡ осрай. Ошо арала Марс Харис улы Камаловтың ебәргән белешмәләре менән таныштым. Бик ҡыҙыҡһыныусан, тирә-йүнгә, тарихҡа битараф булмаған кеше булып сыҡты хаҡлы ялдағы зоотехник. Яҙмаларында серҙәре йәшеренерәк булған атамаларға ҡарата үҙ фаразлауҙарын да өҫтәгән. Шундайҙарҙың береһе - тауҙарға бирелгән "Серәкәй" атамаһы тураһындағы фекерҙәре. "Был атаманың тауға биреләүе әсе тешләшкән бөжәккә бәйлеме икән? Миненсә, серәкәй һаҙлыҡлы урынды ярата. Учалы районының Ҡарағужа, Янауыл, Көсөк ауылдары янындағы тауҙар һәм Ҡалҡан тауының көнбайыш бите Серәкәй тип йөрөтөлә. Барыһында ла ҡарағас үҫә. Күп булып, ҡуйы булып. Бына төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектында "Теркә йорт" ҡарағай ағасынан буралған йортто аңлата. Боронғо угырҙарҙа ла "терке" - "ҡарағай" тигән һүҙ. Боронораҡ "серке" булып, хәҙер "серәкәй"гә әйләнгәне "ҡарағасты" аңлатмаймы икән? Боронғо мадъярҙар ҙа алтмыш-һикһән йыл дауамында Көньяҡ Уралда йәшәп китә бит, бәлки, шул венгр теленән дә ниҙер тороп ҡалғандыр. Быныһы минең фараз булды", - тип яҙа ул.

Ошо атамаға, шулай уҡ алдараҡ әйтелгәнгә ҡарата ла телсе ғалимдарҙың, этнографтарҙың, гәзит уҡыусыларҙың яуаптары нисек булыр икән?

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА,**
**Учалы районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*УҠЫУСЫЛАР ЯҘА*

# ФЕКЕРҘӘР, ТӘҠДИМДӘР...

* * *

Гәзиттә ир-егеттәр һәм йәштәр һүҙенә күберәк урын бирелһен ине. Ҡатын-ҡыҙ баҫты бит донъяны. Ир-егеттәр үҙҙәре лә әүҙем булһын. Элек көнәшләшер, халҡын яҡларҙай һүҙҙе әйтер өсөн йыйындарға ла ирҙәр йыйылған бит. Райондарҙағы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында ла ҡатын-ҡыҙҙар етәкселек итә. Мәктәптәрҙә әйтәһе лә түгел. Ир-аттың абруйын күтәреү бөгөн көнүҙәк мәсьәлә. Беҙ үҫкәндә атайым эшләһә лә, 5 балаһының да ата-әсәләр йыйылышына үҙе йөрөнө. Үҙем дә аталарын ебәрә инем, уға әйәреп, башҡа атайҙар ҙа йыйылышҡа йөрөй башланы. Ошо эште балалар баҡсаһы, мәктәптән башларға кәрәк, "Педагог һәм остаз йылы"нда бер күркәм башланғыс булыр ине.

**Миңзәлә САНГИШЕВА.**
**Мәләүез районы Эткөсөк ауылы.**

* * *

"Киске Өфө"нөң һәр һанын ғаилә менән көтөп алабыҙ. Әҙ генә һунлаһа ла, почтальон ауырып киттеме икән, тип борсолабыҙ. Шунан ирем менән бәхәсләшә-бәхәсләшә уҡыйбыҙ, ялға ҡайтҡанда балалар ҙа гәзитте ҡулына эләктерә һала. Йөн көйөп киткән саҡтар ҙа була. Яҙыусыларҙың сираттағы съезы үтте. Күп ижадсыларға наградалар тапшырылды, кемдәре иртәрәк, кемдәре һуңараҡ алды. Һуңлаған наградалар эсте бошора ҡайһы саҡ. Кешене үҙ ваҡытында баһалай белергә кәрәк бит...

**Фәниә ДӘҮЛӘТГӘРӘЕВА.**
**Дәүләкән районы Чапай ауылы.**

* * *

Башҡорт донъяһын сағылдырып барған өсөн "Киске Өфө"гә ҙур рәхмәтемде белдерәм. Бер нисә тәҡдимем дә бар ине. Башҡортостан спортсылары ҡаҙаныштары тураһында күберәк яҙығыҙ әле. Ир-егеттәр спортты ярата, күҙәтеп бара бит.

Тағы ла бер нәмә күңелемде борсой. Төп закон - Конституцияла Башҡортостан тип яҙылған икән, ни өсөн телевизорҙан яңылыҡ уҡығанда дикторҙар "Башкирия" тип һөйләй һуң? Ә бына сит илдән килгән ҡунаҡтар матур итеп "Башҡортостан" тип әйтә. Бына шул мәсьәләне гәзиттә күтәреп булмаҫмы икән?

**Лирон РӘХМӘТОВ.**
**Нефтекама ҡалаһы.**

* * *

Республикабыҙҙың Беренсе Президенты М. Рәхимовтың исемен мәңгеләштереү йөһәтенән фекерҙәрем бар ине. Халыҡ, әлбиттә, үҙе бик ихтирам иткән шәхестең исемен күп ойошмаларға һ.б. ҡуштырырға теләр инде, шулай ҙа тарихи исем һәр ерҙә күренһә, оҫшармы икән, тип уйлайым. Бик ихтирамлы шәхес булды, исеме тәмһеҙләнеп китмәһен инде.

Һәйкәлде Салауат Щербаков яһаясаҡ, тип әйттеләр инде, шуға ла уның бик дан булырына шигем юҡ. Унда Мортаза Ғөбәйҙулла улының ҡарашы көнсығышҡа төбәлһен ине. Сөнки беҙҙең тамырҙарыбыҙ: сығышыбыҙ, рухташтарыбыҙ, яҡлаусыларыбыҙ шул төбәктән.

"Әр-Рәхим" мәсете төҙөлеп бөтһә, үҙе һәйкәл булыр ине Президентыбыҙға. Төҙөләсәк мәсет башҡорт өсөн генә түгел, беҙҙә күп милләт вәкилдәре йәшәй, Исламды үҙ итеүселәр ҙә күп.

БР Милли музейында Мортаза Ғөбәйҙулла улының эшмәкәрлегенә арналған бүлмә булыр, бәлки. Ә төп музей уның тыуған төйәгендә урын алыр, моғайын. Атай нигеҙендә матур бина ла төҙөлгәйне. Ауыл да төҙәк. Тәбиғәте матур. Республика халҡы, ҡунаҡтары Өфө тирәһен генә түгел, Башҡортостанды ла киңерәк белер ине.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылы.**

✓ *Б.э. тиклем VII - II быуаттарҙағы Көньяҡ Урал аръяғының дала күскенселәре ҡурғандары үҙҙәренең төҙөлөшө һәм табылдыҡтар составы буйынса ошо уҡ дәүерҙәге Көньяҡ Урал һәм Урал буйы ҡомартҡыларынан әллә ни айырылмай.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Археологтар ошондай системалы нығытмалары булған ҡаласыҡтарҙың Урал аръяғы өсөн яңы күренеш булып, уларҙың барлыҡҡа килеүен ошо төбәк ҡәбиләләренең бынан алдағы дәүерҙән бирле шундай архитектура хас булған Арал буйы ҡәүемдәре менән бәйләнештә йөшәүе һөҙөмтәһе итеп аңлата.

Горохов ҡәбиләләренең мәҙәниәте һәм йәшәү рәүеше күп кенә сифаттары буйынса көньяҡ далалары күскенселәре мәҙәниәтенә яҡынлаша. Мәҫәлән, улар үлгәндәрҙе һай ғына ҡәберҙәргә ерләп, уларҙың өҫтөн ҡурған тибындағы ер өйөмдәре менән ҡаплаған. Түңәрәк төплө, тарая барған тура муйынлы һауыт-һаба шулай уҡ Көньяҡ Урал далаларының иртә күскенселәре өсөн типик күренеш. Ҡорал әйберҙәре (ҡылыстар, уҡ башаҡтары) һәм биҙәүестәр (көҙгөләр, мәрйендәр) типтары буйынса күскенселәрҙекенән бер нисек тә айырылмай. Горохов мәҙәниәтенең үҙенсәлеге күп һанлы ҡорбан килтерә торған таш мәзбәхтәрҙә (алтарҙарҙа) сағылыш таба, уларҙа һарыҡ тәкәһе баштары һәм бронзанан ҡойолған кеше фигуралары һынландырылған.

Тикшеренеүселәр горохов мәҙәниәте ерлегенә яҡын булған (Тубыл йылғаһы һәм уның ҡушылдыҡтары бассейнында), саргат тип нарыҡланған мәҙәниәт булыуын билдәләй, уның төп территорияһы Көнбайыш Себерҙең барса урманлы далаларын биләгән. Уның йәшәү ваҡыты - б.э. тиклем VI - б.э. V быуаттары. Саргат ҡәбиләләре мәҙәниәтенең иртә этабында (б.э. тиклем V - II быуаттар) горохов мәҙәниәтенән принципиаль айырмаһы юҡ. Был уларҙың торлаҡтары планировкаһының, өйҙәренең яҡынса бер төрлө булыуынан, ҡулланған әйбер инвентары составынан (керамика һәм башҡалар) асыҡ күренә. Гороховсылар кеүек үк, саргат ҡәбиләләре үлгәндәрҙе ерләгәндә бар ерҙәрҙә лә ҡурған һалыу алымын ҡулланған. Ошо параллелдәр горохов мәҙәниәтен үтә киң таралған саргат мәҙәниәтенең Урал варианты тип атау дөрөҫөрәк булыуы хаҡындағы һығымтаға ерлек бирә.

Үрҙә аталып кителгән ҡәүемдәрҙең иң яҡын күршеләре - барса Көньяҡ Урал аръяғы далаларына хужа булған күсмә ҡәбиләләр. Уларҙың мәҙәниәте, башлыса, ҡурған ҡәберлектәре аша билдәле, улар Көнбайыш Урал буйындағыларҙан гәмәлдә бик аҙ айырыла. Таш ҡатыш ер өйөмлө ҡурғандар, мәйетте ергә ҡаҙып урынлаштырыуы йолаһы үтәлгән (грунттағы) ҡәберҙәр күберәк осрай. Әммә мәйетте ер өҫтөнә (грунтҡа) һалып ҡалдырыу, ҡәбер соҡорҙарының япмаларын яндырыу осраҡтары ла бар. Тикшеренеүселәр ошондай дөйөм ҡағиҙәнән тайпылыу осраҡтарын Арал буйы сактары мәҙәниәте йоғонтоһо менән аңлата, сөнки уларҙың айырым төркөмдәрендә әле бәйән ителгән йолалар ҡәҙимге күренеш булған. Иртә тимер быуатына ҡараған Көньяҡ Урал аръяғы ҡомартҡыларын өйрәнеүсе төп тикшеренеүсе А.Д. Таиров бай археологик материалдар нигеҙендә йәшәү рәүеше һәм мәҙәниәтенең иң мөһим сифаттары буйынса ошо дәүерҙәге Урал аръяғы ҡәбиләләренең Ҡаҙағстан һәм Арал буйы ҡәүемдәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәүен билдәләне. Мәҫәлән, ул ошо ҡәбиләләрҙең көньяҡтан төньяҡҡа һәм киреғә даими меридианаль күсеп йөрөүе, дала Евразияһының ҡәүемара мөһим ваҡиғаларында әүҙем ҡатнашыуы хаҡында фараз итә.

Иртә тимер быуатындағы Көньяҡ Урал аръяғы ҡәбиләләренең этносәйәси тарихын ошолай итеп реконструкциялау Көньяҡ Урал буйынса шундай уҡ реконструкция менән тулыһынса тап килә. А.Д. Таировтың Көньяҡ Урал төбәге ҡәбиләләрендә көнсығыштан көнбайышҡа табан һәм кирегә миграция булыуы хаҡындағы фекере лә иғтибарға лайыҡ, был, күрәһең, улар өсөн ҡәҙимге күренеш булған. Ошо проблема буйынса баҫылған мәҡәлә авторҙарының берҙәм фекеренә ярашлы, б.э. тиклем VII - II быуаттарҙағы Көньяҡ Урал аръяғының дала күскенселәре ҡурғандары үҙҙәренең төҙөлөшө һәм табылдыҡтар составы буйынса ошо уҡ дәүерҙәге Көньяҡ Урал һәм Урал буйы ҡомартҡыларынан әллә ни айырылмай, ә был уларҙы ошо ҡәбиләләрҙең берҙәм этномәҙәни массивының бер өлөшө итеп ҡарауға ерлек бирә.

Ошо айҡанлы тағы ла бер нәмәне айырымлап билдәләп үтеү кәрәк: Көньяҡ Урал төбәгенең иртә күсмә ҡәбиләләре ҡурғандарын тикшереүсе төп авторҙар уларҙы этник яҡтан савромат һәм сарматтар менән бәйләй, ә был, беҙҙең ҡарамаҡҡа, фәндең хәҙерге кимәленә тура килмәй. Бындай фекерҙәр Көньяҡ Урал археологияһының башланғыс осорона ҡарай; хәҙер инде савромат һәм сарматтарҙың, яҙма сығанаҡтарға ярашлы, Азов буйы далаларында көн итеүе, шул уҡ дәүерҙә Көньяҡ Урал төбәгендә беҙ алдараҡ бәйән иткән сак, массагет, дай һәм башҡа ҡәбиләләр йәшәүе хаҡында мәғлүмәтләбеҙ. Тимәк, ошо ҡәбиләләр мәҙәниәтен беҙгә билдәле булған атамалар, мәҫәлән, дах-массагет йә иһә даик, тип атау урынлы булыр ине: даик этнонимы (дахо, дай) тик Көньяҡ Уралға ғына хас, ул туранан-тура Яйыҡ йылғаһы атамаһы менән бәйле. Беҙ иткүл, горохов һәм саргат мәҙәниәттәренә ҡараған кешеләрҙең Геродот иҫкә алған ҡәбиләләрҙән булыуҙарын ышаныслы рәүештә раҫлайбыҙ. Иртә тимер быуатының ошо ҡәбиләләрен уларҙың дөйөмләштерелгән исеме менән атау уларҙың тарихын өйрәнеү өлкәһендәге мәсьәләләрҙе хәл итеү йәһәтенән алға табан бер аҙым булыр ине. Ошоға миҫал итеп б.э. II - III быуатына ҡараған Һаҫыҡкүл ҡәберлеге материалдарын килтерергә була, бында көньяҡ төбәктәргә хас булған әйберҙәр айырыуса күп табылған (мәрйендәр, фибулалар, балсыҡ һауыт-һаба, ҡоралдар).

Былар барыһы ла далаларҙан күсеп килгән ҡәбиләләрҙең ошо төбәктә төпләнеүе процестарының көсәйә барыусы этаптарын һәм урындағы фин-уғыр халыҡын ассимиляциялауын сағылдыра.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

1943 йылдың октябренән ноябрь баштарына тиклем 16-сы Башҡорт гв. дивизияһы оборона тота, һаҙлыҡлы урмандар буйлап бер урындан икенсе урынға күсеп йөрөй. Командирҙар яугирҙарға урманлы ерҙәрҙә һуғыш алып барыу алымдарын өйрәтә. Белоруссияла һаҙлыҡлы урмандар бик күп була, бында подразделениелар менән командалыҡ итеү ауырлаша, сөнки таныш булмаған урманлы ерҙәрҙә бәйләнеш тотоу ҡатмарлаша. Техника менән үтерлек юлдарҙа дошмандың нығытылған оборона пункттары күп була, ә һаҙлы ерҙән ауыр орудиелар менән алға барыу үтә лә ҡыйынлаша. Былар барыһы ла командирҙарҙан да, ябай яугирҙарҙан да ныҡышмалылыҡ, инициатива һәм һуғыш хәрәкәттәрен алып барыуҙа тапҡырлыҡ талап итә. Отделение, взвод һәм эскадрон командирҙары нисек кенә булһа ла юғалтыуҙарһыҙ алға барыу сараларын күрә, дошман урынлашҡан урындарға бер туҡтауһыҙ разведка төркөмдәре ебәрелә.

1943 йылдың 10 ноябрендә совет командованиеһы дошмандың Гомель төркөмө ғәскәрҙәрен тар-мар итеү маҡсатында Беларусь фронтының Гомель-Речица һөжүм итеү операцияһын башлай. Немецтарҙың "Үҙәк" армия төркөмөнөң 2-се армияһы, 9-сы һәм 4-се армиялары частары флангыларына үтеп инеп, уларҙы ҡамарға һәм юҡ итергә ҡарар ителә. Белоруссияның Лоев ҡалаһы янындағы плацдармдан беҙҙең 48-се, 65-се һәм 61-се армиялары яугирҙары дошман өҫтөнә ябырыла. Башҡа частар Гомель ҡалаһына төньяҡтан, шулай уҡ Яңы Быхов йүнәлешендә һөжүм башлап, дошманды албырғата. 15 ноябрҙә беҙҙең яугирҙар Гомель-Калинковичи йүнәлешендә тимер юлын киҫә, ә 18 ноябрҙә Речица ҡалаһын дошмандан азат итә. Ҡамалып ҡалып юҡ ителеүҙән ҡурҡҡан немец командованиеһы оборона тотҡан частарына сигенергә бойороҡ бирергә мәжбүр була. 26 ноябрҙә Гомель ҡалаһы ла азат ителә. Дошмандың 100 саҡрымлап тиерлек фронт һыҙыһы асыҡ ҡала, беҙҙең ғәскәрҙәр 130 саҡрымға тиклем алға үтеп инә.

Ошо алыштарҙа 7-се гв. корпусына Гончаров-Подел, Будище, Короватичи йүнәлешендә һөжүм итеп, Речица-Короватичи, Речица-Калинковичи юлдарын киҫергә һәм дошмандың резерв частарына ҡаршы торорға бойорола.

Ә беҙҙең 16-сы гв. атлы дивизияһына, танк бригадаһы артынан барып, Смогорино ауылы районына сығыу бурысы ҡуйыла. Танк бригадаһы алға китә, дивизия уҙаллы хәрәкәт итә. Алда - Кузьминки һәм Гончаров-Подел ауылдары. Кузьминки ауылын алыу бигүк еңел булмай, дошман беҙҙең яугирҙарға пушкаларынан, минометтарынан, пулеметтарынан көслө ут аса. Беҙҙекеләр төн уртаһында атакаға күтәрелергә була. Артиллерия-миномет полкы ҡараңғы төндә дошман өҫтөнә ут яуҙыра, яугирҙар, дошман траншеяларына бәреп инеп, ҡул һуғышына күсә. Паникаға бирелгән дошман һалдаттары позицияларын ташлап ҡаса. 62-се гв. атлы полкы ла, кинәт кенә атакаға күтәрелеп, Гончаров-Подел ауылына бәреп инә. Әммә таң менән ауылға өс яҡтан немец һалдаттары һөжүм итә, беҙҙең яугирҙар ауылды ҡалдырып китергә мәжбүр була. Шул мәлдә үтә лә киҫкен, хәтәр хәл килеп тыуа - дошман 58-се һәм 60-сы полктарҙың флангыһына сығып, уларҙың 62-се полк һәм дивизия штабы менән бәйләнешен өҙә. Әммә ауыр хәлдә ҡалған яугирҙарға көрше 15-се гв. дивизияһы ярҙамға килеп өлгөрә - улар немецтарҙың атакаһын киреҡаға. Дошман беҙҙең позицияларҙы көн буйына атакалай, әммә батыр атлылар һынатмай - көслө ут асып, гранаталар ташлап, контратакаға күтәрелеп, немец һалдаттарын сигенергә мәжбүр итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*МУЗЕЙ ҠОМАРТҠЫҺЫ*

# КӨҘӘНДӘ ҺАҠЛАНА

**Әхмәтзәки Вәлиди өҫтәле Башҡортостан Милли музейы филиалы - Ишембай районы Көҙән ауылындағы Әхмәтзәки Вәлиди музейында МАЗВ ОФ-11 һаны аҫтында һаҡлана. Өҫтәлдең музейға килеп эләгеү тарихы бик ҡыҙыҡлы.**

Ул тәүҙә Ырымбурҙың Каруанһарайында һаҡланған, 1918 йылда Башҡортостан хөкүмәте вәкилдәре менән бергә Темәс ауылына "күсә". 1920 йылда Башҡортостан хөкүмәте менән Стәрлетамаҡҡа, ә 1922 йылда Өфөгә килә. 1970 йылда иҫәптән сығарылып, Башпотребсоюз складына алып барылған өҫтәлде Бибисара Азаматова күреп ҡалып, үҙенең кабинетына ҡуйырға тип Баймаҡҡа алып ҡайта. Төҙәтеп-йүнәтеп алынған өҫтәл артында Бибисара Мостафа ҡыҙы 20 йылдан ашыу эшләй. Иҫәп һаны буйынса ул был өҫтәлдең нәҡ Әхмәтзәки Вәлиди өҫтәле булыуын асыҡлай.

1994 йылда, Әхмәтзәки Вәлиди музейы асылғанға тиклем, музейҙың беренсе директоры Кәрим Шәйәхмәтов



экспонаттар йыйыу барышында билдәле шәхестең өҫтәле Баймаҡта икәнен асыҡлай. Уны музейға алырға теләп, ул Баймаҡҡа өс тапҡыр бара, ләкин Бибисара Азаматова бирергә теләмәй. Шулай ҙа 1994 йылдың 4 октябрендә ул өҫтәлде музейға бүләк итә.

Өҫтәлгә 12,5 һәм 5,5 сантиметрлы тимер пластина беркетелгән, унда: "Зәки Вәлиди исемендәге музейға Баймаҡ халҡынан Каруанһарай ҡомартҡыһы. Октябрь, 1994 йыл" тип яҙылған. Имәндән эшләнгән өҫтәлдең үлсәме 200*100*80 сантиметр, буҫтау менән көпләнгән. Ике тумбалы, уларға ике яҡтан ағастан юнып-һырлап эшләнгән арыҫлан баштары беркетелгән, өҫтәлдең ҡапҡасында йоҙаҡлы өс тартма бар.

# "АҒИҘЕЛ" ЖУРНАЛ

**Быйыл март айында "Ағиҙел" журналының сыға башлауына 100 йыл тулды. Ошо уңайҙан журналдың ижади составын тәшкил итеүсе биш хеҙмәткәргә, биш әҙипкә - журналдың баш мөхәррире Мөнир Ҡунафинға, баш мөхәррир урынбаҫары Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайға, яуаплы сәркәтип Луиза Кирәевağа, шиғриәт бүлеге мөхәррире Гөлнара Хәлфетдиноваға, проза бүлеге мөхәррире Салауат Әбүҙәргә - бишәр һорау менән мөрәжәғәт иттек. Әңгәмәнең үҙенсәлеге шунда: һорауҙарға яуап биреүселәр, берберегенең яуабын ишетмәйенсә, уҡымайынса, үҙаллы фекер йөрөттө.**

**Халыҡ китап, гәзит-журнал уҡымай, тип зарланабыҙ, сәбәптәрен башлыса заманға, электрон мәғлүмәт саралары яппарабыҙ. Башҡа сәбәптәре нимәлә? Бөтөнләй уҡымаған кешене "Аҡмулла арбаһы"нан төшөп ҡалған кеше тип иҫәпләп буламы?**

**Салауат:** Һәр зарҙың нигеҙендә сәбәп ята: заман башҡа, заң башҡа, тигәндәй, урағы - салғы, салғыны моторлы саҫҡыстар ҡыҫырыҡлап сығара. Әлбиттә, китапты мин улар менән сағыштырмайым, ләкин заман технология-уҡый. Иғтибар итһәгеҙ, ҡалабыҙҙа ғына ла яңынан яңы китап магазиндары асылып тора бит. Яңы йыл алдынан ғына билдәле йәмғәт эшмәкәре һәм ойоштороусы Әлиә Айсина асҡан Zaman-Смена магазины әле йәштәр араһында ниндәй популяр. Күптән түгел унда фэнтези жанрында ижад иткән башҡорт ҡыҙы Асия Арыҫлановаҙың яңы романы хаҡында һөйләшеү булған, унда күберәк йәштәр ҡатнашҡан. Музей форматында ойошторолған шул магазиндан кеше өҙөлмәй бит. Бында, әлбиттә, Әлиәнең шәхси бренморткала йәшеренгән кеүек, әйтәйек, заманында, бигерәк тә соцреализм осоронда, Мостай Кәримдең "Вәғәҙәләр бирмә", Рәми Ғарипованың "Табыныу", Рауил Бикбаевтың "Ностальгия", "Халҡыма хат", Әмир Әминевтың "Ҡытайгород" әҫәрҙәрендәге, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Ғәзим Шафиҡов публицистикаһы төбөндә йәшеренгән мәңгелек һәм көндәлек серҙәрҙе, әсе хәҡиҡәтте шәйләһә, үҙен дә ижадсы итеп тойҙо, кинәнеп мыйыҡ аҫтынан ғына йылмайҙы ябай уҡыусы. Шуға ул журнал өсөн аҡсаһын да йәлләмәне.

Ә бөгөн ул уҡыусы... бар мәғлүмәт, бар асыҡлыҡ һәм билдәләлек интернетта бар, тип уйлай. Уның ауына эләгә лә сыға алмай. Ысын хәҡиҡәт менән ялған мәғлүмәтте-фейкты айырмай башлай. Уның өсөн ысын зауыҡ, ысын сәнғәт, юғары әҙәбиәт йәйләп-йәйләп ҡына юҡҡа сыға бара. Был үҙ артынан башҡа ихтыяждар тыуҙыра. Әйтәйек, зауыҡлы сағында ул тәүҙә, журнал зиһен менән көпләп, нығытып барырға кәрәк. Күптәр шуны аңламай, ҡулына китап алмай осоп төшөп ҡалыуы ла ихтимал. Бик ихтимал.

**Әҙәбиәттең кимәле журналдың да кимәле тип иҫәпләп буламы? Һеҙ башҡа кеше өсөн әҫәр яҙып бирә алмайһығыҙ, мөхәррирләй генә алаһығыҙ. Барлыҡ художестволы талаптарға яуап бирерлек әҫәр ниндәйерәк әҫәр ул?**

**Салауат:** Һүҙ ҙә юҡ, йөҙ-ҡиәфәтең ниндәй, көҙгөлә шул сағылыш таба. Ай һайын сығып килгән журнал, әлбиттә, әҙәбиәтебеҙҙең асыҡ сағылышы. Нисек кенә булмаһын, әҫәрҙәр иң беренсе сиратта журналдарҙа, гәзиттәрҙә донъя күрә. Мостай Кәрим томдарын ҡарап әйткән бит әле: "Был әҫәрҙәрҙең барыһы ла иң беренсе "Ағиҙел" журналында донъя күрҙе". Хәйер, башҡа данлы яҙыусыларыбыҙ ҙа ошо уҡ һүҙҙе ҡабатлар ине, моғай-

лары барыбер гәзит-журнал, китап уҡыуға йөгөнтөһөҙ ҡалмай. Балалар хәҙер кеҫә телефондарына сат йәбеште, шунан айырыла алмай. Унда инде, урам ләститенән алып, бөйөк аҡыл эйәләренең хеҙмәттәренә тиклем йәнең көҫәгән мәғлүмәт алыу мөмкинлеге бар. Ҡыҫҡаса әйткәндә, кеҫәләрҙә донъя китапханаһы ята. Шулай булғас, кеше уҡымай, тип әйтеү менән килешеп етмәйем. Уҡыу, мәғлүмәт алыу сысулы ғына үҙгәрә бара. Тимәк, заман кешеләре "Заманса Аҡмулла арбаһы"нда бара хәҙер.

**Әхмәр:** Бында мәсьәләгә тик бер генә күҙлектән сығып ҡарау дөрөҫ булмаҫ ине. Беренсенән, хәҙерге заман кешеһе ат менеп түгел, машина менән йөрөгәне өсөн генә беҙ уны йәйәү йөрөй тип иҫәпләй алмайбыҙ. Икенсенән, кеше китапты, гәзит-журналды иң күпләп уҡыған заманда китап, гәзит-журналдар иң төп һәм берҙән-бер мәғлүмәт сығанағы булып иҫәпләнгән. Өсөнсөнән, бер мал ҡараусы мәсеткә килгәс, ундағы мулла: "Бер үҙеңә вәғәз һөйләп тормам инде", - тигәс, мал ҡараусы: "Ә нинә мин эшкә барһам, һарайға бер генә баш һыйыр булһа ла, уға һыу эсерәм, бесән һалам?", - тип мулланы таң ҡалдырған. Күп кенә яҙыусылар шундай принцип менән ижад итә: яҙғандарымды бер генә кеше уҡыһа ла, ижад итәсәкмен. Иң мөһиме - уны кем уҡый бит әле? Нимә генә тимә, киләсәккә лә "Аҡмулла арбаһы" алып барасаҡ. Был арбаға ултырмауҙар үткәндә тороп ҡаласаҡ.

**Луиза:** Эйе, ҡағыҙ форматтағы китапты йөҙәрләгән телевидение каналдары, компьютерҙар, интернет селтәре, мобиль телефондар нығ ҡыҫырыҡланы. Кеше уҡымай икән, уйлауҙан, фекерләүҙән дә алыҫлаша. Үҙ-үҙеңде тәрбиәләү, зиһенеңде байытыу бит ул - китап уҡыу. Беҙгә, совет осоро балаларына, китап бүләк итһәләр, ҙур шатлыҡ булды... Ул ваҡытта илебеҙ ҙә иң күп уҡығандар иҫәбендә булған. Ә хәҙер ул статистика буйынса донъя кимәләндә 35-се урындарҙа ғына килә икән. Шулай ҙа электрон китаптарҙы, әҙәби сайттарҙы үҙ итеүселәрҙе лә иҫәпкә алғанда, бөтөнләй бер нәмә лә уҡымаған кеше юҡтыр, тип уйлағы килә.

**Гөлнара:** Халыҡ китап уҡымай тип уйлау дөрөҫ түгел инде ул, халыҡ ды үҙе уҡ реклама булып тора. Бөгөн донъя тренды - психологик, мотивация биреүсе, шулай уҡ сәләмәтлек хаҡында һәм дә дини китаптар, уларға ихтыяж ныҡ ҙур. Башҡорт китабы донъяһында ундай авторҙар әлегә юҡ, дөрөҫөрәге, бар, улар шунда уҡ киң аудиторияны яулар өсөн рус телендә ижад итә. Шул уҡ Регина доктор, Азат Вәлиев, Динә Ғүмәрова һәм башҡа бик күп авторҙарҙың китаптары интернет аша донъя буйлап, яҡшы һатыла, русса яҙһалар ҙа - улар башҡорттар. Ә әҙәбиәткә килгәндә инде, беҙҙең үҙебеҙҙең локаль башҡорт әҙәбиәте лә көслө генә бит, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Әмир Әминев, Мөнир Ҡунафиндарҙың әҫәрҙәре баҫылған "Ағиҙел"дең һандарын эҙләп йөрөйҙәр икән, был бит үҙе уҡыусыларҙың барлығының күрһәткесе.

Халыҡ ихтыяжын иҫәпкә алмай, үҙенең исеме күренһен өсөн генә яҙып, аҙаҡ халыҡтан һөйөү талап итеп йөрөгән авторҙарыбыҙ ҙа етерлек инде. Баҙар шарттарында барыбер ҙә тауарың үтемле булыуын ҡайғыртмаһаң, уйындан төшөп ҡалаһың инде. Классик яҙыусыларҙан тыш, бөгөн интернет аша билдәләлек яулаған яҙыусыларыбыҙ ҙа бар, уларҙың яҙмалары интернетта башҡорт телен популярлаштыра. Матур ғына әҙәби интернет ресурстарыбыҙ, төркөмдәр эшләп килә, ана хикәйәләр төркөмдәре нисек популяр! Ғөмүмән, бөгөн мәғлүмәт һәм уны еткереү саралары күп булған заманда, кешеләр донъя көтөр өсөн әллә нисә эштә эшләргә мәжбүр булған йәмғиәттә әле беҙҙең китаптар бер ни тиклем һатыла һәм уҡыла икән, был үҙе уҡ ҡаҙаныш. "Аҡмулла арбаһы"на ла ихтыяж бар, был да һөйөнөс. Әле беҙҙең башҡортса яҙыусыларҙың аудитория бар ул, бына ун йылдан, егерме йылдан нимә булыр, үҙ шуныһы мәсьәлә. Башҡортса уҡый белеүселәр, уҡырға теләүселәр булырмы?

**Мөнир:** Кеше ғүмер буйы әҙәбиәттән тормош юлында йүнәлеш, ғүмер асылына асҡыс эҙләп йәшәй. Яҙыусынан, гәзит-журналдан ул дөрөҫлөк көттө, әле лә көтә. Тура мәғәнәлә әйтеп булмаҫын аңлаһа ла, бигерәк тә совет осоронда, образдарҙан, йәшерен "аҫҡы ағымдарҙан", эзоп теленән сырамытырға тырышты хаҡлыҡты. Энә йө-

## Ул халыҡ күңеленең сағылышы.

уҡып алайым, театрға барайым, тип кинәнес кисерә ине, ә хәҙер анау затлы шарапты тәмләп ҡарайым, аҡса булғанда Төркиәгә барайым, тип үҙен "замана кешеһе" итеп хис итә. Гәзит-журналға яҙылыу ихтыяжы өсөнсө урындан егерме өсөнсөгә күсә. Юғары сәнғәтте аңлап йәшәгән замандаш менән көндәлек ләззәт менән эш иткән кеше араһында айырма шунда ғына: беренсеһе усында Мәңгелекте күрә, уның менән эш итә, икенсеһе ошо мәлдә мәңгелек тип хис итә. Ҡайһыһы хаҡлы? Шайтан ғына белһен.

Тормошта кеше һәр саҡ Үҙен эҙләй. Кемдер - аҡыллы китаптан, затлы тамашанан. Тик күптәребеҙ - ике нотанан торған йырҙан, осһоҙ эстрада таҡмағынан... Ҡыҙғаныс, бына шул кимәлдәге зауыҡ беҙҙә. Ә инде "Ағиҙел" журналының ике мең тоғро дуҫы Толстой менән Чеховтың, Мостай менән Рәмиҙең, Таңсулпан менән Шәкүрҙең, Йомабикә менән Гөлсирәнең, Чайковский менән Исмәғилевтың... дуҫы. Ике мең кеше ике миллион кеше менән идара итеп, киләсәккә алып бара алыр, шуға ышанайыҡ. "Ике-өс" уҡыған кеше өсөн булһа ла ижад итәбеҙ. Әйтәм бит, ана шул "ике-өс" үҙ артынан тотош заманды, тотош халыҡты үҙе менән рухлы, аңлы киләсәккә әйәртеп алып китәсәк. Ошо көнгәсә кешелек аҡыллы һүҙҙән, зирәк фекерҙән баш тартҡаны юҡ әле. Халҡыбыҙ ғүмер буйы ижад иткән. Тарих күсәрен барыбер ҙә матди байлыҡ, көндәлек мәшәҡәт түгел, ә классик ҡабатланмаҫ әҙәби әҫәрҙәр, сәнғәт гәүһәрҙәре әйләндерә. Ә "Ағиҙел" ана шул баҫыуҙа тәрәнен батырып ер һөрә. Тимәк, мәңгелек менән эш итә, тип йыуанабыҙ ҙа, ҡыуанабыҙ ҙа. Әлбиттә, һине аңлаған, һанлаған дуҫтар күберәк булһа, тағы ла шәберәк.

"Аҡмулла арбаһы" хикмәтле, затлы, аҡыллы һәм миһырбанлы каруан ул. Һәр кем дә унда келтер-келтер барырға мөмкин. Тик ваҡыт һәм мәңгелек хакимдары уны тау-таш араһынан да, һәләкәтле соҡорҙарҙан да, баш әйләндерерлек хуш еҫле сәскәле болондарҙан да йөрөтә... Барған һайын ултырған урынды белем, юғары зауыҡ, яҡты ын. Бына, журналдың кимәлен шунан сығып та баһалап була!

Ә инде барлыҡ художестволы талаптарға яуап биргән әҫәр тураһында әйткәндә, күктең сиге булмаған кеүек, кеше күңеленең дә сиге юҡ. Заман талаптары менән бергә әҙәби талаптар ҙа үҙгәреп тора. Кисәге яҙылған әҫәрҙәр - бөгөнгө уҡыусыға, бөгөн яҙылғандары иртәгәге уҡыусыға көлкө булып тойолоуы ла ихтимал. Әҙәбиәт - йән үҫешенең процесы ул. Киреһенсә лә булырға мөмкин...

**Әхмәр:** Беҙҙең башҡа халҡыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ, әҙәбиәтебеҙ юҡ һәм яңы әҫәрҙәр иң беренсе нәүбәттә берҙән-бер әҙәби журналда сағылыш таба икән, асылда, әҙәбиәт кимәле ул журналдың кимәле лә. Әммә бер үк ҡымыҙҙы ике төрлө һауытҡа: стаканға йә ижауға һалып эсеп ҡараған кеше уларҙың тәме араһында айырма тойған кеүек, шул уҡ яҙыусыларҙың яҙған шиғырҙарын, хикәйәләрен, повестарын, романдарын, очерктарын төрләсә биҙәлештә журналға биреү ҙә яңы форма йөкмәткене лә яңыса балҡытып ебәрә. "Башҡорт халыҡ йыры "Һандуғас"ты елән кейеп тә, фрак кейеп тә башҡарып була", тигәйне бер саҡ Мостай Кәрим. Мәҫәлән, журналыбыҙ үҙ тарихында "реформатор" баш мөхәррирҙәр менән дан тота. Журналдың исемен "Әҙәби Башҡортостан"дан "Ағиҙел"гә үҙгәртеп, тарихта иң юғары тираж йыйыуға өлгәшкән Хәким Ғиләжев (әйткәндәй, уның да тыуыуына быйыл 100 йыл тула) баҫманы популярлаштырыу өсөн рекламаһын шырпы ҡабының тышында һынландырыуға өлгәшә. Булат Рафиҡов иһә яҙыусыларҙың юғары художестволы әҙәби әҫәрҙәр яҙыуын көтөп кенә ултырмай, үткер публицистикаға, тарихи хроникаға (тыйылған әҫәрҙәр циклы, "Ауылыбыҙға - тыуыу тураһында таныҡлыҡ" һ.б.), йәштәргә, фантастик әҫәрҙәргә арналған махсус һандарға, "Бәпембә", "Шоңҡар", "Йәдкәр" ҡушымталарына мөрәжәғәт итеп, журналды өр-яңы йүнәлешкә бора. Һөҙөмтәлә "Ағиҙел"дән яңы журналдар үҫеп сыға.

Мөнир Ҡунафин иһә тотош һандарҙы бер романға, повестарға, хикәйә-

✓ ***Иң ауыры, уҡыусыны ҡыҙыҡһындырырлыҡ тема табырға, уны мауыҡтырғыс итеп еткерә белергә кәрәк. Үкенескә ҡаршы, әҙәбиәттә хәҙер талап төшөнсәһе бүҫкәрҙе. Ғәйепте уҡыусынан түгел, үҙебеҙҙән эҙләргә ҡала...***



# ҒЫНА ТҮГЕЛ.

ләргә, шиғырҙарға бағышлап, уҡыусыларҙың, шулай уҡ яҙыусыларҙың иғтибарын журналға ылыҡтыра алды. Һөҙөмтәлә беҙгә: "Ағиҙел" журналы һаман да сығамы ни? Бала саҡта уҡый торғайным. Шундай-шундай һанын ҡайҙан табырға була?" - тип шылтырата башланылар. Быларҙан сығып, шуны әйтергә була: эйе, әҙәбиәттең кимәле, ысынлап та, журналдың да кимәле, әммә журнал әҙәбиәт үҫешенә яңы йүнәлеш бирә ала. Быны беҙ журналдың юбилейына арнап иғлан иткән конкурстарҙа ныҡ тойҙоҡ. Ә барлыҡ художестволы талаптарға яуап бирерлек әҫәр - ул илле, йөҙ йылдан һуң да бөгөнгөләй уҡылырлыҡ, ҡабул ителерлек әҫәр.

**Луиза:** "Ағиҙел" журналының тарихы аша бар тарихи-әҙәби процесты күҙ алдына килтереп була: баҫма - үҙенең тәүге һанынан алып бөгөнгө көнгә тиклем - халыҡты әҙәбиәтебеҙҙең яңы ҡаҙаныштары менән таныштыра, республиканың сәйәси-иҡтисади хәлен яҡтырта, мәғариф, әхлаҡ, илһөйәрлек темаларын күтәрә, яҙыусыларыбыҙ өсөн ижад мәктәбе булараҡ сығыш яһай. Әҙәби журналдарҙың йәмғиәттәге роле тураһында күп һөйләргә булыр ине. Улар илебеҙҙең дөйөм әҙәби-мәҙәни мөхитен барлыҡҡа килтерә. Ә "әҙәби-мәҙәни мөхит" тигән төшөнсә ҡоро һүҙ генә түгел. "Әҙип үә ғалимдары булмаған халыҡ - бәхетһеҙ, мәшһүр кешеләрен оноткан халыҡ - яҡлаусыһыҙ, әҙәбиәте булмаған милләт - рухһыҙ". Аҡыл эйәһе Ризаитдин Фәхретдиновтың был һүҙҙәре бөгөн дә актуаллеген юғалтмай.

Әҙәбиәттең художестволылығы, һис шикһеҙ, журналдың да кимәлен күтәрә. Әйтәйек, үткән быуаттың 60-сы йылдары - яҙыусылар Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Зәйнәб Биишева әҫәрҙәре баҫылған дәүер - журналдың да "алтын осоро" булманымы икән?

Барлыҡ художестволы талаптарға яуап бирерлек әҫәр бармы? Был һорауға ниндәй күҙлектән ҡарайһың бит. Замана талабы, уҡыусы зауығы тип әллә күпме һүҙ сурытырға мөмкин был өлкәлә. Шуны ғына билдәләге килә: хәҙер ысынбарлыҡ шул тиклем тиҙ үҙгәрә. Бөгөнгө һүҙең иртәгәгә ярамауы ла мөмкин. Яҙыусыға был шарттарҙа ижад итеүе лә бик еңел түгелдер...

**Гөлнара:** Художестволы талаптарға яуап биргән әҫәр иң тәү сиратта уҡыусының иғтибарын тота алған әҫәр, минеңсә, ҡәләм оҫтаһының стиле бөгөнгө зауыҡты ла тойорға, шулай уҡ унан ниндәйҙер яңы һулыш та тойолорға тейеш. Ваҡиға булырлыҡ әҫәрҙәр әҙ, әммә юҡ түгел, табылып тора. Был беҙҙә генә түгел, бөтә донъя әҙәбиәтендә лә шулайҙыр.

**Мөнир:** Журнал кимәле менән иҫәпләп була тиһәк, атабыҙ - әҙәбиәтебеҙҙе, әсәбеҙ шиғриәтте кесерәйтеү төҫлө булыр. Әҙәбиәт журналда баҫылған әҫәрҙәр генә түгел бит, ул тарих, ул замандың сағылышы, ул шул уҡ быуаттар элек яҙылған әҫәрҙәр ҙә, әҙиптәрҙең тынғыһыҙ тормошо ла... Беҙ барыһын да нисек кенә үҙ эсебеҙгә алырға тырышһаҡ та, физик һәм рухи йәһәттән дә был мөмкин түгел.

Икенсенән, әҙәбиәт, хатта ки милләт тарихында тотош дәүерҙе айырым яҙыусылар билдәләгән кеүек, кимәлде лә, әҙәбиәтте лә айырым әҫәр, бөйөк әҫәрҙәр оло ареналарға сығара ала. Һәм шуныһы ла бар: ҡайһы бер әҫәрҙәр заманды, милләтте танытһа, ә ҡайһы саҡ үҙ зауыҡтарынан сығып, замандаштар ҙа айырым әҫәрҙе "классика" дәрәжәһенә күтәрергә мөмкин. Уйҙарым ситкә китте, ҡыҫҡаһы, журнал бөгөн әҙәби әҫәрҙәргә ҡытлыҡ кисермәй. Хикәйәләр генә табыуы ауырлашып китә. Һығымта шул: замана әҙәбиәте кимәлен журнал билдәләргә һәм уның үҫешенә йылдам йоғонто яһарға тейеш.

**Хәҙер "клиплы фекерләү" заманы тиҙәр. Кешенең оҙон-оҙон романдар уҡырлыҡ ваҡыты ла юҡ. Роман жанр булараҡ юҡҡа сығыр тип уйламайһығыҙмы?**

**Салауат:** Яҡшы әҫәр бер ҡасан да юҡҡа сыҡмай. Роман булһынмы йә башҡа жанрҙа яҙылһынмы. Уҡыусы ҡыҙыҡһына икән, хатта биш-алты томдан торған әҫәрҙәр ҙә уның танһығын ҡандыра алмай, дауамын көтә. Иң ауыры, уҡыусыны ҡыҙыҡһындырырлыҡ тема табырға, уны мауыҡтырғыс итеп еткерә белергә кәрәк. Үкенескә ҡаршы, әҙәбиәттә хәҙер талап төшөнсәһе бүҫкәрҙе. Шулай булғас, ғәйепте уҡыусынан түгел, үҙебеҙҙән эҙләргә ҡала...

**Әхмәр:** "Клиплы фекерләү" ни, элек тә булған. Заман, ваҡыт тотош яҙыусының ижадын, айырым әҫәрҙәрен шул тиклем итеп шымарта, дөйөмләштерә, артыҡ урындарын алып ташлай һәм барыһынан бер генә һөйләм тороп ҡала. Әйтәйек, беҙҙең бөгөн Лев Толстойҙың "Анна Каренина" романын ҡат-ҡат уҡырға ваҡытыбыҙ ҙа юҡ, шуға күрә әҫәрҙең төп һығымтаһын клип формаһында әйтеү менән генә сикләнәбеҙ: "Кешенең бәхетһеҙлегендә үҙ бәхетеңде төҙөп булмай..." Клипҡа торош итерлек роман яҙырға кәрәк әле беҙгә.

**Луиза:** Бәлки, мин бик оптимист кешелер, шулай ҙа романдар юҡҡа сығыр тип уйламайым. Замана күренештәре менән бәйле сюжет динамикаһының етеҙлеге, стиль-форма йәһәтенән үҙгәрештәр булыуы мөмкин, әммә жанрҙың юҡҡа сығыуын күҙ алдына ла килтереп булмай. Әйтәйек, "Ағиҙел" журналында баҫылып сыҡҡан әҫәрҙәрҙе - Ғәлим Хисамовтың "Президент Рәхимов", Флүр Ғәлимовтың "Шайморатов генерал", Наил Ғәйетбайҙың "Йән" романдарын эҙләп йөрөп уҡыған китап уҡыусыларыбыҙ бар... Былар барыһы ла өмөттө һүндермәй әле.

**Гөлнара:** "Клиплы фекерләү" заманы тип ҡыҫҡалығы өсөн генә әйтмәйҙәрҙер, әҫәрҙең динамикаһы булһа, ул клиплы фекерләүселәр зауығын ҡандыра ала тип уйлайым. Бына яңы әҫәрҙәрҙән Наил Ғәйетбайҙың "Йән" романының тәүге өлөшөндә шул динамика бар тип уйлайым. Романдар жанр булараҡ йәшәр ул, "Ырғыҙ", "Емеш" форматында бөгөнгө башҡорт көнкүреше һәм рухиәтен сағылдырған берәй эпик романды күргем килә минең шәхсән. Бөгөнгө һынылыш дәүерендәге башҡорттарҙың психологияһын күрһәткән ул роман берәй яңы исем, беҙ әле бөтөнләй белмәгән яңы автор тарафынан тыуҙырылыр, тип уйлайым.

**Мөнир:** Һуңғы мәлдә, һиҙәһегеҙме икән, кешеләр уйсанырак булып китте, пандемия осоронда, күңел-зиһенендә тартыш-алыш барған мәлдә кеше китапҡа тартылды. Кеше ауырлыҡтар күрә башлаһа, уйлана, һиҫкәнә шул. Айырым ҡайғы булһа булһын, илгә ҡайғы килмәһен, тигән кеүек, ил өсөн, киләсәгебеҙ өсөн борсолоуҙарыбыҙ ҙа етди уйҙарға һала. Беҙ өҙөкйыртыҡ уйланып өйрәнмәгәнбеҙ. "Клиплы фекерләү" беҙгә хас түгел, оҙон көйҙәр, эпостар ижад иткән халыҡ ҡолас йәйеп йәшәгән, ҡолас киреп фекерләгән. Ул илаһилыҡ алдында телһеҙ ҡалған, ололар һәм сәсән алдында телен тыйған, һөйгәне янында һандуғас булып һайраған, яуҙа бөркөт булып ташланған. "Клиплы" кәртәләргә уны индереп булмай, ул шашҡан ярһыу саптар кеүек, бар ҡаршылыҡтарҙы емереп, азатлыҡҡа ынтыласаҡ. Ә үҙендә башҡортлоҡ рухын юғалтҡан, һындырған әҙәм үҙе лә һиҫмәҫтән ана шул ҡапҡанға эләгеүе ихтимал. Тар фекерләмәһен өсөн милләтебеҙҙә ҡан хәтерен яңыртып тороу фарыз. Улар тарихи романдарҙа, тарихи киноларҙа, фәлсәфәүи повестарҙа, иҫ киткес халыҡсан йолаларҙа...

Уйлана белгән кешелә бер кәлимәлә лә романға торошло фекер ятырға мөмкин - быныһы ла яңылыҡ түгел. Һеҙгә бер шиғыр.

**Одиноко сижу в горах Цзинтиншань**

*Плывут облака*
*Отдыхать после знойного дня,*

*Стремительных птиц*
*Улетела последняя стая.*

*Гляжу я на горы,*
*И горы глядят на меня,*

*И долго глядим мы,*
*Друг другу не надоедая.*

Артыҡ ябай шиғыр кеүек, эйеме? Ҡарап ултырған икән берәү тауға... Боронғо Ҡытай шағиры Ли Боныҡы ул. Бөйөк шағир. Уның шиғриәте менән танышып сыҡҡас, кеше таҙарына. Иҫ киткес тәбиғилек, күңел, фекер таҙалығы тоя уҡыусы. Уның бөйөклөгө шунда. Шағир былдай таҙалыҡҡа йылдар буйы килә. Ә баҡһаң, таҙалыҡтың бөйөклөгө ябайлыҡта икән.

Малевичтың "Ҡара квадрат"ы юҡтан ғына яҙылмай. Оло романдарҙы ике юллыҡҡа һыйҙырырға тырышыуҙан. Баҡһаң, ҙур, оло фекер ҙә ябайлыҡтан тора икән. Тик уны аңлар өсөн иҫ киткес тулы тормош һәм ижад юлы үтергә кәрәк.

*Күктә йондоҙҙар болара, -*
*Сәғәт нисәләр икән?*
*Бер донъянан икенсегә*
*Ниңә күсәләр икән?* - Мостай Кәримдең ошо дүрт юллығын уҡығас, ниндәй генә уйҙарға суммайһың. Хатта ки уның "Ярлыҡау" әҫәре тулыһынса иҫкә төшә, Любомир Зухтың тормошо, мөхәббәте, үлеме... күҙ алдына баҫа. Тик... "клиплы фекерләү" менән үҫкән быуын былай уҡ тәрәнгә инеп уйлана беләме икән, белмәйем. Уныһы уларға ят, шуныһы үкенес.



**(Дауамы 11-се биттә).**

**✓ Ҡапыл, көтмәгәндә, ҡаты итеп ишек шаҡынылар. Һиҫкәнеп уянды. Һаҡ ҡына баҫып ишеккә яҡынланы: "Кем йөрөй икән иртә менән?.." Теге яҡҡа баҫҡандарҙың яңғыҙ түгеллеген һиҙҙе. Кире сигенде.**



Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТАБЫЛДЫҠ

хикәйә

Иртәгеһен инде бала түгел, үҙе үк ныҡлы ҡарарға килгәйне, баланы йонсотоп, етемһерәтеп, бер ҡайҙа ла алып йөрөргә кәрәкмәй, ни булһа ла ошонда бергә күрерҙәр. Бала ла ҡый һауытында ятһа ла һыуыҡ алдырмағайны, үҙен тыныс, сабырлы тота, ихласлап имә, тыныс йоҡлай. Тыныс булһа ла, бала барлығы бер беленмәһә бер беленер бит, ни тиһәң дә, дөйөм ятаҡ, коридорҙан унда-бында үтеп-һүтеп йөрөйҙәр. Ярай әле ике яҡ бүлмәләр буш тора, уның ҡарауы, ишеге йоҡа фанера таҡтанан, тауышты ғына түгел, коридорҙан иҫкән елде лә тишектошоғонан еңел үткәрә. Пружиналы карауатының аҫтында одеал ята ине, шуның менән ныҡлап ишекте нығытырға тотоноп китте: ошолай итһәң, тауышты ла үҙенә һеңдерер, елде лә тотоп ҡалыр.

Аҙна ниндәйҙер елкенеү, күңелле мәшәҡәттәр менән һиҙелмәй ҙә үтеп китте. Йома көн төштән һуң ентекләп ҡырынып, душ аҫтына баҫып йыуынып алды, таҙа кейемдәрен, тубыҡтары тупайып беленеп, балаҡтары торбаланып киткән салбарын үтекләп кейҙе. Бараһы ер алай ҙа йыраҡ түгел, 5-10 минутлыҡ ара. Көн һайын көйләнгән аҙан тауышы бында бермә-бер асыҡ ишетелә. Барғанында йома намаҙы тамамланып ҡына тора икән, ишек төбөнән йыраҡ булмаған урындағы эскәмйәлә сират та юҡ, килеүселәргә аят бағышлаған мулла ла унда-бында үтеп йөрөп ята. Спорт кәпәсен ҡулайлап кейеп, эскәмйә ситенә һаҡҡайны, теге килә һалып та етте:

- Әссәләмәғәләйкүм, изге йома көнө менән!

- Һаумыһығыҙ. Рәхмәт. Һеҙҙә ине йомош.

- Берәй әруахҡа аят бағышлатаһығыҙмы?

- Юҡ та... - Ары ни әйтергә белмәй тотлоҡто. - Ней, бынан бик алыҫтағы туғанымдың улы тыуғайны, шул шылтыратты, яҡын-тирәлә мәсет юҡ, һеҙҙә генә, шунда барып, малайыма исем ҡуша алмаҫһығыҙ микән, тип үтенде.

- Сәйер теләк. Балаға исемде йортҡа саҡыртып, ҡолағына ҡысҡыралар, ғәҙәттә, ә бында бик күп саҡрымдар аша ҡушылған исемде ҡабул итерме бәпес, уға барып етерме, бына эш нимәлә...

- Ишетер ҙә, барып та етер, бик һиҙгер бала ти туғаным...

- Хәйер, ата-әсә мосолманға йәбешеп бармаған исемде ҡуша ла шуның менән бөттө тип уйлай, изге йоланы үтәү хаҡында уйлап та ҡарамай. Шуға туғаныңдың теләге, уйы изге, уны урын-еренә еткерергә кәрәк. Кем тип ҡушырға ниәтләнегеҙ инде?

- Танһыҡ, тип.

- Бик танһыҡтыр инде ул һеҙҙең өсөн. Матур исем һайлағанһығыҙ.

Йолаһы атҡарылып, исем ҡушылды, уға йәшел тышлы, тышына алтын ярым ай төшөрөлгән танытма тапшырҙы мулла:

- Ебәр туғаныңа яйын яйлап, ошо изге ҡағыҙ менән исеме лә барып етер...

Ҡайтты ла танытманы баланың башы аҫтына ҡыҫтырғас, ҡәнәғәт һөйләнде:

- Бына, ғүмереңдәге тәүге танытмаң, хәйерле булһын!

...Тағы ла ай самаһы ваҡыт үтте, хәйер ул бәхетле көндәр ағышын кем генә иҫәпләгән тиһең. Танһыҡ та ауырлығын бер аҙ арттырҙы, буғай. Һәр хәлдә, көн һайын ҡулында һәлмәкләп шуны һиҙә, әкренләп муйынын да тота башланы һымаҡ, уны танып йылмайырға ла итә шикелле. Бала йылмайыуын күреү үҙе бер бәхет икән дә баһа, шуны белә хәҙер.

Ҡапыл, көтмәгәндә, ҡаты итеп ишек шаҡынылар. Һиҫкәнеп уянды. Һаҡ ҡына баҫып ишеккә яҡынланы: "Кем йөрөй икән иртә менән?.." Теге яҡҡа баҫҡандарҙың яңғыҙ түгеллеген һиҙҙе. Кире сигенде. Балконға сығып, аҫ яҡҡа күҙ ташланы һәм күргәненән тертләп китте: ятаҡтың эргәһенә үк янғын машинаһын, "Тиҙ ярҙам"ды, полиция фургонын терәп тиерлек килтереп ҡуйғандар. Ишек алдына тиҫтәгә яҡын полиция хеҙмәткәрҙәре баҫҡан, ҡулдарында ҡорал да бар. "Тимәк, белеп ҡалғандар. Килештерәләр. Быларҙан тиген генә ҡотолоп булмаясаҡ..." Яңынан ишек төбөнә килде, тыңланып тора биргәс, һаҡ ҡына итеп өндәште:

- Кем йөрөй унда?

- Полиция! Ҡулыбыҙҙа прокурор ордеры ла бар. Хәҙер үк асығыҙ, юғиһә, емереп инәбеҙ!

Келәне ысҡындырҙы. Ҡапыл ишек асылып китте. Полиция хеҙмәткәрҙәре уны тупаҫ стена ҡырына этәреп, аяҡ-ҡулдарын тарбайтып ҡуйып, күнегелгән хәрәкәттәр менән тентегәндән һуң төпкә үттеләр. Медицина хеҙмәткәрҙәре лә бында икән. Эргәһенә баҫҡан йәш егет карауатҡа хужалай йәйелергә өлгөргән өлкәнгә доклад яһаны:

- Ҡорал-маҙары юҡ.

Ҡалған инеүселәр ҙә стена ҡырлатып баҫҡандар.

Өлкәне бүлмәләге берҙән-бер ултырғысҡа ымлап, ҡоро өндәште:

- Ултырығыҙ. Тынысланығыҙ. Көс ҡулланырға маташыу һеҙҙең файҙаға булмаясаҡ, шул хаҡта киҫәтәм. Исем-фамилияғыҙ?

- Ҡобағошев Мозафар Ғәли улы.

- Эш урынығыҙ?

- Бер ҡайҙа ла эшләмәйем. Пенсионер.

- Был баланы ҡайҙан алдығыҙ?

- Ҡыйлыҡтан таптым.

- Ҡайҙағы ҡыйлыҡтан?

- Ишек алдындағы.

- Тимәк, бесәй балаһы, йә эт көсөгө һымаҡ табып алғанһығыҙ. Ҡый һауытында ҡабырлыҡ аҙыҡ эҙләп соҡондоғоҙмо? Баланы табып алдым, имеш, ошо нигеҙһеҙ аҡланыуға кем дә булһа ышаныр тип өмөтләнәһегеҙме?

- Ә мин ышандырырға йыйынмайым да.

- Һеҙ үҙегеҙҙең енәйәт эшләгәнегеҙҙе беләһегеҙме?

- Ниндәй енәйәт?

- Кеше урлағанһығыҙ. Уның, бик беләһегеҙ килһә, статьяһы бик ҡаты, хатта кеше йәнен ҡыйырға тырышыуға яҡын.

- Мин кеше урламаным!

- Нимә эшләнегеҙ һуң?

- Уны бары үлемдән ҡотҡарҙым.

- Ниндәй үлемдән?

- Сүплектә ятһа, өшөнөп үлә ине бит. Әгәр мин уны алмаһам, ни булыр ине?

- Бер ни ҙә. Һеҙҙең уға ҡағылырға хаҡығыҙ юҡ ине. Был закон тарафынан ҡәтғи тыйыла.

- Кеше ҡотҡарыу, тимәк, законға ҡаршы сығыу була?

- Ҡабатлап әйтәм, һеҙ кешене ҡотҡармағанһығыҙ, ә кемдеңдер балаһын һорауһыҙ урлап алғанһығыҙ.

- Кемдең балаһын?

- Бына быныһын асыҡларбыҙ артабанғы тикшереү барышында.

- Әгәр мөмкин булһа, тауышығыҙҙы баҫыңҡырап һөйләгеҙ, бала йоҡлай, уянып илай башлауы бар.

- Ни тиклем мәрхәмәтле һеҙ, хатта илағы килеп китте. - Майор погонлы полицейский ирендәрен мыҫҡыллы салшайтты ла эргәһендәге аҡ халатлы иргә бойорҙо. - Баланы тикшерегеҙ хәҙер үк, һәм уның сәләмәтлеге хаҡында понятойҙар алдында протокол да төҙөгөҙ!

Тупаҫ ҡағылыуҙы тойған Танһыҡ уянып китеп илай башланы. Уны тынысландырырға теләп, баҫырға уҡталғайны, Мозафарҙы тупаҫ рәүештә ситкә эттеләр.

Ниһайәт,бүлмәләге тикшереү тамамланды. Фотоаппарат тотҡан полицийский бүлмә эсен, уны, биләүендә тырпырап ярһып илаған баланы ҡат-ҡат фотоға төшөрҙө.

Аяғөҫтө баҫҡан майор һуңғы ҡарарын сығарҙы:

- Үҙегеҙҙе күҙәтеү аҫтындамын тип хис итегеҙ. Ситкә сығып йөрөү ҡәтғи тыйыла, полицияға саҡырта ҡалһалар, бер минут та һуңламай барып етергә бурыслыһығыҙ, сәбәптәр табып тотҡарланыуығыҙ - яуаплылыҡтан ҡасыуға иҫәпләнә. Киттек!

Танһыҡ ярһып илауын дауам итте. Ул һуңғы мәлдә генә ҡулына эләккән танытманы алға һоноп, алға уҡталды:

- Баланың исеме Танһыҡ, фамилияһы Ҡобағошев. Ҡайҙа алып бараһығыҙ баламды? Миңә бит уны мәлендә ашатырға кәрәк! Ҡайҙа? - Танытма дерелдәгән ҡулынан төшөп китте, аҙаҡ ҡалып сыҡҡан полиция хеҙмәткәре уны бысраҡ итеге менән тапап уҙҙы...

...Бына нисәнсе көн инде бүлмәһенән сыҡмай түшәгендә аунай Мозафар. Торлағы ҡараңғыланып, ҡотһоҙланып ҡалған төҫлө. Нишләптер полицияға саҡырыусы булманы. Һалҡын камераға ябып ҡуйһалар, еңелерәк тә булыр ине, бәлки. Тегендә, моғайын да, бер үҙе булмаҫ ине, бындағы һымаҡ интекмәҫ тә ине...

Тәҙрә төбөндә онотолоп ятҡан телефоны шылтыраны. Бына ғәжәп, ошоғаса өнө сыҡмаған әйбер телгә килһен сәле! "Әһә, тимәк полициянан... Иҫтәренә төшөргәндәр тәки һуңғы сиктә... Телефон номерымды ҡайҙан таптылар икән? Улай тиһәң, былар бит ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишеткән полиция..." Аппаратты һаҡ ҡына ҡулына алды ла теләр-теләмәҫ йәшел төймәгә баҫты:

- Алё...

- Һаумыһығыҙ, Мозафар Ғәлиевич!

- Һаумы... Һеҙ кем әле, танып етмәйем...

- Кем булһын, Леонтьев, Валерий Леонтьев!

- Аңлашылды, полициянан. Минең эште һеҙгә тапшырҙылармы?

- Ниндәй эш тағы? Һеҙ ҡайҙа?

- Ҡайҙа булһын, бүлмәмдә ятам.

- Инеп сығырға мөмкинме?

- Полиция рөхсәт һорап мәшәҡәтләнмәй, шунда уҡ прокурор ордерын тотоп килә лә, ишекте асмаһаң, емереп килеп инә.

- Барын тиҫкәренән һапламағыҙ әле, Мозафар Ғәлиевич, хәҙер инәм, подъезығыҙ ауыҙында торам мин!

Бер аҙҙан ишек шаҡынылар:

- Инергә мөмкиндер, Мозафар Ғәлиевич?

Ауырлыҡ менән урынынан ҡалҡты ла ҡунағын ултырырға саҡырып, эйәге менән ултырғысҡа ымланы.

- Хәлдәрегеҙ нисек тип һорамайым, һүҙһеҙ ҙә билдәле. - Участковой өҫтәл өҫтөндәге икмәк валсыҡтарын бер ситкә этеп, ҡулындағы пакетын шунда ҡуйҙы, ашамлыҡтар, бер шешә коньяк сығарҙы.

- Бына заманалар китте, ә, участковой билдәле эскесенең өйөнә араҡы ташып һыйлай. Был күренеш тә бит законға ҡаршы!

- Әсе телләнмәгеҙ, Мозафар Ғәлиевич, һеҙ бит прокуратурала түгелһегеҙ. Беҙ ирҙәр, әйҙә, үҙебеҙсә генә ултырып алайыҡ әле. - Стакандарға эсемлек ҡойоп, береһен уның алдына шылдырҙы.

- Юҡ инде, Валерий Иванович, был нимәне башҡаса ауыҙыма ла алмаҫҡа булдым. Ни өсөн тиһеңме? Был донъяла Танһыҡ улымдың барлығын беләм, тимәк, йәшәү мәғәнәм дә бар. Бына табиптар, артыҡлап файҙа килтермәһә лә, эскеселәрҙе дарыуҙар, гипноз ярҙамында дауалап маташалар. Ә мин аяҡҡа баҫтырыуҙың иң ябай юлын беләм хәҙер, һәр йәш кешенең ҡулына бала тотторорға кәрәк. Бала икән ул тормоштоң, йәшәүҙең мәғәнәһе! Йәмғиәттә эскелек арта, ни өсөн тиһеңме? Балалар кәмегәндән кәмей, төп сәбәп шунда...

- Дөрөҫ әйтәһегеҙ, Мозафар Ғәлиевич... Нина менән беҙҙең дә тәмһеҙләшеүҙәр, урынһыҙ ғәйепләүҙәр ана шунан килә!

Бер килке һүҙһеҙ шымтайыштылар. Көттөрә биреп Валерий һүҙ башланы:

- Һинең участкаңда булған хәл тип, мине оҙаҡ йонсоттолар инде, әммә аныҡ ҡына бер ни ҙә асыҡлай алманылар.

- Уның нимәһен асыҡларға инде? Баланы сүплектән табып алып ҡайттым, бары шул ғына.

- Һеҙгә һуңғы сиктә "укрывательство" ярлығын тағырға маташтылар, уны ла прокурор кире ҡаҡты. Тағы мин һеҙҙең хаҡта матур ҡылыҡһырлама яҙып бирҙем, шуға ла һеҙгә оронманылар шикелле. Бер нисә көндән саҡыртып, аңлатма яҙҙырырҙар ул, шунһыҙ, бер ни ҙә килеп сыҡмай. Һуңғы сиктә эште ябырҙар.

- Танһыҡ ҡайҙа?

- Дауаханала. Барып, беләгенә таҡҡан пленка киҫәгенә Ҡобағошев Танһыҡ Мозафарович тип яҙҙырҙым. Күҙәтеүсе табип яҙҙы, башҡаса ни ҡылһын инде.

- Ары уны ни эшләтерҙәр икән?

- Бына быныһы мәсьәлә... Берәй ғаилә уллыҡҡа алғансы көтөрҙәр ... Мозафар Ғәлиевич, мин һиңә кәңәш менән килдем бит әле.

- Һөйлә, тыңлайым.

- Беҙҙең дә бала юҡ, уны яҡшы беләһең. Кисә Нина менән кәңәшләшкәндән һуң, шундай ҡарарға килдек, баланы үҙебеҙгә уллыҡҡа алһаҡ, һин нисек ҡарайһың?

- Нисек? Ул бит минең балам - Ҡобағошев Танһыҡ Мозафарович.

- Һеҙҙең бала икәнде беҙ танайбыҙ, уны кире лә ҡаҡмайбыҙ. Әгәр беҙ алмаһаҡ, уны берәйһе барыбер үҙенә алыр бит. Бәлки, ситтән килеп. Шуға былай итәйек, баланы беҙ үҙебеҙгә закон нигеҙендә яҙҙырабыҙ, ә бала һиндә ҡала. Ике арала нисек тә үҫер әле, уҡытырбыҙ ҙа, әҙәм дә итербеҙ. Аҡса йәһәтенән мохтажлыҡ кисермәҫһең! Тик бына эсеүең...

- Эсмәйем бынан бүтән, тинем бит бер тапҡыр, ауыҙыма ла алмайым. Бала хаҡына ант итәм!

- Тимәк һеҙ риза?

Бер һүҙ ҙә өндәшмәне Мозафар, бары аяғөҫтө турайып баҫты, күлдәген төҙәтте, салбарын һыпырғыланы. Күҙҙәренән һаран йәштәр һығылып сығып, шырт баҫҡан биттәре буйлап түбән тәгәрәне. Ошоға саҡлы ныҡлыҡ һаҡлаған, бер тапҡыр ҙа иламаған ир илай ине, шатлығынан илай ине!

**(Аҙағы. Башы 10-13-сө һандарҙа).**

*ДИАЛОГ*

# "АҒИҘЕЛ" ЖУРНАЛ ҒЫНА ТҮГЕЛ.

## Ул халыҡ күңеленең сағылышы.

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**Бөгөнгө "Ағиҙел" журналының уҡыусыһы ниндәйерәк ул? Ул башҡаларҙан ни яғы менән айырыла?**

**Салауат:** Был йәһәттән тәүге һорауға ҡабат әйләнеп ҡайтып, заманға бәйләргә тура килә. Аллаға шөкөр, интернет селтәрендә "Ағиҙел" журналының сайтына инеп, өр-яңы әҫәрҙәрҙе уҡыусы йәштәр бихисап. Шулай уҡ совет осоронда журнал тотоп уҡып өйрәнгән өлкән йәштәгеләр әле лә "Ағиҙел"дән айырылмай. Бер һүҙ менән әйткәндә, "Ағиҙел"де әҙәпле, әхлаҡлы, тәрбиәле, итәғәтле, изгелекле... кешеләр уҡый. Сөнки журналыбыҙ кешелектең ошо иң изге төшөнсәләренә хеҙмәт итеп, рухи донъябыҙҙы байыта.

**Әхмәр:** Халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләп йәшәгән кешеләр ул беҙҙең уҡыусы. Әгәр ҙә улай булмаһа, ул кеше милләтебеҙҙең берҙән-бер әҙәби журналына яҙылмаҫ ине. Журналды алдырмаусыларҙан ул ана шул яғы менән айырыла.

**Луиза:** Ул - телебеҙҙе, әҙәбиәтебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе хөрмәт иткән, тәрән аңлаған бик зауыҡлы кеше.

**Гөлнара:** "Ағиҙел" журналының уҡыусыһы ғәмле кешелер. Тик тиражды милләт һаны менән сағыштырғанда беҙҙең журналды башҡорттоң 0,1-0,2, күп тигәндә 0,5 проценты ғына уҡый булып сыға бит әле. Халыҡта ғәмлеләр һаны шулай уҡ әҙ булып сыға түгелме, был әҙәбиәтебеҙҙең генә түгел, халҡыбыҙ киләсәге өсөн дә шомлораҡ һан бит әле ул. Улай тиһәң, беҙҙең ҡулда әле бер журналды нисә кеше уҡый икәнлеге хаҡында мәғлүмәт юҡ, бер һанды бер нисә, кәм тигәндә биш кеше уҡыйҙыр, тигән өмөт бар шулай ҙа. Әле бына "Ағиҙел" иғлан иткән фотоконкурсҡа бик күп эштәр килде. Журналды тотоп, төрлө сүрәткә инеп, кәртешкәгә төшәләр, күберәк элекке йылдарҙағы журналдарҙы тотоп төшкән фотолар килә, яңылары менән төшкәндәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Тимәк, күпселек бәйге тураһында интернеттағы төркөмөбөҙҙән белеп ҡалып ҡатнашырға булған да, быйыл журналға яҙылмаһалар ҙа үҙҙәрен журналдың уҡыусылары тип иҫәпләйҙәр. Ҡыҙыҡ бит. "Ағиҙел"дең китап һымаҡ булыуын, һандарының мәғлүмәти яғынан иҫкермәүенә лә бер дәлил был, икенсе позитив яҡтан ҡараһаң.

**Мөнир:** Алда әйткәйнем инде, Толстой менән Чеховтың, Мостай менән Рәмиҙең, Әхмәр менән Салауаттың дуҫы тип, тағы шуны өҫтәй алам: Баймаҡ үҙәк китапханаһы (әйткәндәй, унең етәксеһе Зилә Вәкил ҡыҙы Мортазина ла, унда эшләүселәрҙең барыһы ла, ғөмүмән, бар китапханасылар ҙа беҙҙең тоғро дуҫтарыбыҙ, таянысыбыҙ) бинаһының тышына : "Киләсәктә телевизор ҡараусылар һәм компьютерҙа уйнаусылар менән китап уҡыусылар идара итәсәк" (яҡынса фекерен еткерҙем) тигән олоғара һиҫкәндергес яҙыу була торғайны. Бик аҡыллы һәм дөрөҫ фекер, минеңсә. Киләсәктә заман атын ауыҙлыҡлар кешеләр уҡый "Ағиҙел"де.

Сайтта үткәргән мониторинг шуны күрһәтә, күпселектә беҙҙе (бында ҡағыҙ баҫма ғына түгел, беҙгә ҡағылышлы сайт, социаль селтәрҙәр ҙә инә) 45-65 йәштәге ҡатындар уҡый, улар артынса 50 йәштән олораҡ ир-азаматтар йыш ҡулына ала беҙҙең баҫманы. Шуныһы ҡыуандыра: уҡыусыларыбыҙҙың 17-19 проценты - 15-35 йәштәге йәштәр.

**Иң һуңғы уҡыған китабығыҙ нимә тураһында, унан ниндәй фәһем алдығыҙ?**

**Салауат:** Иң һуңғыһы үҙебеҙ сығарған "Ағиҙел"дән 100 хикәйә" ике томлығы. Уларҙан алған фәһемде һүҙ менән әйтерлек, ҡәләм менән яҙырлыҡ түгел.

**Луиза:** Нисек кенә ваҡыт тығыҙ булмаһын, "Китап" нәшриәтендә сыҡҡан яңы китаптарҙы, ғәҙәтләнгәнсә, һатып алырға һәм уҡып сығырға тырышам. Һуңғы ваҡытта шағирәләр Тамара Ғәниеваның, Зөлфиә Ханнанованың, Ғәлиә Кәлимуллинаның, Лариса Абдуллинаның, Наилә Хәмбәлиеваның өр-яңы китаптарын уҡып сыҡтым. Бик көслө һүҙ оҫталары улар! Әле өҫтәлемдә Гөлнара Хәлфетдинова менән Рита Фәтҡуллинаның шиғри йыйынтығы, прозаиктар Спартак Ильясов, Миләүшә Ҡаһарманова, Рәсүл Байгилдин, Раят Вәлиев китаптары "сират" көтөп ята.

**Гөлнара:** Төп эш өҙлөкһөҙ әҙәби әҫәрҙәр уҡыу менән (мөхәррир күҙлегенән) бәйле булғас, ҡапылдан яуап биреүе лә ҡыйын. Эшкә ҡағылышы булмаған осраҡтарҙы иҫләгәндә, ҡағыҙ вариантта Шамил Аляутдиновтың китаптарын уҡыйым. Күберәк документаль кино ҡыҙыҡһындыра. Ә уҡыған китаптарым йә тыңлаған подкастар әҙәби түгел, тарих, психология һәм сәләмәтлеккә ҡағылышлы, әлеге ваҡыттағы күңел ихтыяжым шундай. Улар, билдәле, башҡортса түгел инде. Яндекс Дзенда башҡортса яҙыу мөмкинлеге булмауы насар тип уйлайым, ул "клиплы фекерләгән" кешеләр өсөн генә түгел, эш араһында тиҙ генә уҡып алырға теләүселәр өсөн яҡшы майҙансыҡ. Яндекс Дзен башҡортсаны ҡабул итһә, беҙҙең журналистар һәм яҙыусылар ҙа шул иҫәптән унда үҙҙәренә аудитория табып алырҙар ине ул. Шиғриәткә килгәндә, "Бәйләнештә" аша ҡәләмдәштәрҙең ижадын ентекле күҙәтеп барам тип әйтә алам.

**Әхмәр:** Иң һуңғы уҡыған китабым Африка яҙыусыһы Алекс Хейлиҙың "Тамырҙар" романы. Әҫәрҙә 1767 йылда Африканың Гамбия иленән Кунта Кинте атлы яугирҙы европалылар тотоп алып, Америкаға ҡоллоҡҡа оҙаталар. Ҡоллоҡтоң барлыҡ ғазаптарын татый Кунта, тыуған иленә әйләнеп ҡайта алмай. Уның ҡоллоҡтан азат ейәне меңәрләгән Африка ҡәбиләләре араһынан ҡартатаһының тыуған ерен, ырыуын эҙләй. Бик оҙаҡ ваҡыт үткәндән һуң ғына уға был урынды табырға туған телендәге бер генә һүҙ ярҙам итә. Роман буйынса фильм да төшөрөлгән. Тамырҙарыңдың, туған телеңдең ҡәҙерен белергә ярҙам итә роман.

**Мөнир:** "Воспоминания Об Анне Ахматовой". Ысын талант ирекле фекерләргә һәм мөмкин тиклем тормош ваҡлыҡтарынан, ғаләм бейеклектәренән дә юғары һәм азат, дөрөҫөрәге, бойондороҡһоҙ булырға тейеш, уйҙары, шөғөлө, ҡылығы, ҡылғандары... барыһы менән дә. "Женщины с таким свободолюбием и с таким громадным внутренним содержанием счастливы тогда, когда ни отчего, и тем более, ни от кого не зависят". Шуның менән ижадсы бәхетле лә һәм шәхси тормошта иҫ киткес бәхетһеҙ ҙә!

**Әмир ҒҮМӘРОВ әҙерләне.**

*ПРЕМЬЕРА*

# УЙҘАРҒА УЙЫЛЫР СПЕКТАКЛЬ



**Ошо көндәрҙә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры Башҡортостандың халыҡ шағиры, бөйөк һүҙ оҫтаһы Мостафа Сафа улының тағы бер бик тәрән фәлсәфәүи әҫәре буйынса яңы спектаклде сәхнәгә сығарҙы. "Ауыл адвокаттары" тигән повесть буйынса ҡуйылған "Силсәүит, Алдар һәм Адвокат" театрҙың күңелдәрҙе йылытыр, уйландырыр тамашалары рәтен тағы тулыландырҙы.**

Спектакль ауылдаштары араһында "Адвокат" ҡушаматы алған Ҡорбанғәлиҙе һуңғы юлға оҙатыу күренеше менән башланып китә: йәше лә, ҡарты ла йыйылған. Ә Ҡорбанғәли хәҙер улар араһында түгел, фани донъяны үҙенән алдараҡ ташлап киткән ғүмерлек дуҫтары - "Силсәүит" Кәшфулла һәм "Алдар" Нурислам эргәһендә. Һәм улар Адвокаттың ҡылған эштәре буйынса һорау ала башлай. Яйлап был өсәүгә тағылған ҡушаматтарҙың сере лә асыла, уларҙың үҙ-ара һәм ауылдаштары менән мөнәсәбәттәре, тормош һынауҙарын нисек кисереүҙәре, күңелдәрен йыуандырған да, йөрәктәрен өткән дә ваҡиғалар иҫтәренә төшә. Актерҙар һәм тамашасы үҙе өсөн "Был донъяның һынауҙарын мин лайыҡлы үттемме? Дөрөҫ йәшәнемме?" тигән мәңгелек һорауҙарға яуап эҙләй, фәлсәфәүи уйҙарға ла төшөп китә, сәхнәләге мәҙәк күренештәргә эйәреп, ихлас көлә лә.

М. Кәримдең бына шундай тәрән фәлсәфәүи повестарының береһен Милли йәштәр театры Владимир Жеребцов авторлығындағы пьесаға нигеҙләнеп сәхнәләштергән, ҡуйыусы режиссер - БР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Рөстәм Хәкимов. Күңелдәргә яҡын һәм шул уҡ ваҡытта ябай ауылса сәхнә биҙәлешен рәссам Искәндәр Бакиров, ә актерҙарҙың кейемдәрен Әлиә Байрамғолова, сәхнәләге яҡтылыҡ буйынса Светлана Насонова эшләгән. Һәр күренештә урынлы яңғыраған музыкаль биҙәлеш - композитор Вәсил Ғафаровтың ижад емеше. Спектаклдең тексын башҡорт теленә яраҡлаштырыу С. Юлаев исемендәге премия лауреаты, драматург Зөһрә Бураҡаева тарафынан атҡарылған. Ә инде төп ролдәрҙе Вадим Ҡылысов, Гилүс Минһажев һәм БР-ҙың атҡаҙанған артисы Рәмзил Сәлмәнов башҡара. Шулай уҡ БР-ҙың халыҡ артистары Мәғәфүр Усманов, Венер Камалов, Илсур Хәбиров, Рушанна Бабич, Гөлшат Ғайсина, БР-ҙың атҡаҙанған артистары Гөлбинә Сафуанова, Гөлсөм Бикбулатова, Илгиз Таһиров, Шәһит Хамматов һәм театр актерҙары Салауат Юлдашбаев, Ләйсән Миңлеғәлиева, Динислам Сафин, Әбйәлил Үтәбаев, Гөлсәсәк Зарипова уйнай. Улар һәр береһе үҙ урынында - оҫталыҡтарына һоҡланмай булмай.

"Силсәүит, Алдар һәм Адвокат" спектакле һәр быуын вәкиле күңеленә кешелеклелек, миһырбанлыҡ, тоғролоҡ, дуҫлыҡ орлоҡтары һала, яҡшынан яманды, дөрөҫтән ялғанды айыра белергә өйрәтә. Заман шауҡымында ни сәбәптәндер тоноҡлана барған күрше-күлән, ауылдаш, райондаш, ватандаштар тигән кешеләрҙе берләштерер көслө һәм мөһим төшөнсәләр барлығын хәтергә төшөрә. Быларҙы спектакль күрһәтелгән тәүге көндәрҙә килеп ҡараған һәр тамашасы асыҡ тойҙо һәм аңланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрының яңы спектакле, әлбиттә, яҙыусының әҫәрендә барған бөтә ваҡиғаларҙы, фекерҙәрҙе ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсенә һыйҙырып, үҙендә туплап бөтә алмаған. Әммә унда һәр кеше өсөн яҡын, мөһим һәм бөгөн дә көнүҙәк мәсьәләләр, аҡыл сағылдырылды. Һәр тамашасы үҙе өсөн кәрәкле хис-тойғоларҙы, уйҙарҙы кисерә алғандыр. Был инде "Силсәүит, Алдар һәм Адвокат" драмаһының сәхнә ғүмере оҙон булырына ныҡлы ышаныс тыуҙыра.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

✓ *Беҙ алманың төрлө сортын үҫтерәбеҙ. Иртә, уртаса һәм һуң өлгөргәнен. Шулай аралаштырып ултыртһаң, август айында алма ашай башлайбыҙ һәм октябргә тиклем үҙеңдең алмаң була.*

*ИНТЕРНЕТТАН*



## ҺАЛҠЫН ТЕЙҘЕРГӘНДӘ...

■ Һалҡын тейеп ауырығанда сирҙе антибиотиктар менән дауаларға тырышыуҙың файҙаһы юҡ, тип белдерә Италия ғалимдары. Неаполдең Үҙәк клиник госпитале докторы Франческо де Блазио етәкселегендә үткәрелгән тикшеренеүҙәр барышында һалҡын тейҙереү һөҙөмтәһендә киҫкен йүтәл менән яфаланыусы 305 баланы дауалауҙы күҙәткәндәр. Беренсе төркөмдә тик антибиотиктар менән генә дауалағандар, икенсеһендә балаларға комплекслы дауа тәҡдим ителгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге балаларҙың йүтәле тиҙерәк үткән. Ғалимдар әйтеүенсә, антибиотиктар йүтәлде дауаламай, ул уны тыуҙырыусы инфекцияларҙы ғына юҡҡа сығара. Шуға ла бала йүткерә икән, уға антибиотиктар бирергә ярамай. Был саҡта организм киреһенсә хәлһеҙләнә, организмда бактериялар күбәйә һәм ауырыу тағы киҫкенләшә төшә.

■ Ғалимдар, йөҙҙәрендә миңдәре булған кешеләр ҡартлыҡҡа бирешмәй, тип белдерә. Һуңғы мәғлүмәттәргә ярашлы, тәндәрендә 100-ҙән ашыу миңе булған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең һөйәктәре нығыраҡ була, тимәк, улар остеопороз сиренә бирешмәй. Бынан тыш, бындай кешеләрҙең йыйырсыҡтары аҙыраҡ була һәм шуға ла улар үҙ йәшенән уртаса 7 йәшкә йәшерәк күренә. Әлбиттә, миңле кешеләргә тире яман шеше лә янай, шуға ла уларға табиптар ҡояшта оҙаҡ ҡыҙынырға кәңәш итмәй. Әммә Лондон тикшеренеүселәре миңдәрҙең ыңғай яҡтары күберәк тип иҫәпләй. Ғалимдар хәҙер миңдәрҙең йөрәк һәм күҙҙәр сәләмәтлегенә йоғонтоһон тикшерә.

■ Business Line баҫмаһы яҙыуынса, телевизор кешенең биш йыл ғүмерен ала икән. Статистика һәм мәғлүмәт бюроһы килтергән мәғлүмәттәргә таянып үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙән һуң Австралия белгестәре ошондай һығымтаға килгән. Улар телевизорҙы һирәк йәки бөтөнләй ҡарамаусылар һәм телевизорһыҙ йәшәй алмаусыларҙың сәләмәтлеген сағыштырған. Асыҡланыуынса, 25 йәштән уҙған һәр кеше өсөн телевизор алдында үткәрелгән бер сәғәт ғүмерҙең 22 минутын юҡҡа сығара. Кеше көнөнә уртаса алты сәғәт телевизор ҡараһа, ул үҙенең ғүмерен 5 йылға ҡыҫҡарта, тигән һүҙ. Ғалимдар фекеренсә, даими рәүештә телепрограммалар ҡарау организмға тәмәке тартыу, пассив тормош рәүеше алып барыу, артыҡ ашау килтергән һөҙөмтәгә тиң. Әйткәндәй, яңыраҡ Гарвардта ошондай уҡ тикшеренеүҙәр үткәрелгән һәм унда ла ошондай уҡ һығымталар яһалған. Был телевизорҙан бөтөнләй баш тартырға кәрәк, тигәнде аңлатмай, ти табиптар, әммә сама белергә кәрәк.

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте шедеврҙары кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәрҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Ботичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемлеге кеше ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаш була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында дофамин гормоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Бындай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арынырға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

*БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ*

# АЛМА, ЙӨҘӨМ ҮҪТЕРӘМ...

**Алмағас - баҡсасыларҙың иң яратып үҫтергән ағасының береһелер, моғайын. Селекция менән шөғөлләнеүселәр ҙә был культураның әллә күпме яңы сортын сығарған, шуға ла бөгөн ул республиканың һәр төбәгендә үҫә. Башҡортостандың климаты һалҡын, вегетация осоро ҡыҫҡа һәм дымлы булған төньяҡ-көнсығыш яғында, Салауат районында йәшәүсе, Лағыр урта мәктәбенең биология һәм химия уҡытыусыһы Зәбир Рәүеф улы СИТДЫҠОВ та баҡсаһында алмағастың төрлөһөн үҫтерә. Уның менән баҡса үҫтереү серҙәре тураһында әңгәмәләшәбеҙ.**



**➔ Зәбир Рәүеф улы, баҡса яратыу башлыса һөнәрегеҙ менән бәйлелер?**

- Киреһенсә, атай менән әсәйҙән күреп үҫкәнгә, бәлки, биология йүнәлешендә һөнәр алғанмындыр ҙа. Әсәйем әле 1990 йылдарҙа уҡ почта аша йөҙөм (виноград) үҫентеһе яҙҙырып алып, шуны беҙҙең ҡаты тәбиғәт шарттарында ҡороторға бирмәй, үҫтереп алды. Йөҙөмдөң дә Кавказда ғына үҫкән, йылы яратҡан "Изабелла" сорты! Уның йөҙөмдө нисек тәрбиәләгәнен ҡарап, өйрәнеп йөрөнөм. Хәҙер әсәй менән атай юҡ инде, йөҙөмдәре һаман үҫә. Районда беренселәрҙән, бәлки, берҙән-берҙер, беҙҙең баҡсала булды йөҙөм ҡыуағы. Ҡатын менән һөйләштек тә, башҡа сорттарын да ултыртып ҡарарға булдыҡ. Бөрөгә махсус барып, питомниктан алып ҡайтҡан йөҙөмдән "Башкирский ранний" менән "Башкирский изумруд" яҡшы үҫеп китте.

Баҡсалағы һәр үҫемлеккә тәрбиә кәрәк, үҫмәй ул тиҙәр икән, тимәк, ҡарамайҙар. Йөҙөм дә шулай. Йәнйаҡҡа ялбырап үҫергә генә тора ул, ваҡытында ҡырҡып тороғоҙ. Ҡышҡылыҡҡа ҡырҡып, полиэтилен менән ябабыҙ, ямғыр яуып, еүешләп, туңып ҡуймаһын, серемәһен өсөн эшләйбеҙ быны. Полиэтиленды осормаһын өсөн бесән яба инем өҫтөнән, бер йылды сысҡандар эйәләп, йөҙөм ҡыуағын ашап бөтөрә яҙҙы. Шуға ла хәҙер ҡарағай, шыршы ботаҡтары менән ябам.

Өйрәнеп китһәң, ҡарауы артыҡ мәшәҡәт тә тойолмай. Һыуҙы самаһын белеп һибергә кәрәк, ашламаны ла артыҡ һалмаҫҡа, сөнки буйға үҫә, япраҡтары күбәйә, был иһә уңышҡа йоғонто яһай. Шулай ҙа көн ныҡ эҫе булһа, лейка менән ямғыр яуған һымаҡ итеп, өҫтән һыу һибәм йөҙөмгә, уларға шулай рәхәт һымаҡ, томра эҫенән һуң һыуынып, хәл инеп ҡала үҙҙәренә.

**➔ Баҡсаға ултыртыу өсөн алмағасты нисек һайларға?**

- Беҙ алманың төрлө сортын үҫтерәбеҙ. Баҡса эшендә рәт белгән кеше бер нисә сорт ултырта: иртә, уртаса һәм һуң өлгөргәнен. Шулай аралаштырып ултыртһаң, август айында алма ашай башлайбыҙ һәм октябргә тиклем үҙеңдең алмаң була. Һуң өлгөргәндәре өйҙә Яңы йыл байрамына тиклем һаҡлана. Баҡсаңда алмағас булып та, алма ашамайһың икән, уны ниңә үҫтерәһең һуң?

Сорттарына килгәндә, һәр кем үҙенең ниндәй алма яратыуына ҡарап һайлай. Шулай ҙа иң һәйбәте лә, иң билдәлеһе лә - "Башҡорт сибәре" ("Башкирская красавица"), республикала ғына түгел, ситтә лә күп таралған. Алмаһы матур ҙа, емешенең сифаты ла яҡшы, тәмле, йыл һайын уңа.

**➔ Алмағастың кәрлә сорттары менән дә таныштырһағыҙ ине? Республиканың бар төбәгендә лә үҫтермәйҙәр уны...**

- Баҡсасылар араһында ла "модалы" үҫентеләр бар инде. Бер мәл ошо кәрлә алмағастар ултырта башланылар бит. Һыуыҡҡа бирешеп бармай, уңышты оҙаҡ, йылдар буйына көтөргә кәрәкмәй. Минеңсә, уны тәрбиәләүе еңелерәк, бик бейек үҫмәгәс (бейеклеге 2 м тирәһе), ҡырҡыуға, ҡоротҡостарға ҡаршы ағыу менән эшкәртеүе лә уңайлы. Улар алманы ла күберәк бирә.

Бына яңы "мода" хәҙер, олонло (колоновидная) алмағас, грушалар барлыҡҡа килде. Уларҙың ғәҙәти алмағастыҡы кеүек ботаҡтары юҡ, бары тик бер олон ғына. Беҙ ҙә ултырттыҡ, бер төп 2 биҙрә алма бирә, тиҙәр.

Алмағастарҙы бер-береһенә яҡын ултыртырға ярамай, тамыры киң тарала, кәмендә 3-әр метр радиус булырға тейеш. Олонло алмағасты иһә ярты метр һайын ултыртырға була, урынды аҙ ала. Уларҙы Кушнаренко районындағы питомниктан барып алдыҡ. Ғөмүмән, нимә алһағыҙ ҙа, махсуслашҡан, үҙебеҙҙә урынлашҡан питомниктарҙан алығыҙ. Бөгөн ағастарҙың хаҡы осһоҙ түгел, кәмендә бер төбө 700 һум тора, зинһар, алданмағыҙ. Урамдан белмәгән кешенән алһағыҙ, йә өшөй, сөнки беҙҙең ерлеккә ярамай, йә емеше булмай.

**➔ Күптәр ағасты ултырта ла, оното. Йылы тура килеп, яуындар булһа, уңыш бирә, бирмәһә, бирмәй. Бындай баҡсасыларға ниндәй кәңәштәрегеҙ булыр?**

- Тәрбиә мотлаҡ кәрәк. Ағастарға дым мотлаҡ, уның үҙенең нормативы бар, эҙләп, таба алаһығыҙ. Мәҫәлән, дым етмәһә, емеше ҡойолоп бөтөүе бар, сөнки ағастың ҡороғоһо килмәй, ә һыу үҙенә лә етмәгәс, емешен ҡойоп, үҙен һаҡлап ҡала. Яҙғы ҡояштан һаҡлау өсөн олонон эзбиз менән барыһы ла аҡлай инде. Бына хәҙер баҡыр купоросы һибә торған ваҡыт, уны олонға һибәһең, бәшмәк сирҙәрен булдырмай. Көҙөн ағастың үҙегеҙ кәрәкмәй тип иҫәпләгән ботаҡтарын, әйтәйек, ҡояш яҡтылығын ышыҡлап, ел үткәрмәй торғандарын да киҫергә кәрәк. Улар ағастың көсөн ала.

Бөжәктәрҙән дә һаҡларға кәрәк. Кеблә (тля) ағастарға ныҡ зыян килтерә. Беләһегеҙ инде, уны ағасҡа ҡырмыҫҡалар ташый, сөнки улар симбиотик бәйләнештә, ҡырмыҫҡалар уларҙан бүленеп сыҡҡан шыйыҡса менән дә туҡлана. Шуға ла йәй буйына тиерлек һыйыр көткән һымаҡ көтөп, яңынан-яңы урынға күсереп йөрөтә. Йәй эҫе булған йылдарҙа айырыуса кеблә күп була. Уларға ҡуңыҙҙарға ҡаршы ҡулланылған универсаль ағыуҙар ҡулланам. Ҡырмыҫҡа менән көрәшеүе ауыр, борос, ҡайнар һыу, һеркә һибеп тә ҡарайым, шулай ҙа ныҡ үрсеп китергә ирек бирмәҫкә кәрәк.

**➔ Башҡа баҡсасыларҙы аптыратыр тағы бер шөғөлөгөҙ - таш баҡса ла булдырғанһығыҙ, быға нимә сәбәпсе булды?**

- Мин Көнсығыш көрәше менән дә шөғөлләнәм. Киноларҙа ла бындай Япон стилендәге баҡсаларҙы күргәнегеҙ барҙыр. Минең дә ошондай баҡса эшләү теләгем булды. Йылдар буйына төрлө таштар йыям, бонсай һымаҡ үҫкән ҡарағайҙарҙы тамыры менән ҡаҙып алып ҡайтып ултырттым. Баймаҡтан ташта үҫкән кейәү үләнен алып килдем. Йылдан-йыл ул шулай ҙурая, матурлана бара. Аңламаған кешеләр көлә лә ҡуя, әммә минең өсөн ул бер матурлыҡ мөйөшө, ошо уҡ стилдә беседка яһап ҡуйғанмын. Ауыл кешеһенең ваҡыты гел тығыҙ, шулай ҙа мунсаға барғанда, унан ҡайтҡанда һоҡланып үтеп китһәм дә, күңелем була. Ғөмүмән, баҡса бит ул күңел эше, унан кеше ял ала, тәбиғәткә яҡын булыу тынысландыра, матурлыҡты күрергә өйрәнә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Алма айырыуса тыуған йорт, бала саҡ менән бәйле емеш кеүек, алма тип әйткәндән генә лә алма еҫтәре аңҡып киткән кеүек булды. Баҡса ғына тиһәк тә, баҡса үҫтереүҙе лә бына ошондай фәлсәфә кимәленә күтәргән, ошо шөғөлдән матурлыҡ, йәм тапҡан геройҙар табылып тора гәзит уҡыусылар араһында. Бәлки, һеҙҙең дә башҡалар менән уртаҡлашыр тәжрибәгеҙ барҙыр, беҙгә хаттар яҙығыҙ, яңы темалар тәҡдим итегеҙ, дуҫтар! Күңелдәребеҙ ҙә, ишектәребеҙ ҙә һеҙҙең өсөн һәр ваҡыт асыҡ.**

**Ләйсән ВӘЛИЕВА**
**әңгәмәләште.**

✓ ***Аллаһ - программа инженеры. Ул Йыһандың бына тигән эшләүсе механизмын тыуҙырған. Һеҙҙе ике күҙәнәктең ҡушылыуынан шәхес тыуыуы, мейе эшмәкәрлеге кеүек иҫ киткес ғәмәлдәр тәртибе ғәжәпләндермәйме ни?***



*ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ*

# "БЕР КӨН УҠЫУ...

## 70 йыл ғибәҙәт ҡылыуҙан яҡшыраҡ"

**Дворян нәҫеленән булған Валерия Порохова Ҡөрьән-Кәримде 12 йыл тәржемә итә. Быға тиклем Ҡөрьәндең бер нисә тәржемәһе була, тәүгеһе Петр Беренсе заманынан уҡ билдәле. Ләкин улар сит ил тәржемәһенә ҡарап эшләнгән була. Ҡөрьәнде ғәрәп теленән тура тәржемәләүселәр - улар Саблуков, Крачковский һәм Порохова. Сығышы менән дворян ҡатыны Валерия Пороховаға үҙенең тәржемәһен ҡанунлаштырыуҙы 10 йыллап көтөргә, бик күп инстанциялар үтергә тура килә. Түбәндәге мәҡәләне интернетҡа һалған кеше шулай тип яҙған: "Мин был Валерия Порохова менән әңгәмәне 1998 йылдың 7 июнендә баҫылған ниндәйҙер бер гәзиттән киҫеп алып, хәҙерге көнгә тиклем һаҡлағанмын. Бында яҙылғандар хәҙер ҙә ҡыҙыҡлы тип уйланым". Беҙ ҙә шулай тип уйлап, уны уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итергә булдыҡ.**



➔ **Валерия Михайловна, һеҙ динле кешеме?**

- Эйе, мин Аллаһының барлығына һәм берлегенә бөтә йөрәгем менән инаныуҙамын. "Мин Аллаһтың берлегенә ышанам" тигән һөйләм ғәрәпсә нисек була, беләһегеҙме? "Мин - мосолман", тигәнде аңлата ул. Мосолман, тимәк, Аллаһҡа бирелгәнлек. Ошо мәғәнәлә мин мосолманмын.

➔ **Аллаһ әйткәндәрҙе беҙгә еткереүсе Мөхәммәт кем ул?**

- Мөхәммәт 570-се йылда ата-әсәһе юғары ҡатламдан булған ғаиләлә донъяға килә, ләкин бик иртә етем ҡала һәм уны ағаһы тәрбиәләп үҫтерә. 25 йәшендә ул үҙенән 15 йәшкә өлкән, бик сибәр һәм юғары кимәлдәге белеме менән билдәле ҡатын Мәккәгә өйләнә. Оҙаҡ йылдар бәхетле йәшәйҙәр, балалары була. Аҙаҡ ҡатыны вафат була.

➔ **Ни өсөн Аллаһ тап Мөхәммәт менән һөйләшә?**

- Ни өсөн Аллаһ теге йәки был кешене һайлай - был сер. Мөхәммәт яңғыҙ ҡалырға яратҡан, йыш ҡына гел бер үк тау янына барып, уйҙарға бирелер булған. Шулай бер саҡ ул: "Уҡы!" - тигән бойороҡ ишетә. Ул бик ҡурҡа һәм өйөнә йүгереп ҡайта, үҙе биҙгәк тотҡандағы кеүек ҡалтырана. Билдәле булыуынса, Мәккәлә йәшәүселәр телмәр оҫталыктары менән айырылып торған, ә Мөхәммәт уҡый белмәү генә түгел, ике һүҙҙе ҡушып аңлайышлы һөйләй ҙә алмаған. Шундай кеше ауыҙынан шул саҡ ғәҙәттән тыш матур телмәр ағыла башлай.

➔ **Һәм шундуҡ уны яҙып алыусылар пәйҙә буламы?**

- Мөхәммәт һөйләй ҙә һөйләй һәм шул ыңғайҙа бик күп кеше, шул иҫәптән белемле ҡатыны ла ул һөйләгәндәрҙе яҙып ала бара. Шуны әйтеп китеү кәрәк: башҡа бөтөн Изге Яҙмалар һуңынан ғына яҙып алына: Матфейҙан Инжил йөҙөнсө йыл - аңға һендерелеп, 70 йыллап ваҡыт үткәс, яҙыла! Ә Ҡөрьәндең яҙма варианты Мөхәммәт иҫән саҡта уҡ барлыҡҡа килә һәм уның вафаты осоронда төрлө кешеләр тарафынан яҙып алынған дүрт данаһы була.

➔ **Һеҙ Аллаһтың барлығына ышанаһығыҙмы?**

- Аллаһ - программа инженеры. Ул Йыһандың бына тигән эшләүсе механизмын тыуҙырған. Ике икең - дүрт икәнде кешеләр уйлап сығарған, сөнки уларға шулай оҡшай. Ә бына һеҙҙе ике күҙәнәктең ҡушылыуынан шәхес тыуыуы, мейе эшмәкәрлеге, телепатия, биополе кеүек иҫ киткес ғәмәлдәр тәртибе ғәжәпләндермәйме ни?

➔ **Һеҙ Дарвин тәғлимәтен инкар итәһегеҙме?**

- Тамырынан инҡар итәм. Инструкция буйынса компьютер өйрәнгәндә һеҙ уның инженерына төптә ят түгелһегеҙ, ә нишләп һеҙ тотош Йыһан киңлеген булдырыусы Инженерҙы ҡабул итә алмайһығыҙ? Тәүлегенә 24 сәғәт, йылда 12 ай, йыл миҙгелдәре, теп-теүәл ғәмәлдәр ҡылыусы планеталар системаһы! Бындай гигант механизмды фәҡәт гений Инженер ғына тыуҙыра алған.

➔ **Инжилдың Ҡөрьәндән төп айырмаһы ниҙә?**

- Изге китаптарҙа дөйөм кешелек ҡиммәттәре нисек бар, шулай бирелә, ләкин Ҡөрьән беҙҙе даими уҡырға саҡыра: бер көн уҡыу 70 йыл ғибәҙәт ҡылыуҙан яҡшыраҡ.

➔ **Ҡөрьәндә фәнни фараздар күпме?**

- Бик күп, һәм улар һәр йөҙ йыл һайын раҫланып тора. Ҡөрьән бөгөн раҫланыу табыусы мәғлүмәттәр бирә. "Ҡөрьәндә фәнни билдәләр" темаһына арналған конференцияла Америка ғалимы: "Әгәр Ҡөрьәнде 20 йыл элегерәк уҡыған булһам, Нобель премияһын әле түгел, ә шул ваҡыттарҙа уҡ алған булыр инем", - тине. Торонто университетынан Канада ғалимы Кейт Мур донъя медицина учреждениеларында файҙаланылыусы "Ислам ҡатышмалы кеше эмбриологияһы" тигән уҡыу әсбабы өсөн Нобель премияһы яуланы. Был ғалим раҫлауынса, Аллаһ VII быуатта уҡ әле, микроскоп та, ультратауыш та булмаған саҡта, кеше эмбриологияһы тураһындағы хәҡиҡәтте Сәғүд Ғәрәбстанындағы уҡый-яҙа белмәгән Мөхәммәткә һендерә. Ҡөрьәндә әйтелә: баланы өс ҡараңғылыҡта үҫтер. Өс ҡараңғылыҡ - ул өс ҡатлы аналыҡ. Быны шулай икәнлеге микроскоп менән рентген барлыҡҡа килгәс кенә, Ҡөрьән яҙылғандан һуң мең ярым йылдан һуң ғына асыҡланды. Ҡөрьәндә, яралғы ҡатышма тамсыһынан барлыҡҡа килә, тип әйтелә. Сперматозоидтың алты биҙ шыйыҡсаһынан хасил булыуы беҙҙең замандарҙа ғына мәғлүм булды. Ҡөрьәндә шулай уҡ яралғының иң тәүҙә һөлдә массаһы барлыҡҡа килә, шунан һуң ғына һум ите туҡымаһы менән ҡаплана, тиелә һәм был да заман ғалимдары тарафынан раҫлана. Юғиһә, элек был хаҡта, киреһенсә, тәүҙә - ит туҡымаһы, аҙаҡ һөлдә тип фаразлана. Туфан, Инжилда фаразланыуынса, бөтөн донъя күләмендә түгел, ә Ҡөрьәндә әйтелеүенсә, Арарат итәге биләмәһендә генә ҡалҡҡан һәм Нух халҡына һынау килтергән. Был да бөгөн иҫбат ителгән.

➔ **Ҡөрьән киләсәк хаҡында ниҙәр әйтә?**

- Яуап көнө етәсәк. Әйткәндәй, шуныһы ҡыҙыҡ: Аллаһы Тәғәлә тамуҡта яныусыларҙың тиреһен алыштырып тораса́ҡ, ти Ҡөрьән, ләкин бының ни өсөн икәнлеген бераү ҙә аңлай алмаған. Ә бит утты "ҡабул итеүсе" тире шул уҡ ваҡытта ауыртыуҙы "үткәреүсе" лә, ул янып бөтһә, тән яныуы һиҙелмәй башлаясаҡ, юғиһә...

➔ **Ҡөрьән нисә телгә тәржемә ителгән?**

- 102 телгә.

➔ **Ер йөҙөндә күпме мосолман йәшәй?**

- 1,6 млрд, ә Рәсәйҙә 26 млн.

➔ **Изге китапты тәржемә иткәндә гәҙәти булмаған нәмәләргә осраманығыҙмы?**

- Мин һис бер сәбәпһеҙҙән дә үҙемдә бәхетле тойҙом. Ниндәйҙер көйһөҙлөктәр килеп сыға икән, ул саҡта ла миңә барыбер рәхәт ине...

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

### Байығыуҙың өсөнсө ысулы: "Аҡсаны "эшләргә" мәжбүр ит"

Өсөнсө көндә лә Аркад үҙенең уҡыусылары менән байығыу ысулдары тураһында һөйләшеүҙе дауам итә:

- Шулай итеп, һеҙ үҙегеҙҙең барлыҡ килемдәрегеҙҙең ундан туғыҙ өлөшөн көшөлөккә һала бараһығыҙ һәм ул тула башлай, - ти ул. - Һеҙ үҙегеҙҙең арта барған ошо аҡсағыҙҙы һаҡлар өсөн барлыҡ сығымдарығыҙҙы контролдә тотаһығыҙ.

Ә хәҙер ошо аҡсаны нисек итеп "эшкә ҡушыу" һәм арттырыу тураһында уйлашайыҡ. Әлбиттә, көшөләктәге аҡса ниндәйҙер ҡәнәғәтләнеү килтерә һәм йәнде йылытып тора, ләкин улар әле бер ниндәй ҙә килем килтермәй.

Аҡсаны нисек итеп "эшләргә" мәжбүр итергә һуң? Минең тәүге инвестициялау тәжрибәм уңышлы булманы һәм мин барыһын да юғалттым. Уныһын һуңыраҡ һөйләрмен. Аггар исемле щиттар эшләү буйынса оҫтаға биргән ссудам тәүге табыш килтергән инвестициям булды. Аггар йыл да үҙенең оҫтаханаһында файҙаланыу өсөн диңгеҙ аръяғынан партиялап бронза һатып ала торғайны. Ҡайһы саҡта ул башҡаларҙан да аҡса алып тора. Ул намыҫлы кеше ине. Щиттарын һатыу менән бурысҡа алған аҡсаһын да ҡайтара, уға өҫтәп процентттар ҙа бирә. Йәғни уға бурысҡа аҡса биреп торған һайын мин уларҙы янынан проценттар менән ҡайтарып ала торғайным. Шуға ла минең капиталым ғына түгел, ул килтергән килемем дә арта барҙы.

Мин һеҙгә шуны әйтәм: байлыҡ - ул көшөләктәге аҡса түгел, ә ул килтергән, үҫкәндән-үҫә барған килем. Минең Аггарға биргән ссудаларым уңышлы инвестициялауҙың тәүге уңышлы тәжрибәһе булды. Белемемдә һәм тормош тәжрибәмдә арттыра барған һайын, минең ссудам һәм инвестициям да үҫте, улар менән бергә капиталым да арта барҙы. Шулай итеп, аҙ ғына килемдән башланған байлығым әллә күпме алтын тәңкәләр алып килде.

Аҡса күләме етерлек төшөм килтергәндә тиҙерәк арта. Бер фермерҙы миҫалға килтерәм. Тәүге улы тыуғас, ул бер ростовщикҡа ун көмөш тәңкә алып бара һәм улына егерме йәш тулғансы уларҙы күпмелер процент менән һаҡлауҙы үтенә. Ростовщик риза була һәм үҙ шартын әйтә, йәғни ул түләгән процент һәр дүрт йыл һайын был көмөш аҡсалар хаҡының дүрттән бер өлөшөн тәшкил итәсәк, ти. Улына егерме йәш тулғас, фермер тағы ла ростовщикҡа мөрәжәғәт итә һәм үҙенең көмөш тәңкәләренең яҙмышын һорай. Ростовщик уның ун көмөш тиненең 30-лап көмөш тингә артҡанын әйтә. Фермер бик ҡәнәғәт ҡала. Әлегә улына был аҡсалар кәрәк булмай, шуға ла ул был аҡсаларҙы тағы ла ростовщикта ҡалдыра. Улына 50 йәш булғанда ростовщик уға 167 көмөш тин түләй. Шулай итеп, 50 йыл инвестициялау ваҡытында фермерҙың аҡсаһы 17 тапҡырға арта.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**



### 17 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### РОССИЯ 1
5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 13.00.
14.00, 16.00, 20.00 Вести.
14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
17.30 "60 минут". [12+]
21.20, 22.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Территория женского счастья. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Святые из медблока". [16+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 "Бесприданница". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

### 18 АПРЕЛЯ ВТОРНИК
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 "Автограф". [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**2.45 Бай. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 19 АПРЕЛЯ СРЕДА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30, 17.45 История одного села. [12+]**
**10.45 Әлләсе... [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00, 2.45 "Автограф". [12+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 "Караул, тещу украли". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 20 АПРЕЛЯ ЧЕТВЕРГ
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.00 "45-й Московский Международный кинофестиваль. Торжественное открытие".
3.10 Х/ф "Отец". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Тамға". Финал II Международного конкурса мастеров башкирского национального костюма. [6+]**
**11.00 Международная образовательная акция "Международный диктант по башкирскому языку".**
**13.00 "Это мы". [6+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Формула меда. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 "Весело живем". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 21 АПРЕЛЯ ПЯТНИЦА
### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 О самом главном. [12+]
10.30, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.00 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
11.55, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Дорога к счастью". [12+]
23.25 Улыбка на ночь. [16+]
0.30 Х/ф "Перекаты судьбы". [16+]
3.45 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.34 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Праздник веры и добра!" [12+]**
**7.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45, 3.15 Надо знать. [12+]**
**8.00 Д/ф "Полюс времени". [6+]**
**9.00 "Ураза Байрам". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан".**
**10.00, 18.00 "Йома". [0+]**
**10.30 Д/ф "Талгат Таджутдин. Признание". [6+]**
**11.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**11.45 Спектакль "Провидец".**
**14.15 "100 имен Башкортостана". [6+]**
**14.45 Юбилейный концерт народного артиста РБ Ишмурата Ильбакова. [12+]**
**16.30 "Ураза Байрам". Повтор трансляции из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан".**
**17.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00, 3.30 Д/ф "Легенды об Акмулле". [12+]**
**19.45, 3.00 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**4.00 "Ете егет". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

### 22 АПРЕЛЯ СУББОТА
### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.40 Доктор Мясников. [12+]
12.45 Т/с "Девять жизней". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Старое пианино". [12+]
0.35 Х/ф "Боль чужой потери". [12+]
4.20 Х/ф "С чистого листа". [12+]

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Аль-Фатиха". [0+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 Лит-ра. [6+]**
**11.30 МузКәрәҙ. [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00, 4.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00, 2.15 Д/ф "Абсолютно от истины к вечности. Лира Якшибаева". [12+]**
**18.00, 4.30 "Хазина". [12+]**
**19.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.00 Спектакль "Провидец".**
**3.00 Х/ф "Ночь вдохновения". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [0+]**

### 23 АПРЕЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### РОССИЯ 1
6.05, 1.30 Х/ф "Примета на счастье". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.40 Большие перемены.
12.45 Т/с "Девять жизней". [16+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.27 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 2.30 Д/ф "Полюс времени". [12+]**
**17.15 "Буракаевские чтения". [12+]**
**18.15 "Бала-саға". [6+]**
**19.00, 3.30 Әлләсе... [6+]**
**19.45 Патриот РФ. [6+]**
**20.00, 1.30 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45, 2.00 Спортивная история. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 1.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 "Часы с кукушкой". [12+]**
**4.15 Финликбез. [6+]**
**4.30 Историческая среда. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры
**20 апрель Премьера! "Еҙнәкәй"** (Х. Ибраһимов), музыкаль комедия. 12+
**21 апрель "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 18.00 16+
**22 апрель "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры
**18 апрель "Ал яулыҡлы тирәккәйем"** (С. Айытматов), драма. 16+
**19 апрель "Аҡмулла"** (З. Бураҡаева), ҡисса. 6+
**20 апрель "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 11.00 0+
**"Йәшәгән, ти..."** (М. Ладо), драмеди. 16+
**21 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), тамаша. 12+
**22 апрель "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев), трагикомедия. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры
*Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:*
**21 апрель "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00 0+
**22 апрель "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 12.00, 14.00 0+
**23 апрель "Кошкин дом"** (С. Маршак). 12.00, 14.00 0+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры
**17, 18, 21 апрель Премьера! "Дөрөҫлөк беҙҙең яҡта..."** әҙәби-музыкаль лекторий. 13.30 6+
**19 апрель Премьера! "Футлярҙағы кеше. Мөхәббәт тураһында"** (А. Чехов), иллюстрациялы хикәйәләр. 13.30 12+
**20 апрель "Голубцы"** (А. Финк), комедия. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе
**19 апрель "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М. Ҡунафин), драма. 6+
**21 апрель "Нисек кейәүгә сығырға?!"** (Н. Ғәйетбай), комедия. 12+
**22 апрель "Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Салихов), комедия. 18.00 16+
**23 апрель "Пушистая история"** музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры
**18, 19, 20 апрель "Война"** (З. Усманова), пластик спектакль. 10.00, 12.00 12+
**17-21 апрель** *Баймаҡ районы буйлап гастролдәрҙә* **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 20.00 12+

### БР Милли музейы
**18 апрель "Археологик Өфө"** баш ҡаланың тарихи өлөшө буйлап сәйәхәт. 18.00 6+
**20 апрель "Яраткан край акварелдәрҙә"** рәссам Э. Ханнанов күргәҙмәһе асыла. 15.00 6+
Милли кейем көнөнә: **Уҡ атыу буйынса оҫталыҡ дәресе.** 12.00, 15.00 6+
**Этно-стилдә фотосессия.** 11.00, 12.00, 15.00, 16.00 6+
**"Сплету пояс - оберег"** оҫталыҡ дәресе. 14.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1444 һижри йыл.*

| Апрель (Рамаҙан - Шәүүәл) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 17 (26) дүшәмбе | 4:11 | 4:41 | 6:11 | 13:30 | 18:20 | 20:20 | 21:50 |
| 18 (27) шишәмбе | 4:09 | 4:39 | 6:09 | 13:30 | 18:21 | 20:22 | 21:52 |
| 19 (28) шаршамбы | 4:07 | 4:37 | 6:07 | 13:30 | 18:23 | 20:24 | 21:54 |
| 20 (29) кесе йома | 4:04 | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 18:24 | 20:26 | 21:56 |
| 21 (1) йома | - | 4:32 | 6:02 | 13:30 | 18:25 | 20:28 | 21:58 |
| 22 (2) шәмбе | - | 4:30 | 6:00 | 13:30 | 18:26 | 20:30 | 22:00 |
| 23 (3) йәкшәмбе | - | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 18:27 | 20:32 | 22:02 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Беренсе форумда ауылда эшләгән йәш уҡытыусыларға йыл һайын ярҙам күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул иткәйнек. Быйылдан был гранттарҙың һаны 25-тән 150-гә артты.*



ҠАНАТЛАН!

# ЗАМАН ҺЫНАУҘАРЫНА...

## ҡаршы торорлоҡ булайыҡ!



**Өфөлә бишенсе тапҡыр "Ҡанатлан!" мәктәп мәғарифы форумы педагогтарҙы йыйҙы. Төбәк мәғариф системаһы үҫеше мәсьәләләрен уртаға һалып һөйләшеү урынына әүерелгән был сарала быға тиклем дә мөһим ҡарарҙар ҡабул ителгәйне, мәҫәлән, биш көнлөк уҡыу режимына күсеү, йәш уҡытыусыларға гранттар, полилингваль белем биреү системаһын үҫтереү кеүек бөгөн уңышлы эшләп килгән проекттар шулар рәтенән. Быйыл да ул мәғариф системаһына яңы һулыш өрҙө.**

***Мәктәпкәсә белемгә иғтибар.*** Быйыл беренсе тапҡыр мәктәпкәсә белем биреү системаһында эшләүселәр өсөн айырым майҙансыҡ булдырылғайны. Әлеге ваҡытта балалар баҡсаларында 220 мең бала тәрбиәләнә, уларҙың 38 меңе - 2 айҙан 3 йәшкә тиклемге сабыйҙар. 2019 йылда ғына төбәктә 48 яңы балалар баҡсаһы асылған. Бөтәһе республикала 19,5 мең педагог эшләй. Уларҙың эшен баһалау өсөн 2023 йылдың мартында "Мәктәпкәсә белем биреү ойошмаһының йыл тәрбиәсеһе" тигән һөнәри конкурс еңеүселәре һәм лауреаттары өсөн БР Башлығы премияһы булдырылды. Радий Хәбиров был сарала быйылдан балалар баҡсалары педагогтары өсөн йыл һайын 500-әр һумлыҡ 50 грант бүленәсәген дә белдерҙе. Форумда шулай уҡ балалар баҡсалары тәрбиәселәре форумын уҙғарыу тураһында ҡарар ҙа ҡабул ителде.

***Педагогтарға ярҙам.*** "Беҙ уҡытыусы һөнәренең абруйын арттырыу өсөн күп эшләйбеҙ, - тине Радий Фәрит улы форумдағы сығышында. - Беренсе форумда ауылда эшләгән йәш уҡытыусыларға йыл һайын ярҙам күрһәтеү тураһында ҡарар ҡабул иткәйнек. Быйылдан был гранттарҙың һаны 25-тән 150-гә артты. Дәүләт һәм туған телдәр уҡытыусылары өсөн премиялар иҫәбе лә 2 тапҡырға артты". 2023 йылда ауыл уҡытыусыларына ярҙам күрһәтеү өсөн 103,5 млн һум йүнәлтеләсәк. Бер уҡытыусыға дәүләт ярҙамы күләме - 690 мең һум. Халҡы 15 меңдән артмаған ауылдарҙа 2 йыл эшләгән 35 йәшкә тиклемге йәш педагогтарҙың барыһы ла был грантҡа дәғүә итә ала. БР Башлығы гранты конкурсында еңеүселәр иһә төп эш урынында - Башҡортостандың бер үк районында 10 йылдан кәм эшләмәҫкә тейеш.

***Сәләмәтлеккә юл.*** Башҡортостан Башлығы уҡыусылар һәм педагогтарҙың сәләмәтлеге мәсьәләһен дә һыҙыҡ өҫтөнә алды. Беренсе форумда уҡ мәктәптәрҙә стоматология кабинеттарын тергеҙеү тураһында һүҙ булғайны. Бөгөн лицензияһы булған 214 кабинет эшләп килә, уларҙың 80-е - "Ҡанатлан!" проектының "Сәләмәт йылмайыу" модуле проекты сиктәрендә асылған. Былтыр был маҡсатта республика бюджетынан - 14,4 млн, быйыл 36,1 млн һум бүленгән. Республика Башлығы шулай уҡ уҡытыусылар өсөн диспансеризация ойоштороуҙы, уҡыусылар өсөн офтальмологик ярҙам системаһын үҫтереү мәсьәләләрен өйрәнергә ҡушты.

***Матди йыһазландырыу һәм капиталь ремонт.*** Быйыл мәктәптәрҙе яңыртып төҙөү дауам итәсәк. Президент программаһы сиктәрендә былтыр 63 мәктәптә капиталь ремонт үткән. 2023 йылда 77 мәктәп бинаһын яңыртыу көтә. "Ошо маҡсатта ике йыл дауамында 7,8 млрд һум бүленгән, был беҙҙең өсөн ҙур ярҙам", - тине Радий Фәрит улы.

Форум барышында мәктәп автобустары асҡыстары ла тапшырылды. Республика федераль программа сиктәрендә өҫтәмә рәүештә 45 автобусҡа эйә булды. Бынан тыш, Башҡортостан үҙе лә йыл һайын яңы автобустар һатып ала, мәҫәлән, 5 йыл эсендә төбәк иҫәбенә 401 мәктәп автобуслы булған.

***Патриотик тәрбиә.*** Башҡортостан Башлығы педагогтар менән аралашҡанда уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү мәсьәләһенә лә ҡағылды. Быйылғы уҡыу йылынан республиканың бар мәктәптәрендә лә яңы вазифа - директорҙың тәрбиә буйынса кәңәшсеһе барлыҡҡа килгәйне. Радий Хәбиров улар өсөн "Патриот" паркы базаһында квалификация күтәреү курстары үткәрергә ҡушты. "Беҙгә хәҙер балаларҙы кире мәғлүмәт йоғонтоһонан һаҡлау механизмдарын уйларға кәрәк, - тине Радий Фәрит улы. - Ғаиләләр үҙҙәре генә был бурыстарҙы атҡара алмай. Шуға ла был йәһәттән көс педагогтар иңенә төшә".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙ сығышында Республика Башлығы йәш быуынға белем биреү һәм тәрбиәләүгә ҙур өлөш индергән өсөн бөтөн уҡытыусыларға рәхмәт һүҙҙәрен еткерҙе. "Беҙ бергәләп етди глобаль дәғүәләргә ҡаршы тора аласаҡбыҙ. Һеҙҙең кисәге уҡыусыларығыҙ бөгөн илде һаҡлай, - тине Радий Хәбиров. - Республика иһә һеҙ яҡшы эшләһен өсөн шарттар тыуҙырыуҙы дауам итәсәк".**

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

**Ошо көндәрҙә Башҡортостанда уҡыусы балаларҙы үҙҙәре белем алған мәктәп тормошона әүҙем йәлеп итеү маҡсатында ойошторолған "Мәктәптәрҙе инициатив бюджетлау"ға старт бирелде. Был сараның маҡсаты - уҡыусыларҙың гражданлыҡ ҡарашын формалаштырыу, уларҙы үҙаллы һайларға, ҡарарҙар ҡабул итергә, яуаплылыҡҡа, тирә-яҡ мөхитте төҙөкләндереү буйынса мәсьәләләрҙе педагогтар менән берлектә хәл итергә өйрәтеп үҫтереү. Балаларға үҙҙәре уҡыған белем усағында уңайлы шарттар булдырыу, заманса йыһазландырыу, үҙҙәре өсөн мөһим проекттарҙы тормошҡа ашырыу мөмкинлеге биргән был эшкә республикабыҙҙың бик күп район-ҡалаларынан әүҙем ҡушылдылар. Ә беҙ иһә, редакциябыҙға килгән хәбәр-хаттар аша Әбйәлил районы мәктәптәрендә уҡыусыларҙың башланғысын көткән эштәр менән ҡыҫҡаса ғына танышып үтәйек.**

# БАЛАЛАРҘЫҢ ИЗГЕ ТЕЛӘГЕ




• 2023 йылдың 17 апреленән 16 майға тиклем муниципаль белем биреү ойошмалары уҡыусылары инициативаһы нигеҙендә төҙөлгән проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса БР бюджетынан субсидия юллау өсөн һайлап алыу конкурсына райондың **Яңы Балапан** урта мәктәбе уҡыусылары, уҡытыусылар, ата-әсәләр ҙә ҡушылды. Тиҙ арала төҙөлгән инициатив төркөмдәр 5 проектта туҡталған: Д.Р. Ғибәҙәтова етәкселегендә "Тантаналы саралар үткәреү өсөн мәктәп алды майҙансығы", Г.М. Зәйтүнова етәкселегендә "Мәктәп метеостанцияһы", Г.Ф. Дауытова етәкселегендә "Заманса уҡыу кабинеты", Э.З. Һөйөндөкова етәкселегендә "Мәктәптә тренажер залы" һәм Д.Б. Ҡорманаева етәкселегендә "Мобиль отряд "Хәүефһеҙлек мәктәбе". Тауыш биреү һөҙөмтәһендә бер генә проект һайлап алыныуын белгән уҡыусылар бик актив эшләгән, һәр яҡлап та үҙ тәҡдимдәре әһәмиәтле булыуын иҫбат итергә тырышҡан. "Һөҙөмтәлә Д.Р. Ғибәҙәтова етәкселегендәге "Тантаналы саралар үткәреү өсөн мәктәп алды майҙансығы" проекты иң ҡулайлыһы тип табылған. Сөнки бөгөн мәктәптә спорт залы, актовый зал булмауы педагогтарға ла, уҡыусыларға ла ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра, улар бөтә сараларҙы тығыҙ коридорҙа үткәрергә мәжбүр. Шуға күрә, саф һауала, уңайлыҡтар булдырылған майҙансыҡта төрлө тантаналы саралар, иртәнге физик күнекмәләр, дәүләт флагын күтәреү һәм төшөрөү кеүек мөмкинлектәр биргән проект һәр баланың күңеленә хуш килгән. Уның тормошҡа ашыуын Әбйәлил районы Яңы Балапан урта мәктәбе уҡыусылары өмөтләнеп көтә", - тип хәбәр иттеләр белем усағынан.

• **Сиҙәм урта мәктәбе** уҡыусылары ла инициативалы тиҫтерҙәренән ҡалышмай. Улар башҡарған проект эштәре араһында заманса уҡыу кабинеты, интерактив мәктәп музейы, тамашасылар һәм спорт залдары, интерактив технологияларҙы үҙ эсенә алғандары күпселекте тәшкил иткән. "Фекерҙәр тыңланғандан һуң, һәр бер эш уңышлы тип табылыуына ҡарамаҫтан, интерактив технология проекты тауыш биреүҙәр буйынса еңеп сыҡты. Был аңлашыла: беҙ компьютер технологиялары киң үҫешкән заманда йәшәйбеҙ. Дәрестәрҙә интерактив таҡталар ҡулланыу ҙа әйтеп үтелгән миҫалдарҙың береһе генә. Уны файҙаланыу даирәһе һәм эш алымдарының төрлөлөгө уҡыусыға яңы идеяларҙы тиҙ һәм еңел үҙләштерергә булышлыҡ итә. Мәктәптә ойошторолған сара ла был йәһәттән үҙ маҡсатына өлгәште тип әйтергә мөмкин", - тиҙәр Сиҙәм урта мәктәбе педагогтары.

• Ә бына **Хәлил урта мәктәбе** уҡыусылары башланғыс класс уҡыусыларына юл ҡағиҙәләрен өйрәтеү өсөн "Смешарики", ял итеү зонаһы булдырыу тураһында "Релакс", ҡышҡы уйындар өсөн төҙөлгән хоккей майҙансығын йәйге осорға үҙгәртеп ҡороу ниәтен яҡлап сыҡҡан "Сәләмәтлек", мәктәп яңы участкаһында урынлашҡан "Орхидея" йәшеллек класы һәм оҫтахана бүлмәһен ҙур залға әйләндереүгә йүнәлтелгән "Хыял" проект эштәрен яҡлаған. Биш төркөм араһынан "Хыял " проекты еңеүсе тип табылған. Был хаҡта Хәлил урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Лилиә Вәлиева хәбәр итте һәм уҡыусыларға башлаған эштәрендә уңыштар, ныҡышмаллыҡ һәм киләсәктә лә ижади еңеүҙәр теләне.

• "Халҡыбыҙ "Ятып ҡалғансы - атып ҡал", ти. Ә инде сәпкә тейҙерә атыуҙа, мәргәнлектә беҙҙең халыҡҡа етеүселәр, тиңдәр юҡтыр. Шуға күрә беҙ, Әбйәлил районының **Красная Башкирия урта мәктәбе** уҡыусылары, "Мәктәптәрҙең инициативаларын бюджетлау" проектында ҡатнашырға булдыҡ һәм еңеп сығырыбыҙға ҙур өмөт бағлайбыҙ. Республика конкурсы һөҙөмтәһе буйынса еңеүселәр өлөшөнә төшәсәк дәүләт ярҙамын үҙебеҙ уҡыған белем усағында спортты үҫтереүгә йүнәлтергә теләйбеҙ", - тип башлана киләһе хат, уны беҙгә Красная Башкирия урта мәктәбенең 9-сы класс уҡыусыһы Әлиә Ғибәҙәтова яҙған. Мәктәптең юғары класс уҡыусылары советының инициатив төркөмдәре белем усағы өсөн көнүҙәк һәм бик әһәмиәтле биш проектты үҙҙәренең көндәлек ихтыяжынан сығып билдәләгән. "Бик эшлекле шарттарҙа үткән сарала 176 уҡыусы тауыш биреүҙә ҡатнашып, күпселек - 144 кеше "Спорт менән бер ҡатарҙан" проекты өсөн ҡул күтәрҙе. Ә хәҙер инде беҙҙе республика конкурсы көтә. Унда һынатмаҫ өсөн әҙерлек алып барабыҙ", - ти Әлиә Ғибәҙәтова.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙҙең балалар һис кенә лә битараф түгел, уларҙың эргә-тирәһендәгеләрҙе яҡшыртырға, матурларға, үҙгәртергә теләктәре бар. Тик форсат бирергә һәм изге ниәттәрен күтәрмәләргә, ижади фекерләргә һәм хыялдарын тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлектәр асырға кәрәк. "Мәктәптәрҙе инициатив бюджетлау" нәҡ шундай эштәрҙең береһе булып сыҡты һәм ул республикабыҙҙың белем усаҡтарында ла үткәрелеүе, ауыл мәктәптәре уҡыусылары ла ихлас ҡатнашыуы хуплауға ғына лайыҡ. Бөгөн беҙ Әбйәлил районы мәктәптәрендә туған мәктәп, тыуған ер һәм Ватан өсөн йән атып, тиҫтерҙәренең мәнфәғәтен яҡлаған йәш быуын тәрбиәләнеүен белдек. Уҡыусыларҙың башланғыстарын хуплау - киләсәгебеҙ өмөтлө ҡулдарҙа булыуын сағылдырған эш.**

*Ғәҙәттәрҙең үҙ энергияһы бар, шуға ла улар һәр саҡ дауамлы була. Улар энергияны һинән ала, һин элек тә, хәҙер ҙә улар менән хеҙмәттәшлек итәһең. Тора-бара ғәҙәттәрең һинең хужаға, ә һин уларҙың хеҙмәтсеһенә әйләнәһең.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МОҢЛОЛАРҘЫ ЙЫЙҘЫ ТОРАТАУ

**Былтыр көҙөн генә Ишембай ҡалаһында шаулап-гөрләп "Торатау мираҫы" асыҡ төбәк-ара фольклор фестивале уҙғайны. Был юлы Торатау үҙ биләмәһенә моңлоларҙы йыйҙы: 8 апрелдә "Торатау моңо" башҡорт хор коллективтары һәм вокал ансамблдәренең IV Асыҡ республика фестиваль-конкурсында ҡатнашыусыларҙы сәләмләне Ишембай ҡалаһы.**





Конкурсты үткәреү төбәге итеп Ишембай ере осраҡлы һайланмаған, әлбиттә. Үҙенсәлекле сараның инициаторы - Ишембай районының Почетлы гражданы, республикала билдәле хормейстер, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры, Рәсәй Федерацияһының мәҙәниәт илсеһе Мәрйәм Ғәзизрахман ҡыҙы Солтанова. Ошо көндәрҙә оло юбилейын - 85 йәшен билдәләүсе мәҙәниәт илсеһе тыуған ауылы Маҡарҙа йәшәй, унда Ишембай сәнғәт мәктәбенең филиалын асып ебәреп, бына 25 йыл инде ауылдаштарын, райондаштарын моң менән һуғара.

Конкурсҡа республикабыҙҙың Дәүләкән, Миәкә, Архангел, Ишембай, Благовар, Федоровка, Балаҡатай, Туймазы, Илеш, Бәләбәй, Көйөргәҙе райондарынан, Өфө, Стәрлетамаҡ, Сибай, Учалы, Мәләүез, Күмертау ҡалаларынан 500-гә яҡын ҡатнашыусы йыйылған. Барлығы 32 төркөм, шуларҙың һигеҙе - хор коллективтары. Конкурс шарттары буйынса, коллективтар ике йыр башҡарырға тейеш: береһе - башҡорт халыҡ йыры, икенсеһе - башҡорт композиторы ижад иткән йыр, йырҙарҙың береһе мотлаҡ рәүештә музыкаль инструменттар оҙатыуынан тыш башҡарылырға тейешлеге лә - конкурстың төп талаптарының береһе.

Быйылғы фестиваль-конкурс Башҡортостан Республикаһы буйынса бренд сараларын субсидиялау сиктәрендә уҙғарылыуы менән дә әһәмиәтле. Конкурстың ни тиклем мәртәбәле икәнлеген күҙ алдына килтереү өсөн жюри составына күҙ һалыу ҙа етә: Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты проректоры, Таһир Сәйфуллин исемендәге Башҡортостан дәүләт академия хор капеллаһы дирижеры һәм художество етәксеһе, Ш.Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Алһыу Хәсбиуллина; Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының музыкаль етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы, композитор, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Нур Дауытов; Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы доценты Светлана Слагузова һәм, әлбиттә, Мәрйәм Солтанова. Фестивалдең координаторы - Республика халыҡ ижады үҙәгенең баш белгесе Наталья Кондакова

Мәҙәниәт министры урынбаҫары, "Торатау моңо" фестиваленең тәүге ойоштороусыһы Илнур Илдар улы Мөхйәнов конкурста ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, фестивалдең йылдан-йыл баһаһы артыуын, географияһы киңәйеүен билдәләне. Нур Дауытов сараның башҡорт хор сәнғәтен үҫтереүҙәге әһәмиәтен, конкурстың кимәлен, айырыуса хор коллективтарының башҡарыу оҫталығын бик юғары баһаланы, былдай сараларҙың композиторҙарға хор өсөн яңы әҫәрҙәр яҙырға һорау тыуҙырыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Конкурс даими сараға әйләнә икән, тимәк, башҡорт хорҙары өсөн репертуарҙың киңәйеүе талап ителәсәк.

Башҡорт хор коллективтары һәм вокал ансамблдәренең традицияларын һаҡлау, үҫтереү һәм таратыу, уларҙың репертуарҙарын байытыу, үҙешмәкәр хор коллективтары өсөн бер-береһе менән ижади аралашыу өсөн мөмкинлек тыуҙырыу, талантлы коллективтарҙы асыҡлау маҡсаты менән ойошторолған фестиваль-конкурс үҙен тулыһынса аҡланы. Жюри ағзаларына урындар билдәләү, ысынлап та, еңелдән булманы. Конкурс шарттарына ярашлы, йәш үҙенсәлектәрен дә иҫәпкә алып, "Хор коллективтары", "Вокал ансамблдәр", "Профессиональ хор коллективтары һәм вокал ансамблдәре" номинациялары буйынса 1-се, 2-се, 3-сө дәрәжәләге дипломанттар һәм лауреаттар билдәләнде. Гран-Приҙы Бәләбәй ҡалаһының "Ләйсән" башҡорт йыры халыҡ ансамбле яуланы (етәксеһе Нәзирә Фәрхетдинова).

Конкурс-фестиваль, ғәҙәттәгесә, еңеүселәрҙең Гала-концерты менән тамамланды. Еңеүселәр Мәҙәниәт министрлығының Почет грамоталары, ҡиммәтле бүләктәр, аҡсалата премиялар алып ҡыуанды. Гала-концерттың финалында Ишембай районы йыйылма хоры башҡарыуында яңғыраған "Тыныслыҡ" йырына тотош зал баҫып ҡул сапты: йыр-моңдарыбыҙ аша күңелебеҙгә һеңгән илһөйәрлек сағылышы ла булды "Торатау моңо".

Юғары кимәлдә ойошторлған сара өсөн Мәҙәниәт министрлығына, Республика халыҡ ижады үҙәгенә, Ишембай районы хакимиәтенә, бигерәк тә мәҙәниәт бүлеге белгестәренә рәхмәт әйтеү генә аҙҙыр. Ишембай Моң Мәккәһенә әйләнде ул көндө. Иң тетрәндергәне - Ҡала мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда фестивалдең барлыҡ ҡатнашыусыларының, шул иҫәптән Ишембай ҡалаһындағы Волга буйы федераль округының Рәсәй Геройы А.В.Доставалов исемендәге Башҡорт кадет корпусының тик егеттәрҙән генә торған башҡорт хорының барыбыҙға ла яҡшы таныш "Шайморатов генерал" йырын башҡарыуы булғандыр. Ҡатнашыусыларға ҡушылып, тотош майҙан йырлағандай тойолдо! Тәндәр семберҙәне, күҙҙәргә йәш төйөлдө! Тамашасыларҙы ниндәй тойғолар солғап алғанын яҙырға һүҙҙәр етмәҫ кеүек: был тамашаны үҙ күҙҙәрең менән күрергә кәрәк. Шуныһы хаҡ: "Торатау моңо" башҡорт хор коллективтары һәм вокал ансамблдәренең фестиваль-конкурсы - Ишембай районының йөҙөн билдәләүсе төп сараларҙың береһе икәнен тағы бер тапҡыр раҫланы.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДОНЪЯ - ЙОҘАҠ, асҡысы - белем

Башың диуанаға ҡалһа, бағанаға сәләм бирерһең.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Һин ғәҙәттәрең менән йәшәйһең, дөрөҫөрәге, ғәҙәттәр һинең менән йәшәй. Ғәҙәттәрҙең үҙ энергияһы бар, шуға ла улар һәр саҡ дауамлы була. Әлбиттә, улар энергияны һинән ала, һин элек тә, хәҙер ҙә улар менән хеҙмәттәшлек итәһең. Тора-бара ғәҙәттәрең һинең хужаға, ә һин уларҙың хеҙмәтсеһенә, бары тик ҡолғаһенә әйләнәһең. Ғәҙәттәрең һиңә бойороҡ бирә, һин уларҙы һис һүҙһеҙ тормошҡа ашыраһың...**

**...Әхмәт исемле ишан сираттағы тапҡыр хаж сәфәренә йыйына башлаған. Уға башҡа дин әһелдәре лә ҡушылған. Был юлы ишан һәм уға эйәргән дин әһелдәре хаж сәфәрендә бер йыл булырға ниәтләй. Юлға сығыр алдынан ишанға был тирәлә даны таралған бур килә. "Мин бур һәм һинең эргәңдә булырға лайыҡлы түгел икәнемде беләм. Ләкин һин миңә өмөт бир һәм үҙең менән бергә хаж сәфәренә ал, зинһар..." - ти. "Был минең өсөн бик ауыр ҡарар, - ти ишан. - Беҙ был юлы хаж сәфәрендә бер йыл булабыҙ, һин шул осорҙа түҙмәҫһең, тағы урлаша башларһың. Шуға ла был уйыңды башыңдан сығарып ташлау хәйерлерәк булыр..." Әммә бур ныҡышыуын белә: "Ошо бер йыл эсендә мин бер нәмә лә урламаясаҡмын, һүҙ бирәм..." Ишан ризалаша. Урынға барып, бер аҙна үткәс, ишан менән бергә килгән төркөм эсендә аңлашылмаған хәлдәр башлана. Хаж ҡылыусыларҙың сумаҙанынан берәм-берәм әйберҙәр юғала. Ләкин бер нисә көндән юғалған әйберҙе икенсе кешенең сумаҙанынан табалар. Ә ул кеше был әйберҙең үҙ сумаҙанына нисек килеп эләгеүе тураһында бер ни ҙә белмәй. Ишан был хәлдең кем тарафынан ойошторолоуын аңлай һәм бер төндө йоҡламайынса күҙәтергә була. Төн уртаһында улар йоҡлаған бүлмәгә баяғы бур килә һәм бер кешенең сумаҙанынан әйбер алып, уны икенсе кешенең сумаҙанына һала. Ишан: "Ни эшләйһең һин? Һин бит вәғәҙә бирҙең!" - тип ҡысҡырып ебәрә. "Мин үҙемдең вәғәҙәмде үтәйем дә инде, - ти бур. - Мин бер ни ҙә урламайым. Ләкин ғәҙәтемде ҡайҙа ҡуйайым? Төн уртаһында ниҙер урларға сыҡмаһам, йоҡлай алмайым. Миңә бер йыл буйы йоҡламаҫҡамы ни улай булғас? Һин бит изге йән. Һин мине лә йәлләргә тейешһең. Мин бер ни ҙә урламайым. Был әйберҙәр бер ҡайҙа ла юғалмай, улар бер сумаҙандан икенсеһенә генә күсә һәм һәр саҡ табыла. Хаж сәфәренән ҡайтҡас, миңә бит тағы ла ошо ғәҙәтемә буйһонорға тура киләсәк, шулай булғас, мин ул оҫталығымды оноторға тейеш түгелмен..."**

**Бына шулай, һәр кем үҙ ғәҙәттәренең ҡорбаны. Ғәҙәттәрең һәр ваҡыт һинең менән идара итә. Шунан инде һин тотҡон, ҡол тормошо менән йәшәйһең. Төрмә һинең ғәҙәттәреңдән, һин ҡылған ҡылыҡтарҙан хасил була..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 23014

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
14 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 487